ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 декабрь (аҡъюлай) 2017

№48 (778)

15 йыл

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • Һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Республика өсөн яуаплылығыбыҙ уртаҡ



5

Руслан Яманбаев - спорттағы хазиналарҙың береһе ул



8-9

Урал тауҙарына велосәйәхәт...



12-13

Дебет шәлеңә уран...



15-16

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 декабрҙән 10 декабргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ДО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 508 һум 92 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I-II группа инвалидтары - 458 һум 76 тингә яҙыла алаһығыҙ. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә лә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең 15 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сәйәси золом йылдары башҡорт тарихында тағы бер ҡанлы бит иҫәпләнә. Ошо турала йәштәргә нимәр һөйләр инегеҙ?

***Ғизетдин ИРҒӘЛИН, тарих фәндәре кандидаты, архив эштәре буйынса белгес, БАССР-зың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда ла, йыл һайын сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу көнө һәм шул айҡанлы төрлө саралар үткәрелеп килә. Быйыл 30 октябрь көнө Өфөләге Еңеүҙең 50 йыллығы скверында ойошторолған ана шундай сарала минә лә ҡатнашырға тура килде. Унда беҙҙе иң тәүҙә ошо ҡанлы ваҡиғалар тураһында һөйләүсе эксклюзив документтар, баҫылып сыҡҡан китаптар, тарихи очерктар һәм башҡа экспонаттарҙан торған күргәҙмә ҡаршы алды. Ошонда уҡ митинг башланып китте, сығыш яһаусылар золом ҡорбандары булған туғандары, күренекле шәхестәребеҙ хаҡында иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Эйе, илебеҙ тарихында төҙәлмәҫ яра ҡалдырған был вәхшәтлек хаҡында бик күпте һөйләргә булыр ине: материалдар иҫ киткес күп, ә тема төрлө яҡлы һәм киң, сөнки илдә репрессия бер нисә этаптан торған. Тәүгеһе унын 1929-1932 йылдарҙы үҙ эсенә алып, хәлле һәм урта хәлле крәҫтиәндәрҙе, мулла-мөәзиндәрҙе Себер һөрөүҙән ғибәрәт була. Хатта бер баш аты йә һыйыры булғандарҙы ла һөргәндәр, ерен, малын, өйөн, йорт-хужалыҡ кәрәк-яраҡтарын, башҡа милкен тартып алғандар. 1931-1932 йылғы аслыҡ күбеһенсә шуның менән дә аңлатыла: ерҙәр эшкәртелмәй, ашлыҡ сәселмәй ҡала, малдар конфискациялана. Икенсе этап 1937-1938 йылдар - иң шомло, ҡанлы ғәрәсәткә тиң. ВКП(б) Үҙәк Комитетының Партия контроле комиссияһы ағзаһы Сахъянованың, Башҡортостанда халыҡ дошмандарына ҡаршы көрәш алып барылмай, тип, Сталинға яҙған ошаҡ хатынан һуң, революцияла ҡатнашып, аҙаҡ илде коллективлаштырыу һәм индустриялаштырыуҙа ошо идеяға йәне-тәне менән бирелгән алдынғы ҡарашлы, белемле кешеләр, партия, совет органдары етәкселәре, колхоз рәйестәренең баштары китә. Мәскәүҙән килеп, пленум үткәреп киткән Ждановтың "эшмәкәрлеге" хаҡында күптәр беләләр, тип уйлайым, сөнки был хаҡта күп яҙылды, шуға был темаға туҡталып тормайым. Партия өлкә комитетының беренсе секретары Яков Быкин, икенсе секретарь Әхмәт Иҫәнсурин, Башсовнарком рәйесе Зинәтулла Булашев, Мәскәүҙә эшләгән Шәрифә Тимерғәлина, комбриг Муса Мортазиндарҙан башлап, башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте активистары "милләтсе, вәлидовсы" мөһөрө менән ғәйепһеҙгә атып үлтерелә. Уларҙан ҡала - әҙәбиәт һәм сәнғәтебеҙҙең иң талантлы вәкилдәре юҡ ителә йә булмаһа, лагерь һәм төрмә тотҡонда яфа сигергә мәжбүр ителә. Сағыштырыу ҡулланып, башҡорт йәмғиәтенең "ҡаймағы ғына" һөҙөп алына, тип әйтергә була. Ә бит репрессияға тиклем Башҡортостан һәр йәһәттән йылдам үҫеш ала башлаған төбәк булараҡ танылыу яулай. Тап ошо осорҙа быңдай кадрҙар ҡырғынынан республика иҡтисады бик ҙур зыян күрә: 1939 йылдан халыҡ хужалығы артта ҡала башлай. Ә бит 1919 йылда Башҡортостан Республикаһы менән Рәсәй хөкүмәте араһында төҙөлгән һәм ҡул ҡуйылған Килешеүҙә милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан кешеләр хоҡуҡтарының тейелгеһеҙлеге, уларҙы яуапҡа тарттырмау тураһында махсус пункт та була. Сталиндың шәхес культы замандында, үҙегеҙ белеүегеҙсә, бер ниндәй закон да, ил Конституцияһы положениелары ла һанға һуғылмай, киреһенсә, тупаҫ рәүештә боҙола. Юҡҡа ғынамы ни, был осорҙо тарихсылар "вакханалия" тип атай.

СССР-ҙың тәүге һәм һуңғы президенты М. Горбачев власҡа килеп, яңырыу, асыҡлыҡ принциптары иғлан ителгәс, минә йылдар буйы архивта туҙанланып ятҡан бик күп документтарҙы күтәреп, сәйәси золом кампанияһының ошоғаса билдәле булмаған биттәрен, тарихи мәғлүмәттәрҙе матбуғатҡа сығарырға, очерк һәм мәҡәләләр яҙырға, золом ҡорбаны булып, аҙаҡ аҡланған кешеләрҙең исемлеген төҙөшөргә тура килде. Шуларҙы уҡып, сәйәси золом ҡорбандарының төрлө төбәк һәм ҡалаларҙа йәшәгән балалары, туғандары минең менән бәйләнешкә инде. Әхмәт Иҫәнсуриндың Мәскәүҙә йәшәгән улы, Зинәтулла Булашевтың улы, Яков Быкиндың ҡыҙы һәм башҡа бик күптәр Башҡортостанға килеп китте, һәм мин улар менән күҙмә-күҙ осрашып, уларға атайҙары хаҡындағы китаптарымды бүләк итеүгә һәм яҡындан аралашыу форсаты тейеүгә бик шатмын.

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# ШИҒРИ ҺҮҘ...

## лайыҡлы баһаланды

**"Йөрәк һүҙе" телепроекты зәңгәр экрандарға сыға башлағанда уҡ иғтибарҙы йәлеп иткәйне. Хәтерҙә ҡалмаҫ йөҙ төрлө йырҙар араһында ҡапыл пәйҙә булған таныш йөҙҙәр бирелеп китеп шиғыр уҡый. Һәр кеме үҙенсә, үҙе белгән интонацияла, үҙенә хас тембрҙа, үҙ етешһеҙлектәре һәм оҫталығы менән башҡара. Эшенде, хәбәренде, хатта уйҙарыңды онотоп, экранға текәләһең...**

(Дауамы 11-се биттә).



Шиғриәт бәйгеһендә еңеүселәр - шағирә Зөлфиә Ханнанова ҡыҙы Гүзәл менән.

12+

✓ Ҡалаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла хатта хәҙер хоккей ҡумталары төҙөп ултыртып бөттөләр. Балалар рәхәтләнеп уйнай, тик киләсәктә береһе лә хоккейсы йә футболсы булып китергә ынтылмай.



БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## ТӨРТМӘ ТЕЛДӘР КҮҢЕЛДЕ БИҘҘЕРӘ

Минең бик яҡын бер әхирәтем бар мине. Аҙна һайын минә ҡунаҡҡа килә. Мин уны йылмайып, ихласлап, һөйөнөп ҡаршы алам, алып килгән күстәнәстәренә үҙемдең һыйҙарымды ҡушып, хәл-әхүәл һорашып, донъя хәлдәрен барлап, сәй эсәбеҙ. Һуңынан ул тәҙрә аша урамға ҡарап: "Һин шундай бәхетлеһең. Өй алдың тулы йәшеллек. Ниндәй мөһабәт тирәктәр. Ҡайһылай матур шаулайҙар", - тип һоҡланыуын белдерә. Тик хушлашып, ҡайтырға сыҡҡас, һәр ваҡыттағыса, миңә ҡарата күңелде китерҙәй берәй төртмә һүҙ ысҡындырмай ҡалмай. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, уның һүҙҙәренә үпкәләмәскә тырышам, түҙәм. Дуҫлығыбыҙ шулай байтаҡ йылдар дауам итте.

Яңыраҡ ул фатирымдан күсеп киттем. Башҡа әхирәттәрем барыһы ла әле йәшәгән фатирымды күрергә килеп китте, әммә, ниңәлер, баяғы төртмә тел әхирәтемде генә ҡунаҡҡа саҡырырға ҡыймайым, уға шылтыратканым да юҡ. Ҡулым күтәрелмәй, күңелем тартмай ҙа ҡуя. Ул минән ҡайтып киткәс, һәр саҡ күңелемә ҡыйын булып, уйлана инем. Беҙҙең яҙмыштарыбыҙ ҙа, һөнәребеҙ ҙә оҡшаш, үҙебеҙ йәштәшбеҙ ҙә. Тик мин бер кемгә лә ауыр һүҙ әйтә алмайым - холҡомдоң шул яғы беҙҙе бер-беребеҙҙән айыра ла инде.

Әй, тағы бер айырмабыҙ бар икән. Бер саҡ сәй эсеп ултырғанда әхирәтемә һорау биргәйнем: "Дуҫҡайым, һин бала саҡ төштәреңдә юғарыға, күктәргә оса инеңме?" Ул: "Юҡ, бер ҙә осҡаным булманы", - тип яуапланы. Мин эстән генә, беҙҙең холҡобоҙҙоң тағы бер айырмаһы шундалыр, тип һығымта яһағайным. Исмаһам, бала саҡ төштәреңдә булһа ла осмағас, осоу хисен дә, ихласлыҡты ла, шунан килгән күңел еңеллеген дә тойоп булмайҙыр шул инде ул...

## РУХ ҠАНАТЫБЫҘ ҠАЙЫРЫЛМАҺЫН!

"Үҙгәртеп ҡороу" башланған йылдарҙа уҡ оло ғына апай инем инде мин. Ул "үҙгәртеп ҡороу" тәрән, төпһөҙ упҡын булып төшөмә инде бер саҡ. Мин ҡаяла ҡурҡып баҫып торам. Шул саҡ үҙемдең бала сағым - бәләкәй ҡыҙсыҡ осоп килеп сыҡты ла: "Ҡулыңды йәй, апай, ҡурҡма, упҡындарҙы осоп үтерһең. Онотма - һин оса беләһең", - тине. Ҡыҙыҡ, фәһемле төштәр күреп уянһаң, көнө буйы йылмайып йөрөйһөң. Был төштәр һинең рухың ҡанатлы булыуына ишаралыр. Ә рухы ҡанатлылар барыбер бер ел-дауылдарға ла бирешмәй бит ул. Беҙҙең халҡыбыҙҙың да ана шул рухи ҡанаты ҡайырылмаһын...

**Айгөл АХУНОВА.**

БЫЛ АЙҘА...

# АҠЪЮЛАЙҒА - БЕҘҘӘН АҠ ЮРАУҘАР

**Йылдың тажы - декабрь ҙә килеп етте. Бындай сағыштырыу урынлылыр кеүек: тотош йылды йомғаҡлап, уның ҡиммәтенә баһа биреүсе ай ул - аҡъюлай. Сана юлы төшөп, йылға-күлдәр боҙ менән ҡаплана, ниһайәт.**

Ҡар, тигәндән, декабрҙә лә ҡара ерҙә йөрөп яткан йылдарыбыҙ булып тора былай. Быйыл, мәҫәлән, Башҡортостанда ноябрь аҙағына тиклем саң борлап ятҡан биләмәләр күп әле. Шуға күрә, хәҙер көн торошон алдан юрап, һемәйеүең "һә" тигәнсә! Боронҙан күп йыллыҡ күҙәтеүҙәргә нигеҙләнеүсе фенолог юраузарының да юш килмәгән осраҡтары йышайҙы: климат шарттары айлап түгел, көнләп үҙгәрә бит, иртәгә ни булыры билдәһеҙ. Элекке кеүек, "тәбиғәттең яман көнө юҡ", тип йырлап булмай инде хәҙер. Тәүҙә, метеорологтар ни әйтә икән, тип, иртәгәне көнгә фараздарҙы ҡарап алырға тура килә, гәрсә улары ла электэлектән әллә ни абруй ҡаҙана алмаһа ла. Ни тиһәң дә, Яңы йылды шаптырлап яткан рашҡыла йә бөтөнләй ҡарһыҙ ҡаршыларға ғына яҙмаһын, ҡышы - ҡыш, йәйҙәре шау йәй генә булып торһа ине.

Әмәлгә ҡалғандай, аҡъюлай Хоккей көнө **(1)** менән башланып китә икән дә! Һөнәрмән спортсыларыбыҙ хаҡында һүҙ бармай, улар йыл әйләнәһенә боҙҙа шыуһа ла, көйәрмәндәрен көйҙөрөүҙән бушамай. Көн үтһен, сабата туҙһын, тигәндәй йөрөйҙәр бит. Дөрөҫ, аҡсаһы килеп тора - нинә көсәргәнергә? Башҡортостан даны өсөн янып, сәмләнеп уйнарлыҡ үҙ егеттәребеҙ кәрәк шул командаға. Был юҫыҡта ҡала һәм ауыл малайҙары күҙ алдына килә. Бына кемдәр киңәнәсәк ысын ҡыштың ҡарлы-боҙло көндәренә: дәрестән сығыу менән энер төшкәнсе сәкән һуға улар хоккей майҙансыҡтарында. Милли батырыбыҙ исемен йөрөткән республика хоккей командаһын "гастролерҙарҙан", ҙур аҡсаға ялланып уйнаусыларҙан түгел, ә үҙ егеттәребеҙҙән туплау, әлеге мәктәп, йорт яны боҙонда уйнаған үсмерҙәрҙән һайлап алып, махсус команда составында күнектереү тураһында баш ватамы икән кем дә булһа? Ниңә башҡорт егеттәре хоккей, футбол ярата, ләкин уйнамай? Был теманы "Киске Өфө" гәзитенең күтәреп сыҡҡылағаны булды, ләкин халҡыбыҙ араһында был спорт төрҙәренең киң тарала алмауын бәгзе берәүҙәрҙең милләт үҙенсәлектәре, физиологик сәбәптәргә һылтауы менән һис тә килешеп булмай. Ҡыҫҡа ғына итеп, ойоштороусыһы, фанаты юҡ, тип кенә әйтке килә. Ҡалаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла хатта хәҙер хоккей ҡумталары төҙөп ултыртып бөттөләр. Балалар рәхәтләнеп уйнай, тик киләсәктә береһе лә хоккейсы йә футболсы булып китергә ынтылмай. Әйткәндәй, Бөтөн донъя футбол көнө лә **(10)** ошо ҡышҡы айҙа билдәләнә.

Айҙың тәүге битен асыусы тағы бер көн хаҡында ла әйтеп китеү фарыҙҙыр. Бөтөн донъя СПИД менән көрәш көнөн дә **(1)** ошо датаға бәйле генә иҫкә төшөрә башланылар, буғай. Ә шул уҡ ваҡытта былтыр БМО Рәсәйҙә ВИЧ эпидемияһының үҙәге тип иғлан итте. Илдең рәсми статистикаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, быйылғы йылдың тәүге яртыһына Рәсәйҙә ВИЧ-инфекция йөрөтөүселәр һаны 1 млн 167 мең 581 кешегә еткән. Сирлеләр һанының арта барыуы буйынса Рәсәй Көньяҡ Африка менән Нигерианан ҡала 3-сө урында килә. СПИД-ҡа ҡаршы көрәш буйынса Рәсәй федераль фәнни-методик үҙәк етәксеһе В.Покровский фекеренсә , бындай сирлеләргә дауалаусы махсус препараттар өсөн бюджетҡа етерлек кимәлдә аҡса бүленмәүе хәүеф һәм ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра икән.

Уйлап ҡараһаң, аҡса кәрәкмәгән берәй өлкә йәки әҙәм балаһы бар микән һуң беҙҙең илдә? Аҡса бөтәһенә лә кәрәк, айырыуса аҙ тәьмин ителгән социаль төркөмгә, ҡарттарға, сирлеләргә... Дәүләттән ярҙам булмағас, күптәр һоранырға мәжбүр: йәмәғәтселеккә, шәфҡәтлелек фондтарына мөрәжәғәт итә улар. Шундай осраҡтарҙа кеше хәстәрен ҡайғыртҡан тағы бер ойошма бар икән. **5 декабрҙә** ана шул мәрхәмәтлек илселәре - Иҡтисад һәм социаль үҫеш хаҡына халыҡара ирекмәндәр (волонтерҙар) көнө билдәләнә. Улар сафына йәмғиәт мәнфәғәтенә бушлай эшләүсе, ҡулдарынан килгән ярҙамды күрһәтеүсе миһырбанлы кешеләр тупланған. Ирекмәндәр уларҙың хеҙмәте һәм ярҙамы кәрәк булған бөтөн ергә өлгөрергә тырыша: биләмәләрҙе сүп-сарҙан таҙарта, балалар һәм ҡарттар йорттарына килеп ярҙам итә, авария-һәләкәт эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнаша - ҡыҫҡаһы, тормош (һәм, бәлки, - дәүләт) тарафынан ҡыйырһытылғандарҙы хәстәрләй. Шуныһы ҡыҙыҡ: иң күп

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Сәйәси золом йылдары башҡорт тарихында тағы бер ҡанлы бит иҫәпләнә. Ошо турала йәштәргә ниҙәр һөйләр инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Дамира СӘЙӘХОВА, хеҙмәт ветераны:*** Граждандар һуғышы йылдарында атайым Мифтах Ғимай улы Муса Мортазин бригадаһы составында взвод комиссары булып хеҙмәт итә. Һуғыштан һуң ул Йылайырға партия эшенә ебәрелә. Шунда эшләгән сағында 1924 йылда башҡорт шағиры һәм милли азатлыҡ хәрәкәте активисы Шәйхзада Бабичтың йырҡыстарса язалап үлтерелеүенә 5 йыл тулыу айҡанлы матәм митингыһы үткәрелә. Шунда атайым да сығыш яһай. Бер аҙҙан атайым Баймаҡ баҡыр иретеү заводына директор итеп күсерелә. Ошонда эшләгән йылдарында Баймаҡҡа билдәле комбриг Муса Мортазин эш менән килә. Тәбиғи, улар атайым менән осрашып-күрешәләр. Муса Мортазин шул саҡ аҙна тирәһе беҙҙә фатирҙа тора. Илдә ҡот осҡос дәһшәтле хәл - сәйәси репрессия ҡубып, "халыҡ дошмандары" тип иғлан ителгән кешеләрҙе ҡулға алыуҙар башланғас, сират атайыма ла етә. Улар төндә килә ине. 1937 йылда беҙгә лә шулай көтмәгәндә, беҙ йоҡлаған саҡта - төн уртаһында килеп ишек ҡаҡтылар. Тәүҙә өйҙең аҫтын-өҫкә килтереп тентенеләр. Өйберҙәрҙе бырағтырып бөттөләр. Ниндәйҙер ҡағыҙҙар, документтар, китаптарҙы алдылар һәм атайымды алып сығып та киттеләр. Шул китеүҙән ул әйләнеп ҡайтманы... Уны вәлидовсылар, йәғни "халыҡ дошмандары" менән бәйләнештә ғәйепләйҙәр. Өҫтәүенә, заводта иретеү мейестәрен яңыртып ҡороуҙы ваҡытында өлгөртә алмағанлыҡтан, етәксе булараҡ, атайыма эшләгән ерендә зыян килтереүҙә, предприятиела хәүефһеҙлек техникаһын боҙоуҙа нахаҡ ғәйеп ягалар. Әсәйем төрмәгә күрешергә барғанында, атайым: "Мине 11 тәүлек яңғыҙ камерала тоттолар, тик мин бер кемгә лә яла яҡманым", - тип әйткән. Атайымды 10 йылға иркенән мәхрүм итергә хөкөм сығарылған. Шуның ике йылын ул Өфөләге төрмәлә ултыра. Аҙаҡ ҡайтанан тикшереү үткәрелә һәм тәүге срогы 5 йылға кәметелеп, Сахалин лагерына һөргөнгә ҡарар ителә. Ләкин беҙ башҡаса унан бер

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов 30 ноябрҙә республиканың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һигеҙенсе тапҡыр Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны. Гәзәттәгесә, республика етәксеһенең сығышында төп урынды иҡтисад мәсьәләләре биләй, сөнки нәҡ иҡтисад мәҙәниәт, мәғариф өлкәләре, тәрбиә биреү процесы менән бәйле мәсьәләләрҙе уңышлы хәл иткән төп нигеҙ булып тора. Төбәк Башлығы кешеләрҙең йәшәү сифатын яҡшыртыу һәм республиканың артабанғы үҫеше темаһына йыл һайын иғтибар бүлә.

✓Башҡортостанда һайлауҙар ойошҡан, асыҡ һәм гәзәл үтәсәк, тип белдерҙе үҙ фекерен "Рәсәй - Башҡортостан радиоһы"на интервьюла республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. Башҡортостанда йыл һайын тиерлек һайлауҙар уҙа, тип билдәләне төбәк етәксеһе. 2018 йылдың мартында республика халҡы Рәсәй Федерацияһы Президентын, ә сентябрҙә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын һайлаясаҡ.

✓2017 йылдың аҙағынаса бер ай ваҡыт ҡалды. Башҡортостандың баш ҡалаһы яңы йылды ҡаршыларға әүҙем әҙерләнә. Ҡаланы гирляндалар, төрлө төҫлө һындар, шыршылар, боҙ ҡаласыҡтары менән биҙәйҙәр. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың баш ҡалаһында боҙ ҡаласыҡтарының һанын кәметергә һәм ике Яңы йыл шыршыһы: Конгресс-холл артындағы майҙанда һәм ҡала Советы алдында ҡуйырға тәҡдим иттеләр.

✓Санкт-Петербургтағы башҡорт йәштәре "Эврика" үҫмерҙәр һәм йәштәр клубына йыйылды. Сараға Башҡортостан Республикаһы мосолмандары Диниә назаратының мөфтөйҙең беренсе урынбаҫары Айнур Арыҫланов, "Тархан" көрәшселәр клубы вәкиле Илдар Таймасов, башҡорт эстрадаһының йәш башҡарыусылары Тимур Ямалов һәм Илгиз Абдрахманов ҡунаҡҡа килде. Әле улар Санкт-Петербургта мосолман дин эшмәкәрҙәренең квалификацияһын күтәреү курстарында уҡый.

✓Ноябрь айы "Салауат Юлаев" хоккей командаһы өсөн еңелдән булманы. Улар бөтәһе 9 уйын уҙғарып, шуларҙың икәүһендә генә еңеү яуланы. Юлаевсыларға "Кунлунь Ред Стар" һәм Ҡаҙандағы матчта "Аҡ барс" менән осрашыу уңышлы булды. Әлеге мәлдә Өфө егеттәре КХЛ-дың Көнсығыш конференцияһында 53 мәрәй менән турнир таблицаһының 8-се баҫҡысын биләй.

***✓ Был баҫалҡы спортсы Рәсәйҙәге ауыр сирле балаларға 10 миллионын күсерә килгән. Ул Рәсәйҙәге уғрылар һәм ришүәтселәр ҡылығына ни тиклем сағыу антоним булыуы менән һушты алырлыҡ.***



ирекмәндәр (57 процент) Норвегияла йәшәй, унан - Люксембургта (55 процент), ә Рәсәйҙә улар 10 процентҡа саҡ тула. Тормош һәйбәт булған илдәрҙә уларҙың күплеге шуның менән аңлатыла: улар беҙҙең кеүек, нисек итеп тамаҡ аҫрау хәстәре менән йәшәмәй. Эше бар, тормошо етеш булғас, башҡалар хаҡында ҡайғыртыу ихтыяжы үҙенән-үҙе тыуалыр инде, күрәһең. Беҙҙә лә күп яҡшы йәшәгәндәр, тик улар аҡсаларын сит ил офшорҙарына йәшерергә ғәҙәтләнгән. Бар, әлбиттә, шәфҡәтлелеккә хәләл көсө менән тапҡан аҡсаһын да йәлләмәгән бармаҡ менән һанарлыҡ шәхестәр беҙҙә лә. Шуларҙың берәгәйлеһе, "ҡуш йөрәкле" ир-азаматы, үкенескә күрә, авиакатастрофала һәләк булған "Локомотив" хоккей командаһы капитаны Иван Ткаченконың ҡаһарманлығы иҫкә төшә. Был баҫалҡы спортсы, исем-шәрифен әйтмәй ҡалыуҙы хуп күреп, 4-5 йыл буйына Рәсәйҙәге ауыр сирле балаларға хәләл тирен түгеп тапҡан аҡсаһының 10 миллионын күсерә килгән. Был миҫал осраҡлы иҫкә төшмәне, ул Рәсәйҙәге уғрылар һәм ришүәтселәр ҡылығына ни тиклем сағыу антоним булыуы менән һушты алырлыҡ. Дәүләттекен урлап йыйған миллиардтарынан, саҙаҡа булһын, тип, бер тинен сирлеләргә бирә микән уғрылар? Халыҡ-ара коррупция менән көрәш көнө **(9)** айҡанлы ғына түгел, ҡулға алынған һәм алынмаған коррупционерҙар хаҡында уҡыған һайын уйландыра был.

Көрәш, әлбиттә, йәнле генә башланып киткәйне лә (ниндәй эре "суртандар" ҡапты ҡармаҡҡа!), тик нисек ҡапыл башланһа, шулай тамамланырға ла оҡшай, ахыры. Бер нисә шау-шыулы ҡулға алыуҙар "күрһәтмә сығыш" ҡына булдымы ни инде? Уларының да бит һөҙөмтәһе "еңелсә ҡурҡытыуға" оҡшаш. "Суртандар"ҙың береһе өйөндә рәхәтләнеп шиғыр яҙып ултыра, икенсеһе "сирләп" китеп, уңайлы палата талап итә, өсөнсөһө бер нисә фатирынан табылған тоҡ-тоҡ миллиардтарын кире ҡайтарырға йыйына. Һәм ҡайтарыр ҙа, сөнки уның адвокаты: "Милеккә күпме күләмдә эйә булыу кимәле законда сикләнмәгән", - тип әйтеп һалды ла инде. Рәсәй Федерацияһы БМО Конвенцияһының "Законһыҙ байығыу", "Конфискациялауҙа халыҡ-ара хеҙмәттәшлек булышлығында милекте тартып алыу механизмы", "Активтарҙы ҡайтарыу һәм ҡарамаҡҡа алыу" кеүек коррупцияға ҡаршы көрәштә принципиаль статьяларҙы ратификациялаған хәлдә лә, улар Рәсәй закондарының ҡайһы бер положениеларына ҡаршы килә, тигән һылтау менән ҡулланылмай. Хәйер, законһыҙ байығыусылар өсөн беҙҙең закондарҙағы "артҡы ишектәр"ҙең ҡотолоу юлы булып хеҙмәт итеүе бер кемгә лә сер түгел. Бына һиңә - мә! Тимәк, көрәш урынына - күҙ буяу?..

Аҡъюлайҙағы тағы ике көнгә ҡыҫҡаса туҡталмау мөмкин түгел. РФ Конституцияһы **(12)** һәм БР Конституцияһы **(24)** көндәре улар - ҙур һәм кесе ватаныбыҙҙың төп закондары. Һуңғы ваҡыт киң мәғлүмәт сараларында, интернет селтәрендә 1993 йылда ҡабул ителгән был конституцияларҙың береһен - Рәсәйҙекен - ҡабаттан ҡарау, хатта ки яңыһын ҡабул итеү ихтималлығы хаҡында һүҙ ҡуйыртыла. Дәүләт Думаһы депутаты, КПРФ ағзаһы, билдәле режиссер В.Бортконың РФ Конституцияһының ҡайһы бер положениеларын үҙгәртеү кәрәклеге хаҡындағы белдереүе мәсьәләне тағы ла ҡуҙғыта төштө. "Бүрәнә аша бүре" күреп өйрәнгән бәғзе берәүҙәр был имеш-мимештәрҙе киләһе йылда ла В.Путиндың президент булып ҡалырға йыйыныуына бәйләй. Ләкин, билдәле булыуынса, РФ Президенты үҙенең бындай ниәте хаҡында бер ниндәй рәсми белдереү яһағаны юҡ әле. "Утһыҙ төтөн булмай",тигәндәре раҫ килерме әллә юғиһә? Ни булһа ла, фәҡәт яҡшыға - ил нигеҙен артабан нығытыуға, ябай халыҡтың тормош кимәлен күтәреүгә табан аҙым яһалһа ине, ниһайәт, тигән уй менән бөтәһен дә изгегә юрайыҡ, ваҡытынан алда сөй эҙләмәйек. Республикабыҙ Конституцияһы менән дә ғорурланайыҡ, ни тиһәң дә, ҡырын һапларға ятҡан "үтә аҡыллы" сәйәсмәндәрҙең илдәге федератив төҙөлөш системаһы төшөнсәһен һанламайынса, милли республикаларҙы "үҙ-ҙәренә өҫтөнлөк талап итеүсе айырым төбәктәр" тип кәмһетергә, танымаҫҡа маташыуҙарына ҡарамаҫтан, шөкөр, кесе ватаныбыҙ - законлы дәүләтселегебеҙ, уның төп закондары йыйылмаһы - Конституциябыҙ бар һәм буласаҡ. Рухыбыҙ, илһөйәрлегебеҙ ныҡ булһа, илебеҙ ҙә ныҡ торор, бирешмәҫ.

Башҡа айҙарҙағы кеүек, аҡъюлайҙа ла һөнәри байрамдар, иҫтәлекле көндәр байтаҡ: Юристар **(2)**, Ғәриптәр **(2)**, Информатика **(4)**, Бөтөн донъя балалар телевидениеһы һәм радиоһы **(9)**, Кеше хоҡуҡтары **(10)**, ЗАГС хеҙмәткәрҙәре **(18)**, Энергетиктар **(22)**, Ҡотҡарыусылар **(27)** көндәре, шулай уҡ Халыҡ-ара тауҙар **(11)** һәм Халыҡ-ара сәй **(15)**, Халыҡ-ара кино (28) байрамдары билдәләнә. **30 декабрь** элгәре байрам булараҡ ҡабул ителеп тә, бөгөн, үкенескә, календарь биттәренән төшөп ҡалған тағы бер тарихи дата - СССР төҙөлөүгә 95 йыл тула. СССР-ҙа тыуып үҫеп, йәшәгән кешеләр өсөн бер аҙ моңһоуыраҡтыр ҙа, бәлки, ләкин "бөйөк державаның" сиктәре кителеп төшөү менән беҙҙең проблемалар, үкенескә, Советтар Союзында тороп ҡалманы...

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**2** - Әҙәби тәнҡитсе, шағир, филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты, яҙыусы **Фәнил Күзбәковҡа - 65 йәш** (1952).

**3** - Яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Йыһат Солтановҡа - 80 йәш** (1932).

**5** - Бейеүсе, балетмейстер, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Риф Ғәбитовҡа - 65 йәш** (1952).

**8** - Тележурналист, прозаик, драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сәрүәр Суринаға - 60 йәш** (1957).

**16** - Ҡумыҙсы-музыкант, РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Роберт Заһретдиновтың тыуыуына - 85 йыл** (1932-2016).

**30** - Ғалим, геология-минералогия фәндәре кандидаты, журналист, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Диҡҡәт Бураҡаевтың тыуыуына - 85 йыл** (1932-1981).

Декабрҙә шулай уҡ БАССР Журналистар союзы ойошторолоуға 60 йыл тула (1957).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

ниндәй хәбәр ала алманыҡ: ғәйеп булды. Тик күп йылдар үткәс кенә белдек: атайым 1942 йылда уҡ һәләк була. "Йөрәк сиренән" үлгән, йәнәһе... Ул осорҙа кешеләр яҡындарын юллауҙарына бер ниндәй аңлатмаһыҙ-ниһеҙ ана шундай ҡыҫҡа ғына хәбәр алалар ине...

***Файза ҒҮМӘРОВА, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Сәйәси золом миллионлаған кешенең ғүмерен ҡыйыу менән генә сикләнмәне, уларҙың балаларының балалары яҙмышына ла "халыҡ дошманы балаһы" тигән мөһөр баҫты. Шулай бер йәшерәк саҡта эшем буйынса белеп-күреп йөрөгән билдәле генә яҙыусы, һүҙҙән һүҙ сығып, минең ҡайҙа тыуғанлығымды һорай ҡуйҙы. Уны-быны уйламаҫтан: "Томск өлкәһендә",- тип әйтеп тә бөтмәнем, был: "Ә-ә, һин кулак балаһы икән!" - тип ҡысҡырып ебәрмәһенме. Минең биткә килтереп сәпәнеләрме ни шунда... Ныҡ хәтерем ҡалды ул кешегә. Әйтерһең дә, мин ниндәйҙер ғәйеп эшләп тотолдом. Аҙаҡ ауыҙҙы үлсәп кенә аса башланым, тыуған ер хаҡында һүҙ сыҡһа, ата-бабам төйәген әйтәм дә ҡуям. Ике яҡтан да ҡартатайымдар ғаиләләре менән Себер һөрөлгәндә, атайым да, әсәйем дә йәш булғандар, шунда барғас, танышып, өйләнешкәндәр. Атайымдың атаһының үҙ ауылында йәшәп ятҡанында 1 аты, 1 һыйыры булған - бына һиңә "кулак"! Өҫтәүенә, мулла ла булған шул ҡартатайым. Яңы власть, бәлки, шуға ла яратмағандыр инде уны. Һөргөн урынына уларҙың оҙон юлда ниндәй михнәттәр күреп барып еткәнен әсәйем яҙа-йоҙа һөйләп ҡуйғылай ине. Шулары ныҡ иҫтә ҡалған: ҡаҡ вагон иҙәнендә аяҡ баҫырлыҡ урын булмаһа ла, күптәр юл аҙабын күтәрә алмай, асығыуҙан, өшөүҙән сирләп, берәм-берәм үлеп ҡалалар. Бер заман эс киҙеүе башлана. Ҡартатайым ғаиләһенә ҡарағат япрағы менән һабаҡтарын ҡайнатып эсерә һәм улар иҫән ҡала, ауырыуҙарға бирешмәй. Томск өлкәһенә саҡ-саҡ килеп етәләр шулай ҙа, "сыҡмаған йәндәребеҙ генә ҡалғайны", тип һөйләй ине әсәйем. Тәүҙә землянкала йәшәйҙәр, аҙаҡ йорт һалып инәләр. Йәшәй бирә, барыбер тыуған яҡтарындағыса, атлы ла, һыйырлы ла булалар. Өҫтәүенә, умарта ла тоталар әле. 4-5 йәшлек кенә сағымда ҡартатайым менән атайым бал айырғанда эргәләрендә йөрөгәнемде һәм бигерәк тә ана шул Себер балы тәмен мин дә хәтерләйем. Ҡартатайым шундай йүнсел, уңған кеше була шул. Ә ундайҙар хур булмай - ҡайҙа ла йүнен күреп, бына тигән итеп йәшәп китәләр. Тик тыуған яҡ тарталыр инде ҡартатай менән өләсәйҙе. Тәүҙә улар ҡайтып китә Башҡортостанға, аҙаҡ, атайым менән әсәйем, бик теләмәһәләр ҙә, ҡартатайҙар янына ҡайта, сөнки өлкәнәйгән ата-әсәң янында йәшәү хәйерлерәк, тигән ҡарарға килә атайымдар. Хәҙер уларҙың береһе лә юҡ инде. Үҙемдең улдарыма ғаиләбеҙ тарихын һөйләй башлаһам, иламайынса түҙерлек тә түгел. Хәйер, улар ҙурҙар инде хәҙер, үҙ ғаиләләре бар. Ә ейәндәрем бындай тарихты тыңлар өсөн бәләкәйҙәр әле: аңламаҫтар, тип ҡурҡам. Бала аҡылына һыйырлыҡ хикәйәтме һуң бындай вәхшилек! 1921-1953 йылдарҙа бөтөн ил буйынса 4 миллионға яҡын кешенең яҙмышы менән уҫал шаярғандар шулай ҡанһыҙ палач етәкселәр. Шуларҙың 600 меңдән ашыуы атылған, 765 меңе 25 һәм унан күберәк срокка һөрөлгән, ҡалғандары лагерҙарҙа һәм төрмәләрҙә яфа сиккән. Юҡ, юҡ, бындай ғибрәтте мин кескәйҙәремә һөйләргә теләмәҫ инем. Үҫкәс, аңларҙар әле...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Учалы районының Яңы Байрамғол ауылынан "Зәңгәр ҡош" Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашыусы Ләйсән Золотарева проекттың финалына үтте. Тамашасылар ике лидер - Ләйсән Золотарева һәм Варвара Гордеева өсөн тауыш бирҙе. Онлайн һәм смс-тауыш биреү йомғаҡтары буйынса ике йәш артист та бер иш тиерлек тауыш йыйҙы. Тапшырыуҙы ойоштороусыларҙың ҡарары һәм "Рәсәй" каналының уртаҡ фекергә килеүе буйынса ике ҡыҙ ҙа финалға үтте, тип хәбәр ителә проект сайтында.

✓Өфөлә "Йәш ғаилә - 2017" республика конкурсының финалы үтте. Ярыш йомғаҡтары буйынса республика конкурсы Гран-приһына Октябрьский ҡалаһынан Ғилуановтар ғаиләһе лайыҡ булды. Өфө районынан Мәҡсүтовтар ғаиләһе - беренсе, Өфөнән Ғәниевтар һәм Бәләбәй районынан Шәмсетдиновтар икенсе һәм өсөнсө урындар яуланы. Ә уларҙың ярышташтары Минһажетдиновтарға (Аҫҡын районы) һәм Чулковтарға (Ҡалтасы районы) "Иң ҡыйыу ғаилә" һәм "Иң позитив ғаилә" тигән исемдәр бирелде.

✓Башҡортостанда эш аҙнаһы тамамланыуға бәйле транспорт ағымының артыуы көтөлә. Төбәк Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, юл шарттарының ҡатмарлашыу ихтималлығына ваҡытында иғтибар итеү, ҡайһы бер водителдәрҙең һәм йәйәүлеләрҙең юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу менән бәйле хәүефте кәметеү маҡсатында төбәктә рейд саралары уҙғарыла. "Рейдтар эскән водителдәрҙе асыҡлау өсөн ойошторола", - тип аңлаттылар ведомствола.

✓ Өфөлә Халыҡ-ара төрки халыҡтары мәҙәниәте һәм телефестивале бара. Унда Рәсәй һәм сит ил юғары уҡыу йорттарының студент коллективтары һәм айырым башҡарыусылар ҡатнаша. Улар бай конкурс һәм мәғариф программаһында, жюри ағзалары һәм йүнәлештәр буйынса эксперттар, мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһе эшмәкәрҙәре менән осрашыуҙарҙа, оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнаша. Сараны ойоштороусылар - Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм Рәсәй студенттар үҙәге.

✓Рәсәйҙең "Йыл студенты-2017" милли премияһы һөҙөмтәләре билдәле булды. Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты студенты Радмила Дәүләтшина "Йыл журналисы" номинацияһында лауреат исемен яуланы.

**"Башинформ"дан.**

✓ ***Унда Рәсәйҙең 89 мэры ҡатнаша. Рейтингтың төүге өс баҫҡысын Мәскәү мэры Сергей Собянин, Белгород мэры Константин Полежаев һәм Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов биләй.***



*ҠЫҪҠАСА*

# ШЫРШЫНЫ ХАРАП ИТМӘ!

✓ **Башҡортостанда Урман хужалығы министрлығы 27 ноябрҙән 31 декабргә тиклем "Шыршы-2017" ведомство-ара оператив-иҫкәртеү операцияһын ойоштороҙо.** Ылыҫлы ағастарҙы законһыҙ ҡырҡҡан өсөн административ яуаплылыҡ, биш мең һумдан ашыу зыян килтерелгән осраҡта, енәйәти яуаплылыҡ ҡаралған. Административ яуаплылыҡҡа тарттырылған граждандарға - 5 мең, вазифалы кешеләргә - 50 мең, юридик берәмектәргә 400-700 мең һум штраф һалына. Енәйәти яуаплылыҡ ун йылға тиклем ирекһән мәхрүм итеүҙе күҙ уңында тота. Бынан тыш, ғәйепләләрҙе яуаплылыҡҡа тарттырыу килтерелгән зыянды ҡаплауҙан азат итмәй, тип билдәләнеләр министрлыҡта.

✓ **Дәүләт Думаһында "Инвалид" билдәһе эленгән транспорт сараларын тотоуҙы тыйған закон проекты тәҡдим ителгән.** Ғәмәлдәге КоАП нормалары буйынса водитель юл билдәләре тарафынан ҡушылған талаптарҙы үтәмәгән осраҡта транспорт сараһы яҡындағы махсус туҡталышҡа күсерелә, бынан күп осраҡта инвалидтар, шул иҫәптән аяҡтары йөрөмәгән коляскалағы инвалидтар яфалана. "Инвалид" билдәһе менән транспорт сараһын эвакуациялау урынына уны башҡа транспорт саралары йәки йәйәүлеләр хәрәкәте өсөн ҡамасаулыҡ тыуҙырмаған яҡын урынға күсереү тураһында ҡарар ҡабул ителеүе генә мөмкин, тип хәбәр иттеләр Дәүләт Думаһында.

✓ **Башҡортостан демографик хәлде яҡшыртыу өсөн федераль ҡаҙнанан аҡса аласаҡ төбәктәр исемлегенә инде.** Дмитрий Медведев тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Финанс саралар демографик хәле насар булған төбәктәргә 2018 йылда өсөнсө йәки унан һуңғы бала тыуған ғаиләләргә ярҙам күрһәтеүҙе дауам итергә мөмкинлек бирәсәк. Рәсәй Хеҙмәт министрлығы 2018 йылда Программала ҡатнашыу өсөн Федерация субъекттары һайлап алған. Ҡабул ителгән бойороҡ менән 2018 йылда өсөнсө йәки унан һуңғы бала тыуыу менән бәйле ғаиләләргә айлыҡ аҡсалата түләү ярҙамы буйынса сығым йөкләмәләре өҫтәмә финансланасаҡ субъекттар исемлеге раҫланған. Был исемлеккә Федерацияның 60 субъекты ингән.

✓ **Рәсәй Юстиция министрлығында бөтә тәфтиш изоляторҙары камераларына ла мотлаҡ рәүештә телевизор, һыуыткыс һәм кондиционер ҡуйырға тикшерелгән.** Шулай уҡ хөкөм ителгәндәргә колониянан ситтә, әммә ул урынлашҡан муниципалитет биләмәһендә бала менән өҫтәмә оҙайлы осрашыу биреү мөмкинлеге ҡарала. Хөкөм ителгән кешеләргә балалар менән осрашыу һәм уларҙы туғандарында йәки балалар йортона урынлаштырыу өсөн оҙайлы ваҡытҡа сығып йөрөү мөмкинлеген биреүҙәре ихтимал. Бынан тыш, Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенконың мөрәжәғәте менән бәйле ведомство бойороҡ әҙерләгән. Уға ярашлы, тәфтиш изоляторҙарында ултырғандарға аҙнаһына кәмендә ике тапҡыр 20 минуттан ашыу душ ҡойоноу мөмкинлеге бирелергә тейеш.

✓ **2017 йылда Башҡортостанда 4,2 меңдән ашыу ир-егет бала тәрбиәләү буйынса отпуск алған.** Рәсәйҙә әсәйҙәр урынына бала тәрбиәләү буйынса отпуск алған атайҙар һаны арта. 2016 йылда эшһеҙ булараҡ иҫәптә торған 4 279 кеслә затҡа бала тәрбиәһе буйынса пособие түләнгән. 2017 йылдың төүге 10 айында ошондай 4 261 ир-егет теркәлгән. Был тенденция социаль һәм коммерция ағынан ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ ролдәренең яҡынайыуы менән аңлатыла. Айлыҡ пособиеның минималь күләме беренсе балаға - яҡынса 3,5 мең, артабанғылары өсөн 7 мең һумдан ашыу тәшкил итә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ӨФӨ ҺЫР БИРМӘЙ!



**28-30 ноябрҙә Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университетының IV Халыҡ-ара форумы үтте. Уның эшендә Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та ҡатнашты.**

Сараның почетлы ҡунағы итеп 2013 йылда иҡтисад буйынса Нобель премияһын алған, иҡтисад буйынса донъялағы популяр китаптарҙың авторы Роберт Джеймс Шиллер саҡырылған. Уның йыйылыусылар алдында лекция менән сығыш яһауы ла юҡҡа түгел, сөнки был форум Рәсәй иҡтисадын, идара итеү механизмдарын һәм социаль мөхитте үҫтереүгә бәйле ҡараштар буйынса фекер алышыуҙың мөһим майҙансыҡтарының береһе булып тора. Быйыл ул 70-кә яҡын спикерҙы һәм дүрт мең самаһы ҡатнашыусыны йыйҙы. Дискуссияларҙың төп һорауҙары булып Рәсәй иҡтисадына тәү сиратта нимә кәрәк: цифрлаштырыуҙы йәки эре сәнәғәт проекттарымы, аныҡ секторҙың инвестициялар алыу мөмкинлегеме йәки һөҙөмтәле институттармы, тигән һорау торҙо. Шулай уҡ сәйәсмәндәр һәм иҡтисадсылар, социаль өлкәләге етди реформалар хәүефлеме, әллә улар кәрәкме, тигән мәсьәлә буйынса ла фекер алышты.

Әйткәндәй, РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты 2017 йыл өсөн Рәсәйҙең эре һәм уртаса ҡалаларында йәшәү сифатын баһалау буйынса проектҡа йомғаҡ яһаны. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, Төмән, Грозный, Ҡазан, Санкт-Петербург, Краснодар, Өфө, Новосибирск, Мәскәү, Красноярск, Кемерово ҡалалары айырылып тора. Был ҡалаларҙың мэрҙарына диплом һәм иҫтәлекле статуэтка тапшырылды. Барлыҡ күрһәткестәр буйынса Өфөнөң дөйөм интеграл индексы 79 берәмек тәшкил итә. Тикшеренеү авторҙары бигерәк тә лидер менән араһын ҡыҫҡартҡан Грозныйҙы һәм йәшәү сифатының төп күрһәткестәре буйынса һиҙелерлек алға киткән Өфөнө билдәләй.

- Өфө һуңғы йылдарҙа алға китте, беҙ беренсе категориялағы ҡалалар араһында тәҫөкләндереү буйынса икенсе урында киләбеҙ. Өфө - тәбиғи артым 9 йыл дауамында күтәрелгән һәм ыңғай миграция ағымы күҙәтелгән берҙән-бер миллионлы ҡала. Беҙгә Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәренән киләләр. Өфө ҡалаһының барлыҡ халҡына, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә һәм Башлығына баш ҡалаға күрһәткән ярҙамдары өсөн рәхмәтемде белдерәм, - тип билдәләне Ирек Ялалов.

Шулай уҡ "Рейтинг" мәғлүмәт коммуникациялары үҙәге РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты менән берлектә октябрь-ноябрҙә ил төбәктәре баш ҡалаларының мэрҙары һәм эре финанс-сәнәғәт үҙәктәренең эшмәкәрлеген баһалау буйынса яңы тикшеренеү һөҙөмтәләрен әҙерләп сығарған. Унда Рәсәйҙең 89 мэры ҡатнаша. Рейтингтың төүге өс баҫҡысын Мәскәү мэры Сергей Собянин, Белгород мэры Константин Полежаев һәм Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов биләй.

# БАЙРАМҒА ӘҘЕРЛЕК БАРАМЫ?

**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығына әҙерләнеү һәм уны байрам итеү буйынса республика ойоштороу комитеты ултырышын уҙғарҙы.**

Объекттар төҙөлөшөнөң барышы һәм кураторлыҡ иткән йүнәлештәр буйынса сараларға әҙерлек хаҡында Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта, Башҡортостан Фәндәр академияһы президенты Әлфис Ғаязов, муниципалитет етәкселәре һөйләне. Башҡортостан Сауҙа-сәнәғәт палатаһы президенты Азат Фазлыев юбилейға әҙерләнеүҙә бизнестың ҡатнашлығын телгә алды. Атап әйткәндә, сәнәғәт төҙөлештәре исемлегенә дөйөм 27 миллиард һумлыҡ 51 объект ингән дә инде. Рөстәм Хәмитов проект-смета документтарын әҙерләү, төҙөлөш-монтаж эштәрен башлау йәһәтенән бер нисә объект буйынса артта ҡалыуҙы билдәләне. Ул юбилей объекттарын төҙөү буйынса эште әүҙемләштерергә ҡушты, бюджет аҡсаларын тотоноуҙың һөҙөмтәләлеген контролдә тотоуҙы һәм объекттарҙың смета сығымдарын нигеҙһеҙ арттырыуға ҡул ҡуймауҙы айырым билдәләне, Рөстәм Хәмитов был эшкә етди ҡарарға, Башҡортостан халҡы өсөн яңы төҙөлөштәрҙең мөһим булыуын аңлап эш итергә саҡырҙы.

# ЙӘШТӘР ТӘҠДИМЕ ҠЫҘЫҠ

**Башҡортостандың Йәш депутаттар ассоциацияһы республикала ғаилә медиаторҙарын индереү буйынса закон сығарыу башланғысын тәҡдим итте.**

Башстат мәғлүмәттәренә ярашлы, 2016 йылда Башҡортостанда һәр икенсе никах тарҡалған, был төбәктә тыуымдың кәмеүенә, шулай уҡ кире социаль эҙемтәләргә килтергән, тип асыҡлыҡ индерҙе йәш парламентарийҙар. Улар тәҡдим иткән закон проектына ярашлы, айырылышыу мәсьәләһендә мотлаҡ ғаилә медиаторына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ир менән ҡатын судҡа ғариза яҙғас, уларға ғаилә медиаторына барыу өсөн йүнәлтмә биреү күҙаллана. Хеҙмәт бушлай. Шулай уҡ медиаторҙар штатына бәйле сығымдарҙы ҡаплау өсөн йәш депутаттар дәүләт пошлиналары күләмен арттырыу тәҡдимен индерә. Бындай тәжрибә Рәсәй төбәктәренең береһендә файҙаланылып, үҙенең һөҙөмтәлелеген раҫланы ла инде. Ғаилә медиаторына мөрәжәғәт иткәндәрҙең 70 проценты ғаиләһен һаҡлап ҡалды. 2017 йылдың 27 октябрендә ассоциацияның Ҡоҙәтеү советы менән осрашыуҙа депутаттар шундай башланғыс тәҡдим итте. Шулай уҡ юғарыла һанап үтелгән сараларҙы индергәндән һуң тарҡалған никахтар һанын яҙылған ғаризалар һанынан уртаса 30 процентҡа кәметергә мөмкин. Проект Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышына ебәрелгән. Тиҙҙән йәш депутаттар ошо башланғысты тикшереү һәм аҙағынаса эшләп еткереү буйынса саралар ойоштороррға ниәтләй.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан буйынса "Роспотребнадзор" идаралығында 27 ноябрҙән 8 декабргә саҡлы иртәнге сәғәт 10-дан көндөҙгө 4-кә тиклем ВИЧ-инфекцияһын иҫкәртеү буйынса "ҡыҙыу линия" эшләй башланы. Республика халҡына 8-800-100-47-67 телефоны буйынса төбәктә ВИЧ-инфекцияһының эпидемиологик торошо һәм уны иҫкәртеү һорауҙарына кәңәш бирелә. Республиканың СПИД-үҙәгенә лә мөрәжәғәт итергә мөмкин. "Ышаныс телефоны": 8 (347) 250-04-72.

✓Киләһе йылдың башында Германияның Дрезден ҡалаһында урынлашҡан Рус мәҙәниәт институтында "Башҡортостан - Рәсәй ынйыһы" документаль һәм художество фотолар күргәҙмәһе асыла. Был күргәҙмә Германияла "Германия Федератив Республикаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре" сиктәрендә күрһәтелгәйне инде. Күргәҙмә Галле ҡалаһындағы Мартин Лютер исемендәге Дәүләт университетында тәҡдим ителде.

✓Уҙған ял көндәрендә ауыл хужалығы йәрминкәләре Өфөлә, Октябрьскийҙа, Бөрөлә һәм Янауылда үтте. Өфөләге өс майҙансыҡтың 344 сауҙа нөктәһендә 15 район һатыу итте. Республиканың баш ҡалаһында 1,6 тонна бал, 10 тонна йәшелсә һәм 7,3 тонна картуф һатылған. Бер килограмм балды уртаса 300-400 һумға алырға мөмкин булды, 1 килограмм картуф - 15-18, һуған - 15-20, кишер - 13-22, сөгөлдөр - 15-20, кәбеҫтә 13-25 һум торҙо.

✓Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" кинофестивале билдәһеҙ ваҡытҡа күсерелде. Был хаҡта IV "Көмөш Аҡбуҙат" халыҡ-ара милли һәм этник кино фестивале дирекцияһы хәбәр итә. Ойоштороусылар быны фестивалде үткәргән предприятие - "Башҡортостан" киностудияһын үҙгәртеп ҡороу менән бәйләй.

✓ "Рәсәй. Мәҙәниәт. Башҡортостан" телеканалы тапшырыуы - "СМИротворец" Бөтә Рәсәй конкурсы еңеүселәре иҫәбендә. "Мәҙәни миҙгел. Башҡортостан буйлап сәйәхәт" тапшырыуы, "Кырағай бал" серияһы "Телевидение" номинацияһында өсөнсө урын яуланы. Быйыл конкурсҡа бөтә илдән туғыҙ меңдән ашыу эш ебәрелгән.

✓22 ноябрҙә "Салауат Юлаев" Өфө боҙонда "Аҡ Барыҫ"ты ҡабул итте һәм был осрашыуҙа 0:5 иҫәбе менән еңелде. 29 ноябрҙә Башҡортостан һәм Татарстан баш ҡалаларының ҡара-ҡаршы торошо "Татнефть-Арена"һына күсте. Өфө хоккейсылары ҡапҡаларын ныҡ һаҡланы һәм икенсе "йәшел дербиҙа" минималь иҫәп менән еңеү яуланы. "Салауат Юлаев" киләһе уйынды үҙ боҙонда Минскиҙың "Динамо"һы менән үткәрә.

КӨНАУАЗ

# РЕСПУБЛИКА ӨСӨН ЯУАПЛЫЛЫҒЫБЫҘ УРТАҠ

**30 ноябрҙә Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға сираттағы Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһап, түбәндәге төп мәлдәргә иғтибар йүнәлтте.**



● **Социаль-иҡтисади күрһәткестәр** йәһәтенән республикала тотороҡлоҡ күҙәтелә, күп күрһәткестәр илдәгегә ҡарағанда юғарыраҡ. Мәҫәлән, йылдың 10 айында төп күрһәткестәр түбәндәгесә: сәнәғәт етештереүе индексы - 102,3 процент, берләштерелгән бюджет килеме - 160 миллиард һум, килемгә һалым - 40 миллиард һум (+14 процент), уртаса эш хаҡы - 29,3 мең һум (+6,3 процент), көтөлгән ғүмер оҙайлығы 71 йылдан күберәк. Халыҡтың миграция үҫеше билдәләнә, күп ауырыуҙар буйынса үлем кәмей.

● Республика **юғары технологик һәм фәнгә** нигеҙләнгән тармаҡтар продукцияһының яртыһын сығарыусы төбәктәр иҫәбенә инә. Әммә донъя иҡтисады инновацион йүнәлеш буйынса үҫә: киләсәк - яһалма интеллект, био- һәм нанотехнологиялар, робот техникаһы, виртуаль ысынбарлыҡ, гендар инженерияһы, энергияның яңы сығанаҡтары һ.б. ҡулында. Тимәк, сәнәғәтте (һәм эшмәкәрлектең башҡа өлкәләрен) модернизацияларға кәрәк.

● **Хеҙмәт етештереүсәнлеген** арттырыу буйынса Башҡортостан - маҡсатлы федераль пилот проектҡа (шундай уҡ төбәк программаһы ла әҙерләнәсәк) ингән алты төбәктең береһе. 2025 йылға программала ҡатнашыусы предприятиеларҙа етештереүсәнлек кәмендә 30 процентҡа артырға тейеш. Был күрһәткес буйынса Башҡортостандың илдең топ-10 төбәгенә инеүе күҙаллана. Бының өсөн производство базаһын нығытыу һәм кадрҙарға - тәү сиратта йәш, креатив, һәләтле белгестәргә иғтибар биреү талап ителә.

● Бөгөнгө **мәғарифтың** төп маҡсаттарының береһе булып профориентация, квалификация үҫтереү һәм белем биреү программаларын иҡтисадтың аныҡ талаптарына тап килтереү тора. Бында теорияны - уҡыу йортонда, практиканы производствола үтеү, һөнәри стандарттар (профстандарт) индереү, өҙөклөкһеҙ белем биреүҙе үҫтереү ярҙам итәсәк.

Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы нигеҙендә Һөнәри компетенциялар республика үҙәге республика һәм муниципаль чиновниктарҙың квалификацияһын үҫтерәсәк. Белем алыуҙы ситтән тороп та тормошҡа ашырырға мөмкин, сөнки киләсәктә электрон университеттар, алдынғы ғалимдарҙың онлайн курстары тормошобоҙҙоң айырып алғыһыҙ өлөшөнә әйләнәсәк.

Халыҡтың мәғлүмәт технологиялары өлкәһендәге грамоталылығын үҫтереү буйынса программа булдырыласаҡ һәм ул йәштәрҙе генә йүнәлтелмәйәсәк, ә оло быуын да интернетта һәм кеҫә телефоны сервистары менән эшләргә өйрәнәсәк. Шулай уҡ тормошта мотлаҡ булған дисциплиналар: иҡтисад, эшҡыуарлыҡ, хоҡуҡ, сит телдәр буйынса ла уҡытыуҙар ойоштороласаҡ.

● Бик йыш **һәләтле балалар** - белем усаҡтарын тамамлаусылар икенсе төбәктәргә китә. Уларҙы ылыҡтырыу өсөн яңы урындар: кванториумдар һәм технопарктар (шул иҫәптән ауыл уҡыусылары өсөн - күсмә), алдынғы вуздар базаһында лицейҙар, профиль лагерҙары һәм компьютер мәктәптәре кәрәк.

Республика Хөкүмәте һәләтле балалар менән эшләү өсөн программа - гранттарҙың өҫтәмә системаһын - әҙерләйәсәк.

2018 йылда Башҡортостанда тәбиғи-фәнни йүнәлештәге лицей-интернат асыласаҡ. Шулай уҡ техник яҡтан йыһазландырылған инженер базалы мәктәптәр барлыҡҡа киләсәк. Шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙә һәм синыфтарҙы "ғәҙәти" һәм "элиталы"ға бүлергә ярамай.

● **Балалар туризмын** үҫтереү кәрәк. Бының өсөн Өфө буйлап ҡыҙыҡлы маршруттар ("Рәсәй - минең тарихым" тарихи паркы, "Кванториум", университеттар, музейҙар, театрҙар, Конгресс-холл, "Өфө-арена", аквапарк һ.б.) эшләү зарур. Уҡыусылар һәм студенттар өсөн тарихи паркка инеү бушлай буласаҡ. Маршрут 2018 йылда барлыҡҡа киләсәк һәм ул балаларҙы киләсәктә ҡайҙа уҡый һәм эшләй алыу мөмкинлеге менән таныштырасаҡ.

● **Медицина хеҙмәттәре** һәр кем файҙалана алырлыҡ булырға, ауырыуҙар күрһәткесе кәмергә, ғүмер оҙайлығы артырға тейеш - былар һаулыҡ һаҡлау өлкәһендәге төп бурыстар. Республикала беренсел медицина ярҙамы сифаты яҡшыра. Ҡалаларҙа "Һаҡсыл поликлиника" проекты эшләй: эште дөрөҫ ойоштороу иҫәбенә пациенттарҙы ҡабул итеү оптималләштерелә. Ауылдарҙа фельдшер-акушер пункттары һәм табиб амбулаториялары төҙөү һәм реконструкциялау дауам ителәсәк. Уларға табиптар "Земство докторы" һәм "Земство фельдшеры" программалары буйынса йәлеп ителәсәк. Сирҙәрҙе диагностикалау һәм профилактикалауға баҫым яһарға кәрәк. Алкоголь ҡулланыу, тәмәке тартыу, туҡланыу режимын һаҡламау, үҙаллы дауаланыу - төп дошмандар, диспансерлаштырыу һәм вакцина эшләтеү - дуҫтар. Шуға күрә диспансерлаштырыу киң ҡолас алырға һәм предприятиеларҙа, уҡыу йорттарында, алыҫ ауылдарҙа - бөтөн ерҙә лә үткәрелергә тейеш.

● **Сәләмәт тормош һәм балансланған туҡланыу** йәһәтенән, хоҡуҡ һаҡлау органдарына алкоголь һәм башҡа суррогатты рәхсәтһеҙ һатыуҙы тыйырға, Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығына, муниципалитеттарға - спорт һәм физик культура менән шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырырға, Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығына - һауаны, һыуҙы, тупраҡты бысратыуға юл ҡуймаҫҡа ҡушыла. Насар ризыҡ етештереүселәргә ҡаршы торорға, майҙар, шәкәр, тәмәке, алкоголь ҡулланыуҙы кәметергә. Һәр кемгә шәхсән балансланған туҡланыу, физик көсөргәнеш, кәрәкле препараттар һәм витаминдар программаһы һайлап тәғәйенләргә һәләтле белгестәр һәм үҙәктәр кәрәк.

● **Һаҡланыу (превентив) медицинаһы** мөһим урында торорға тейеш. Республика кардиология үҙәгендә йөрәк ауырыуҙарын иҫкәртеүсе модуль программа эшләнгән, һәм ул илдә иң яҡшыһы тип табылған. Был тәжрибәне башҡа сирҙәр буйынса ла таратыу зарур.

2018 йыл башында Республика медик-генетик үҙәгендә иртә ДНК-диагностика, нәҫелдән күсеүсе һәм киң таралған ауырыуҙарҙы профилактикалау, халыҡты генетик паспортлаштырыу башланасаҡ.

● Башҡортостанда **оло йәштәгеләр** күбәйә. Улар өсөн медицина һәм социаль ярҙам күрһәтеүҙең берҙәм системаһы кәрәк. Республикала махсус гериатрик үҙәк асылған, уға профиль белгестәрен әҙерләү бара. Медицина реабилитацияһы схемаһы эшләнә: ауыр йәрәхәттәрҙән һәм операциянан һуң пациенттарҙы мотлаҡ реабилитациялау зарур, шулай уҡ балаларҙы тергеҙеү дауаһы ауыр өҙләгәүҙәр һанын кәметәсәк. Төбәк-ара нейрохирургия йәки нейрореабилитация үҙәге барлыҡҡа килергә тейеш.

Республикаға медицина фәнни-белем биреү кластеры кәрәк. Уға фәнни ҡаҙаныштарҙы тиражлаусы, препараттар һәм техникаларҙың яңы өлгөләрен булдырыусы, юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтеүсе тикшеренеү үҙәктәре, алдынғы клиникалар һәм инновацион предприятиелар инергә тейеш.

● Күп өлкәлә **фәндең** ҡеүәте тулыһынса файҙаланылмай. Республиканың тулайым төбәк продуктында фәнни эшләнмәләрҙең өлөшө 0,74 процентты алып тора һәм был илдәге күрһәткестән 2,5 тапҡырға кәмерәк. Тикшеренеүҙәр темаһы һәр ваҡытта ла заманса трендтарға һәм иҡтисад ихтыяжына тура килмәй. Бында иғтибарҙы иҡтисад үҫешенә, хеҙмәт етештереүсәнлегенең һәм тормош сифатының артыуына бәйле өҫтөнлөклө фәнни йүнәлештәргә туплау зарур.

Башҡортостанда органик баҫма электроника өлкәһендә яңы компетенцияларҙың федераль үҙәге булдырыласаҡ. Унда интернет, электроника, робототехника өсөн изделиелар эшләнәсәк һәм етештереләсәк. Был - хатта илдә булмаған яңы производство булдырыуҙың уникаль мөмкинлеге.

Йәш ғалимдарҙы республиканан ситкә ебәрмәү өсөн гранттар, Рәсәй һәм халыҡ-ара фәнни үҙәктәрҙә стажировка үтеү, яңы лабораториялар булдырыу, торлаҡ һәм стипендиялар биреү күҙаллана.

● 2019 йылда Башҡортостанда **Бөтә Рәсәй Ғаилә фестивале** үтәсәк. Ғаилә милли мәҙәниәтте һәм туған телдәрҙе һаҡлауҙың нигеҙе, ә дәүләт һәм туған телдәрҙе мәктәптә уҡытыу ҡыҙыҡлы, креатив булырға, заман трендына әүерелергә тейеш.

Башҡортостан ғаиләне иғтибар үҙәгенә ҡуйыуға йүнәлеш ала, был йәһәттән социаль льготалар булдырыласаҡ, уларҙың һаны артасаҡ, йәш ғаиләләр өсөн шарттар тыуҙырыласаҡ, күп балалылыҡ, сәләмәт йәшәү рәүеше тәрбиәләү традициялары тергеҙеләсәк.

Беренсе бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған 300 мең һумды алыуға дәғүә итеүселәр критерийҙары киңәйтеләсәк, сумманы файҙаланыу мөмкинлектәре лә арттырыласаҡ .

Статистика күрһәтеүенсә, Башҡортостанда ғаиләләрҙең 40 проценты айырылыша. Быға юл ҡуймау маҡсатында психология, этика һәм ғаилә тормошо иҡтисады буйынса белем биреү программалары, тренингтар, йәш ата-әсәләргә семинарҙар (шул иҫәптән ситтән тороп), ғаиләләргә консультациялар биреү үҙәктәре ойоштороу зарур.

● Республиканың **имиджын** һәм ылыҡтырыу көсөн киләсәктә лә арттырыу мөһим. Был сәнәғәтте һәм ауыл хужалығын модернизациялау, тармаҡ кластерҙарын, фәнни һәм университет инфраструктураларын, медицина үҙәктәрен, ҡала һәм ауылдарҙы, кадрҙар, ресурстар, һәләтле йәштәр, инновацион идеялар һәм технологиялар талап ителгән үҙымлы үҫеш территорияларын нығытыу өсөн өҫтәмә стимул буласаҡ.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йөрәк өсөн

❖ Йөрәк эшмәкәрлеген дауалау өсөн 1 ҡалаҡ кипкән гөлйемеш өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойола, 10 минут ҡайнатыла, 12-24 сәғәт төнәтелә. Һөҙгәс, 1 ҡалаҡ бал ҡушып болғатыла. Шуны көнөнә 2-3 мәртәбә яртышар стакан эсергә. Балаларға эсерергә лә ярай.

### Ҡан баҫымы

❖ 2-3 ай дауамында сөгөлдөр, кишер, әсе торма һуттары һәм балды бер күләмдә ҡушып (әйтәйек, 1-әр стакан), көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 1-әр ҡалаҡ эсһәгеҙ, ҡан баҫымы нормала булыр.

### Көйәләнмәү өсөн

❖ Тиҙ арымау, көйәләнмәү өсөн нимә генә эшләһәгеҙ ҙә, ҡабаланмағыҙ, ял итеп алығыҙ.

❖ Өмөтһеҙлөккә бирелмәгеҙ, ҡыйын хәлдән сығыу юлдарын яйлап ҡына эҙләгеҙ.

❖ Үҙегеҙгә оҡшаған кешеләр менән генә аралашығыҙ, юморҙы ла онотмағыҙ.

❖ Туҡланыу тәртибен теүәл үтәгеҙ, аҡыл хеҙмәтендәге кешеләргә аҡһымлы ризыҡтар - балыҡ, борсаҡ ашарға кәрәк.

❖ Көн һайын кәмендә 20 минут ҡына булһа ла ваҡытты үҙегеҙ өсөн генә ҡалдырығыҙ. Был мәлдә китап уҡығыҙ, йыр тыңлағыҙ, үҙегеҙ йырлағыҙ һ.б.

### Күҙ тартыу

❖ Күҙ тартыу һыуыҡ тейеүҙән, күҙҙәргә ел һуғыуҙан, күҙ мускулдарының арыуынан була. Үҙаллы дауалау хәүефле, табипҡа күренергә, ул ҡушҡанды ғына эшләргә кәрәк.

### Керән һуты

❖ 150 грамм керәнгә 2-3 лимондың һутын ҡушып, ас ҡарынға ярты балғалаҡ эсһән, эске ағзаларҙа йыйыла торған лайланы тарҡата.

❖ Лимон һуты менән керәндән яһалған "бутҡа" һейҙекте яҡшы ҡыуа һәм шешенә торған, һарыһыу менән сирләүселәргә бик ҡиммәтле дарыу ҙа.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Әкиәт уҡый башланым. Хәйләкәр төлкөләр, бер ҡатлы айыуҙар миҫалында нимә ярай, нимә ярамай икәнен аңлатам. Маша тураһындағы йәнһүрәтен дә онотто. Халыҡ тәрбиәһенән дә яҡшырағы юҡ икәненә төшөндөм шулай.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ҡөрәйштәргә ҡаршы яу

Мосолмандарҙың ҡөрәйш каруанына һөжүм итеүенә өс аҙна үтеүгә Мөхәммәт бәйғәмбәргә тағы бер мәғлүмәт еткерелә: Сүриәнән Мәккәгә табан бик ҙур ҡөрәйш каруаны килә. Был каруан мендән ашыу дөйәнән тора. Уларға затлы тауарҙар һәм Мәҙинәгә ҡаршы һуғышҡа әҙерләнә башлаған ҡөрәйш мөжүсиҙәре һәм улар менән бергә һуғышырға теләүсе башҡа ырыуҙар өсөн тәғәйенләнгән бик юғары сифатлы ҡорал тейәлгән була. Был каруан, әлбиттә, ныҡ һаҡлана.

Был юлы каруанға ҡаршы һөжүмгә өс йөҙ яугир сыға. Уларҙы Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе алып бара. Яугирҙарҙан һикһән өс кеше мөһәжир, ҡалғандары ансарҙар була. Абдаллаһ ибн Ғөбәй ҙә, башҡа монафиҡтар ҙа бергә сығыуҙан баш тарта.

Мосолмандарҙың бары тик өс кенә аты була. Етмешләп дөйәгә ризыҡ, ҡорал һәм башҡа кәрәк-яраҡтар тейәлә, биш-алты кешегә берәр дөйә иҫәбенән сиратлап ултырып баралар.

Ҡөрәйш каруанын етмешләгән ҡөрәйш яугиры һаҡлай. Каруандың етәксеһе - Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең күптәнге дошманы Әбү Суфиян була. Бәдәр тип аталған үҙәнлектә Әбү Суфияндың алда барған күҙәтеүселәре дөйә тиҙәге күреп ҡала. Яңы тиҙәк булыуын да абайлайҙар. Бынан тыш, араһында ваҡ ҡына финик емеше төштәрен күреп, Мәҙинәнән килгән дөйә икәнен дә аңлайҙар. Сөнки Мәҙинә оазисы ваҡ төшлө финиктар менән дан алған була. Был турала Әбү Суфиянға хәбәр итәләр. Әбү Суфиян шунда уҡ каруан юлынан ситкә борола ла, Мәккәгә хәбәрсеһен ебәрә. Быны мосолмандар абайламай ҡала.

Был каруанға һәр нәҫел үҙ өлөшөн индергән була, шуға ла хәбәр Мәккәгә килеп етеү менән, ҡөрәйштәр әүҙем рәүештә яуға әҙерләнеп, туғыҙ йөҙ яугир шунда уҡ юлға сыға. Уларҙы Әбү Джәхел алып бара. Юлда улар Әбү Суфияндың тағы бер хәбәрсеһен осрата. Был хәбәрсе уларға каруандың икенсе, хәүефһеҙ юл менән Мәккәгә етеп барыуы тураһында әйтә. Быны ишетеү менән өс йөҙгә яҡын ҡөрәйш яугиры ҡайтып китә. Сөнки каруан иҫән-һау, ә бай нәҫелдәргә генә кәрәк булған каруан юлы өсөн үҙҙәренең мосолман туғандары менән һуғыш алып барырға теләмәйҙәр. Бынан тыш, улар араһындағы йәшерен мосолмандар ҙа үҙ эшмәкәрлеген тейешле кимәлдә алып барып, быға булышлыҡ итә.

Әбү Джәхел янында алты йөҙләгән кеше тороп ҡала. Уның менән бергә Ғәббәс етәксегендә хашим нәҫеле яугирҙары ла була. Әбү Ләһәб был ваҡыт өйөндә ауырып ята, шуға ла яуға сыға алмай.

Ҡөрәйш ғәскәре Бәдәр үҙәненә яҡыная, тик улар мосолмандарҙың ҡайҙа икәнен асыҡ белмәй. Мосолмандар иһә үҙҙәренә ҡаршы ҙур ғәскәр сыҡҡанын белмәйенсә, каруанды эҙәрлекләүҙе дауам итә. Ләкин ошо ваҡыт улар ике ҡөрәйш кешеһен - ғәскәр алдынан барған күҙәтеүселәрен тотоп ала. Тегеләр, туҡмалғандан һуң, барыһын да һөйләп бирә. Мөхәммәт бәйғәмбәр шунда уҡ хәрби кәңәшмә йыя. Был кәңәшмәлә дошман менән алышырға кәрәк, тигән ҡарарға киләләр.

624 йылдың март айында була был. Мосолмандар Бәдәр үҙәненә ҡөрәйштәргә ҡарағанда алдараҡ килеп инә. Бер нисә сәғәт эсендә бөтөн ҡоҙоҡтарҙы күмеп сығалар, шулай уҡ ағып яткан шишмәләрҙең юлын ҡаплап, быуа быуалар. Быуала йыйылған һыу үҙҙәренә эсергә лә, йыуынырға ла етә.

**(Дауамы бар).**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# ТОРМОШ - УЙЫН, ТИП...

## балаңды тойғолар менән уйнарға өйрәтмә

**Йәй буйы ауылда, өләсәй менән олатайҙа ял иткәндән һуң, баламды танып та булмай, тип зарлана танышым. "Тегене-быны һорай, таптыра, "юҡ", тип әйтергә лә ҡурҡып торам, шунда уҡ ҡысҡырып илай башлай. Уның ҡылығы аптыратып ҡына ҡалмай, хатта ҡурҡыта ла". Таныш күренешме? Балаларҙың был ҡылығына белгестәр ниндәй аңлатма бирә һуң? Бөгөн ошо турала һөйләшәбеҙ.**



***Әлфирә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, педагог:*** Дөрөҫөн әйткәндә, бында олатай менән өләсәйҙәрҙең бөтөнләй ғәйебе юҡ. Бала уларға ҡунаҡҡа барғансы уҡ хәйлә ярҙамында үҙенә кәрәкте алып өйрәнгән булған, әле һеҙ бары тик был хәлгә сит кеше күҙлегенән ҡарағанһығыҙ ғына. Психологтар билдәләүенсә, манипулятор баланы, ғәҙәттә, атай менән әсәй үҙе тәрбиәләй. Үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән балала үҙ һүҙҙәребеҙгә ҡарата билдәле стереотиптар һәм реакция формалаштырабыҙ. Мәҫәлән, "Тыңлашмаһаң, һине башҡа яратмайым" йә "Гөлнур инәйеңдәргә бирәбеҙ", тип әйтәһегеҙ икән, ти. Әсәһе яратһын өсөн бала уға яраҡлаша, тик шул уҡ ваҡытта ошо уҡ хәйләне үҙе лә ҡулланырға өйрәнәсәк: "Мине яратмайһың, шуға ла ҡурсаҡ һатып алмайһың!" Тимәк, уны ошо рәүешле үҙ теләгенә өлгәшергә үҙегеҙ өйрәттегеҙ. Психолог Эрик Берн, башҡалар менән идара итеү өсөн бөтә кешеләр ҙә уйнай, ти, һәм ул бик хаҡлы. "Һинең арҡала әсәй ауырыны, башы ауыртты" һ.б. Йәғни, башҡала ғәйеп тойғоһо уята алһаң, ул һинең бөтөн талаптарыңды ла үтәйәсәк. Был ысынлап та шулай, ҡыҙыҡ өсөн үҙегеҙҙе, башҡаларҙы бер нисә көн күҙәтеп йөрөп ҡарағыҙ. Балаға ҡарата ҡулланылһа, унда "мин - ғазаплаусы" тигән фекер формалаша. Бындай манипуляция төрә әсәйҙән ҡыҙға күсеү ихтималлығы - 100 процент. Сөнки ҡорбан булып йәшәү - унайлы һәм еңел. Өлкәндәрҙең был ҡылыҡтары баланың психикаһын шул тиклем боҙа, тиҙҙән ул үҙе лә аңламайынса, быны башҡаларҙа ҡуллана башлаясаҡ.

Был хәлгә барып етмәҫ өсөн нишләргә һуң? Мәҫәлән, бала йоҡларға ятырға йәки телевизорҙы һүндерергә теләмәй икән, ти. Әсәй кеше, ғәҙәттә, был ваҡытта уға ҡысҡыра, әрләй. Һөҙөмтәлә, әсәйҙең йәне көйөүҙән башы ауырта башлай, үҙе илар хәлгә етә. Бала үҙенең теләгенә барыбер өлгәшә йәки йәштәргә мансылып, йоҡларға ята. Әммә ошо уҡ ваҡытта уның аңында фекер формалаша: "Атай менән әсәй иғтибар итһен өсөн ҡысҡырырға һәм иларға кәрәк".

Ә хәҙер аралашыу сәйәсәтен бөтөнләй үҙгәртеп ҡарағыҙ. Беҙ баланы насар ҡылығы өсөн әрләргә онотмайбыҙ, әммә яҡшы ҡылығын маҡтамайбыҙ. Ошо минуттан баланың бөтөн яҡшы эштәрен күрергә өйрәнегеҙ. Маҡтағыҙ, ҡосаҡлап алығыҙ. Ә шау-шыу күтәрергә уйлай икән - иғтибар итмәгеҙ ҙә ҡуйығыҙ. Шул саҡта баланың аңында икенсе механизм ныҡына: "Һине яратһындар, ҡосаҡлаһындар, маҡтаһындар өсөн үҙеңде яҡшы итеп тоторға кәрәк". Был бик ҡатмарлы, әммә кәрәкле эш.

***Рәмилә ИШКИЛДИНА, йәш әсәй:*** Мыжыҡ бала тәрбиәләү ябай ғына. Бала - Ерҙең (һис булмаһа, ғаиләнен) кендеге, бөтән иғтибар уға, ул бер минутҡа ла яңғыҙы ҡалырға тейеш түгел, гел уның күңелен асып, эргәһендә бейеп торорға ғына кәрәк. Өй мәшәҡәттәре ситкә күсә, иң мөһиме - бала! Үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм быны. Тәүге ҡыҙым тыуғас, барыһы ла шулай булды. Ирем иртүк эшкә сығып китә, мин бала менән өйҙә. Һауыт-һаба йыуылмай, иҙәнгә һыулы сепрәк оноҡҡанда бер тейә, мин, ысынлап та, быларҙың береһенә лә өлгөрмәй инем. Бала өс йәшкә етте, хәл һаман үҙгәрмәне. Иремдең фатирҙың йыйыштырылмаған булыуына һарыуы ҡайнап йөрөгәнен дә һиҙәм, әммә бер ни ҡыла алмайым. Өлкәнәйеп бөткән балама ҡушылып, үҙем дә уйнайым, сөнки ул ярҙамға мохтаж, минһеҙ бер нәмә лә эшләй алмай, тип уйлайым. Үҙем кейендерәм, сөнки шулай тиҙерәк. Теләктәре тыуып өлгөрә, үтәп тә өлгөрәм, сөнки көтөп кенә алған балам, ул бер нәмәлә лә мохтажлыҡ кисермәҫкә тейеш, тигәнгә инанғанмын. Икенсе ҡыҙым ҡулыма алғансы дауам итте был. Шунда ғына аңланым хатамды, хәҙер мин бәләкәйенә күберәк иғтибар биреү урынына өлкәненең мыжығанын, тиҫкәрәләнеүен тыңлап, үҙгәреп торған кәйефен көйләп бер булам. Яңынан аралашырға өйрәнәбеҙ шулай.

***Зөлхизә ӘМИНЕВА, өләсәй:*** Ғөмүмән, бала тәбиғәте менән манипулятор ул. Тик быны уны хәйләкәр, аҫтыртын, насар булғанлыҡтан эшләмәй, тип уйлайым. Балаға бит гел генә өлкәндәр кәрәк, улар беҙһеҙ йәшәй алмай. Шуныһы ҡыҙыҡ бына, үҙебеҙҙең балалар нисек үҫкәнен иҫләмәйем дә. Гел колхоз эшендә йөрөлдө, сөгөлдөр ҙә утаrange, бесәне лә сабылды. Ҡара көҙгә тиклем өйгә йоҡманыҡ та аталары менән, дәүләт эше тип сабып тик йөрөнөк. Өлкән ҡыҙым туғандарын ҡараны, шул уҡ ваҡытта улар беҙгә проблемалар ҙа тыуҙырманы. Яҡшы уҡынылар, тәртиптәре лә һәйбәт булды, йөҙ ҡыҙармай улар өсөн. Бөгөнгө балалар бөтөнләй икенсе. Үткән аҙнала улым ғаиләһе менән ҡайтҡайны. Ейәнсәрем илап, әсәһенең хәлен генә ала. Һеҙҙе яратмайым, өйҙән китәм, ти. "Өс йәш кризисы" тиҙерсе. Әллә, беҙ үҫкәндә ундай күрсәткәр ҙә булманы. Фән бөгөн төрлө терминдар уйлап сығарып ҡына тора бит. Атаһы талапсанырак, унан шөрләй былай. Үҙебеҙ ҙә, баланың балаһы балдан татлы, тип, ҡайһы саҡта өфөләп ташлайбыҙ. Татлы, тип, холоҡһоҙ бала тәрбиәләр хәл юҡ, тип, алып ҡалдым быны бер аҙнаға. Һөйләшәбеҙ төрлө темаларға, мең һорауына ла яуап бирәм, ҡосаҡлашып, яратышып та алабыҙ. Йырҙар йырлайым тегегә, таҡмаҡлап бейетеп тә ебәрәм. Үҙгәреп балам күҙ алдында. Иң ҡыҙығы, әкиәт уҡый башланым. Хәйләкәр төлкөләр, бер ҡатлы айыуҙар миҫалында нимә ярай, нимә ярамай икәнен аңлатам. Маша тураһындағы йәнһүрәтен дә онотто. Халыҡ тәрбиәһенән дә яҡшырағы юҡ икәненә төшөндөм шулай. Шуға ла сит ил авторҙарының китаптарын йыйып ятып уҡығансы, үҙебеҙҙең хазиналарҙы ҡулланығыҙ, тип кәңәш итер инем йәштәргә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Донъяның нигеҙе икәү - шәфҡәтлелек һәм ғәҙеллек. Тәрбиә эшендә лә шулай. Иң мөһиме - яратыу, әммә уның да сиктәре булырға тейеш. Үҙен яратыуҙарын тойған бала үҙен яратасаҡ һәм тейешенсә баһалаясаҡ. Үҙе тураһында яҡшы фекерҙә булмағандар тәүге һынауҙарҙан уҡ бөгөлөп төшә. Шуға ла баланы нисек бар, шулай ҡабул итегеҙ һәм яратығыҙ, бер ниндәй шарттар ҡуймағыҙ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**

✓ ***Башҡорт хан беҙгә дәүләт, милләт тигән байлыҡ ҡалдыра. Быларҙан сығып, беҙ "башҡорт" атамаһының өс мәғәнәлә ҡулланылыуын аңлайбыҙ. Былар: ил, халыҡ һәм ҡалалар.***



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

**Күптән түгел генә һәүәҫкәр тарихсы Йәдкәр Бәшировтың "Бөйөк Башҡортостан" китабын уҡып (ул китаптың башҡортса тәржемәһе "Киске Өфө"нөң ошо 7-се битендәге бағанала былтырҙан бирле баҫыла килә), ундағы мәғлүмәттәр менән аңыбыҙҙы яҡтыртып алғайныҡ инде. Авторҙың ошо көндәрҙә генә донъя күргән икенсе китабы - "Башҡорт хан" тип аталған баҫмаһы беҙҙе халҡыбыҙ тарихына бөтөнләй икенсе күҙлектән ҡарарға мәжбүр итте. Урыҫ тарихсылары, йылъяҙмасылары хеҙмәттәренән ситкә китеп, Геродот, Ҡол Ғәле, Бахши Иман, Боннар Андре, Гельмольт, Европеус, Тизенгаузен, Шәриф Иҙриси, Әл-Иҙриси кеүек, халыҡтарҙы донъяуи кимәлдән сығып өйрәнгән тарихсы, илсе, сәйәхәтселәр яҙмаларынан табылған ҡиммәтле мәғлүмәттәр менән һуғарылған был китап. Әлбиттә, тамырҙарында башҡорт ҡаны аҡҡан һәр уҡыусы был зиннәт менән үҙаллы танышыр, тип уйлайбыҙ. Ә уға тиклем, уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу һәм үҙ милләте хаҡында күберәкте белергә теләү ниәтен уятыу маҡсатында, Йәдкәр БӘШИРОВтың үҙе менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

# КЕМ УЛ БАШҠОРТ ХАН?



**➔ Йәдкәр Әхәт улы, башҡорт тарихында Башҡорт хан исемле шәхес булыуы билдәле булһа ла, ул ниндәйҙер мифик герой һымаҡ күҙаллана ине. Хатта был исемде нуғай, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ кеүек милләттәр үҙенеке итеп тә күрһәткән баҫмалар бар. Исеме үк "башҡорт" тип ҡысҡырып торған шәхесте беҙ һаманға тиклем ҡыйыу рәүештә үҙебеҙҙеке итеп күрһәтә алманыҡ. Әлеге һеҙҙең китапты ҡулға алыу уҡ ғорурлыҡ тойғоһо уята. Кем булған ул асылда Башҡорт хан? Ни өсөн уның исеме шул сама йылдарҙан алып тарихта һаҡланып ҡалған?**

- Башҡорт халҡының бик боронғо ата-бабалары араһында билдәле башлыҡтар аҙ булмай. Мәҫәлән, Ҡуман, Ишем, Шаруҡан, Туғырхан, Бонаҡ, Үтәк, Ҡобаҡ һәм башҡа хандар, бейҙәрҙең исемдәре билдәле. Әммә улар араһында Башҡорт хан иң абруйлыһы һәм данлыҡлыһы һанала. Был билдәлелекте ул халҡына үҫеш килтереүе, алыҫ киләсәккә ҡарап эш итә белеүе һәм тыныслыҡ һаҡлай алыуы менән яулай.

Тарихи мәғлүмәттәрҙән Башҡорт - ҡурҡыу белмәҫ яугир, оҫта һыбайлы, йәшлегендә Салауат Юлаевыбыҙ кеүек үк ҡоралһыҙ айыу үлтергән тигән дан алған ир-егет була. Кәүҙәһе һәм сәләмәтлеге көслө ҡәбиләнән икәнлеген күрһәтеп тора, тиелә. Шулай уҡ төҫө лә бик күркәм булалыр, гүзәл зат тарафынан мул иғтибар бүленеүе хаҡында ла һөйләнә. Алға китеп әйткәндә, кенәз Владимирҙың ҡатыны ла рус ҡәлғәһенән ҡасып китеп, Башҡорт ханды йәмәғәте итеп һайлай.

Башҡорттоң олатаһы заманында Ишем ханлығы менән идара итә. Атаһы һәм олатаһынан хәрби идаралыҡҡа, дәүләт мөнәсәбәттәрен төҙөүгә һәм килешеү алымдарына өйрәнеп үҫә. Уны хатта ниндәйҙер махсус программа менән эш итә, тип тә билдәләйҙәр. Ул туҡтауһыҙ дәүләт ерҙәрен киңәйтә, яңынан-яңы халыҡтарҙы ерҙәре менән үҙ ҡанаты аҫтына ала, уларға яҡшы көнкүреш бирерҙәй тәҡдимдар яһай, дәүләтендә кешелекле ҡанундар тыуҙыра.

Башҡорт хан тарихҡа дөйөм мәҙәниәте һәм тел оҡшашлығы булған халыҡтарҙы берләштереүҙең нигеҙен һалыусы шәхес булараҡ ингән. Ул дөйөм төрки телле халыҡтарҙы берләштереп, Евразияла яңы бер донъя барлыҡҡа килтереүгә өлгәшә. Үҙҙәренең үҙенсәлекле диалекттары һәм һөйләштәре менән килгән ҡәбиләләр быуаттар буйына башҡорт телен байыта һәм уның төп үҙенсәлеген һаҡлауға үҙ өлөшөн индерә. Башҡорт хан Урҙаһына ингән халыҡтарҙың барыһы ла "башҡорт" тип аталған, йәғни Башҡорттоң кешеһе. Шул заманда Башҡорт хан тарафынан тәртип һәм ҡанун итеп һалынған башҡа халыҡтарға булған килешеүле мөнәсәбәт башҡорт халҡында әле булһа ла йәшәй. Бөгөн ҡасандыр билдәле булған болғар, хазар халыҡтары юҡҡа сыҡҡан. Ә килешеү нигеҙендә йәшәп була икәнлекте аңлаған башҡорттар киләһе быуаттарҙа монголдар, урыҫтар менән килешеү төҙөүгә өлгәшә алған һәм шул арҡала киләсәген тәьмин иткән.

Башҡорт хандың килешеү, өгөтләү, бик ҡатмарлы сәйәси мәсьәләләрҙе лә тыныс юлдар менән сисә алыу оҫталығын урыҫ халҡы ла юғары баһалай. Уның идара итеү, союздаштар табыу, сетерекле хәлдәрҙе яйлауҙағы һәләтен улар ҙа аҙ ҡулланмай. Мәҫәлән, Киев престолына Бөйөк Киев кенәздәрен тәҡдим иткәндә лә уның ҡатнашлығы булған.

Башҡорттарҙың ата-бабалары үҙҙәренең тарихи ерлектәрен онотмаған. Ишем бассейны, Көньяҡ Урал, Омск, Урал тауҙарының төньяҡ-көнбайыш территориялары һәм Урта Волга буйы ер-һыуҙары уларҙың аҫаба ерҙәре булған. Башҡорт ырыуҙары Ҡырым ярымутрауына тиклем таралып ултырған, Дон далаларында ҡалалар төҙөгән, монгол-татарҙар килеп ҡыҫырыҡлағанға тиклем сит илдәр менән иркен сауҙа иткән.

Башҡорт хан ерҙәрен киңәйтә барған һайын төрлө ерҙәрҙә һәм халыҡтар араһында ҡат-ҡат хан итеп иғлан ителгән. "Тамта" тип аталған дәүләт менән 569 йылда Тамта исемле батша идара итә. Ошо ерҙәр Башҡорт хан ҡулы аҫтына ингәс, хан үҙенең ейәндәре Ғабдулла һәм Мир-Ғазыйҙар хакимлыҡ иткәндә ошонда йәшәй. Тамта халҡы Башҡорт хан етәкселегендә күп тапҡырҙар баҫҡынсыларға ҡаршы һуғыша ла.

Тамта дәүләтенә Тәмте йылғаһының таулы яғы һәм Ҡама аръяғы ерҙәре инә. 1184 йылғы походты тәфсирләгән йылъяҙмала беренсе тапҡыр был ер атамаһы телгә алына. Тәмте гидронимын урындағы халыҡ Тәмте һыу атамаһы менән йөрөтә. Ошонда уҡ Тәмте ауылы ла бар. 1950 йылда Татарстанда Тәмте районы теркәлгән. Башҡорт хан яҡты донъянан киткәс, яҡынса 1193 йылдарҙа уның ейәне Ғабдулла, олатаһының Тәмте иле алдындағы бөйөк эштәрен мәңгеләштереү ниәтендә Тәмте илен "Башҡорт иле" итеп үҙгәртә. Артабан был ил "Башгирд" тигән исем аҫтында күп кенә тарихсыларҙың, географтарҙың, сәйәхәтселәрҙең хеҙмәтендә теркәлә.

Башҡорт ханға Көнбайыш Себер халҡы ла оло хөрмәт менән ҡарай. Ишем йылғаһы бассейнындағы Ҡыҙыл Яр, Омск, Көньяҡ Урал халҡы, Урта Волга, Биләр, Ҡырым, Киев, Чернигов һ.б. ҡалалар кеселекле рәүештә уның алдында баш һала. Хан тарафынан төрлө ҡәбиләләрҙең "Бөйөк Башҡортостан" державаһына әүерелеүе урта быуаттар аренаһында бер ҡөҙрәтле күренеш була. Икенсе мең йыллыҡ башында Көнсығыш Европа территорияһында күп ырыуҙарҙан йыйналған был халыҡ башҡорт халҡының дәүләтселек нигеҙен нығытып ҡуя. Был халыҡҡа һәм тотош илгә оло үҫеш алып килгән ваҡиғаны мин киләсәктә АҠШ-тың беренсе президенты Джордж Вашингтон башҡарған эштәр менән сағыштырыр инем. Был аҡыллы кеше етәкселегендә АҠШ-тың Конституцияһы булдырыла һәм ил һаман да шул нигеҙҙә йәшәп килә. Вашингтон илендә ҡоллоҡто юҡ итә, тарихта үҫеш булдырыусы сәйәсмән, иҡтисадсы һәм бөйөк дәүләт ире булараҡ эҙ ҡалдыра. Илдең баш ҡалаһы һәм иң бай штат уның исеме менән атала. Ә бит уйлап ҡарағанда, бынан биш йөҙ йылдар әүәл Башҡорт хан да ошо уҡ программа менән эш алып бара. Халыҡтар араһында туҡтауһыҙ хәрәкәт итеү, уларҙы борсоған һорауҙарҙы белеү, уларҙың киләсәген ҡайғыртыу һәм кешелек йәмғиәтен донъяуи кимәл фонында күрә белеүенән Башҡорт хан беҙгә дәүләт, милләт тигән байлыҡ ҡалдыра. Быларҙан сығып, беҙ "башҡорт" атамаһының өс мәғәнәлә ҡулланылыуын аңлайбыҙ. Былар: ил, халыҡ һәм ҡалалар. Һәм ошондай ҡөҙрәтле етәксе мотлаҡ "Бөйөк Башҡорт хан" тигән исемде күтәрергә тейеш тә.

Башҡорт халҡының урта быуаттар тарихын анализлау барышында тарихсыларҙың Башҡорт ханды тейешенсә баһаламауҙарын аңланым. Улар уны башҡорттар араһында ғына түгел, ә башҡа халыҡтар, илдәр араһында ла билдәле булған хәрби етәксе, дәүләт эшмәкәре, дәүләт етәксеһе, дипломат итеп түгел, ә күсмә халыҡтар ханы итеп кенә күрһәтә. Рәсәй йылъяҙмаларының "нигеҙ һалыусы аталары" булған Н.А. Карамзин, Нестор һәм башҡа рус ғалимдары был енәйәтте аңлы рәүештә башҡара, тип уйлайым һәм артабанғы тарихсылар үҙ хеҙмәттәрендә ошоларҙы нигеҙ итеп ала ла. Бөгөнгө тарих Башҡорт хан шәхесен ентекле өйрәнеүҙе һәм дөрөҫлөктө өҫкә сығарыуҙы талап итә.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Бүләрҙәр

Бүләрҙәр юрматы, юрмый, йәнәй һ.б. башҡорт ҡәбиләләре төркөмөнөң ҙур өлөшөн тәшкил итә. Монголдар осоронда Урал-Волга буйының бәйләр-бүләр союзы хәл иткес роль уйнай. Сәйәси йәһәттән бүләрҙәр тарихи Башҡортостандың көнбайыштағы боронғо башҡорт ҡәбиләләре араһында мөһим урынды биләгән.

"Бүләр" этнонимы Биләр ҡалаһы менән бәйле. Бүләрҙәрҙең шәжәрәһе бүләр халҡынан сыҡҡан Динис Бикбрагтың улы Бүләр хандан башлана. Бикбраг Бүләр йылғаһы буйында йәшәгән, шәжәрәне төҙөүселәр һүҙҙәре буйынса, улар "далалы Зәй һәм Шишмә" буйында торған. Биләрҙәрҙең ата-бабалары һуңыраҡ үҙҙәренең араһына башҡорт болғарҙарын индерә, улар VIII-IX быуаттарҙа Волга һәм Кама йылғаһы буйында бергә йәшәй. VIII-XII быуаттарҙа ҡыпсаҡтарҙың күпләп килә башлауы Биләрҙәге боронғо башҡорт ҡәбиләләре менән ҡушылыуына алып килә. Бүләрҙәр XII быуатта бүләрбәйләр союзына инә. "Биксура батыр" хикәйәтендә бәйләр, бүләр башҡорт ҡәбиләләре йәйләүҙәрендә илде баҫып алырға теләүселәрҙең башбаштаҡлығы тасуир ителә. Биләрбәйләр ҡәбилә союзы ныҡ тора, уларҙың иле XIV быуаттың аҙағына тиклем һаҡлана.

## Ҡаңлылар

Был башҡорт ырыуының тарихы ике мең йылды тәшкил итә. Ҡаңлыларҙың башҡорттар, ҡаҙаҡтар, нуғайҙар, ҡырғыҙҙар, ҡарағалпаҡтар һәм үзбәктәр составында булғандары бәшәнәктәрҙән килеп сыҡҡан. Улар төп өлөш менән Европаға китмәйенсә тороп ҡала.

VIII-IX быуаттарҙа төрки дала ҡағанаттарын берҙәм дәүләткә ойошторорға теләгән көнсығыш ҡағандары яугирҙарын ҡаңлылар тип атап йөрөткәндәр. Мәхмүт Ҡашғари ҡаңғар ҡәбиләһе барлығын белмәйенсә, "Ҡаңлы - ҡыпсаҡтар араһындағы бөйөк кешенең исеме", тип яҙа. Дәште Ҡыпсаҡта Ҡаңғар уғлы хөрмәтле урынды биләгән. Һуңыраҡ ҡаңғарҙар төркиләшә. Уларҙың бер өлөшө бәшәнәктәрҙең ядроһын барлыҡҡа килтерә, ҡалғандары ҡыпсаҡтар араһына инеп, башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша.

Һырдаръя буйынса ултырып, ҡаңлыларҙың айырым өлөштәре Хорезмшахтар һәм Ҡараханидтар дәүләттәре менән төрлө мөнәсәбәткә инә. 1141 йылда Гүрхан үҙенә ҡаңлыларҙы буйһондора, шул рәүешле ҡараҡатайҙар Етейылғала хужа булып китә. Монголдар һөжүме ҡаңлыларҙың үҙаллылығын юғалтыуға килтерә.

Ҡаңлылар, башҡорттар һәм ҡыпсаҡтар монголдарға ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтә, бының өсөн бигерәк тә ҡыпсаҡтар менән ҡаңлылар язаһын да татый. Франция короле Людовик IX илсеһе Вильгельм де Рубрук 1253 йылда Каспий диңгеҙенең төньяғы буйлап үткәндә шулай яҙа: "Элек унда үҙҙәрен ҡаңлылар тип атаусы ниндәйҙер ҡомандар йәшәне..." Монголдар баҫып алғандан һуң ҡаңлылар Ҡырымдан Алыҫ Көнсығышҡа тиклем араға һибелә. Башҡорт иленә ҡаңлылар Дәште Ҡыпсаҡ ҡыйратылғандан һуң аяҡ баҫа. Ысынында иһә, уларҙың варисҭары башҡорттар араһына X-XI быуаттарҙа бәшәнәктәр булып инә. Теоретик яҡтан ҡарағанда, ҡаңғарҙар Көньяҡ Уралға Ҡанғой заманында килеүе мөмкин.

**(Дауамы бар).**

*✓ Биш минуттан алыш башлана, тигәндә, ринг-анонсер беҙҙән: "Егетегеҙҙең ҡушаматы нindәй?" - тип һораны. Шунда уҡ тигәндәй: "Башҡорт мәғдәне" (башкирский самородок) тигән исем уйлап табылды.*



# РУСЛАН

## спорттағы хазиналарҙың

**Хәтерегеҙҙәлер, 2016 йылдың апрелендә үҙенә "Башҡорт" тигән ҡушамат алған, һуғыш самбоһы буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы исеменә лайыҡ булған Венер Ғәлиев Өфөлә үткән ҡатнаш алыш төрҙәре (ММА) турнирында әрмән көрәшсеһен еңгәйне. Ана шул көндө, тап шул турнирҙа тағы бер милләттәшебеҙҙе, Венер Ғәлиевтың уҡыусыһы Руслан Яманбаевты ла күптәр күҙгә элде. Был көндө Руслан да сағыу алыш күрһәтте, тик тактика яғынан ғына отолоп, дәғүәсеһе Балкизовтан еңелеп ҡуйҙы. Ошо хәлдән һуң 11 ай үттеме, юҡмы, Руслан Виктор Кичигинды, тағы 2 айҙан Рөстәм Капаловты еңде, ә тағы ике айҙан, йәғни ошо йылдың 8 октябрендә Ислам Бегидовты ла техник нокаутҡа "ебәрҙе". Руслан ЯМАНБАЕВтың тиҙ арала еңеүле аҙымдарға күсеүенең сере нимәлә икән? Бәлки, уның еңеүҙәренең сере башҡорт батыры стилендә сығыш яһауындалыр? Түбәндәге материалыбыҙҙа ошо һәм башҡа һорауҙарға Русландың үҙенән яуаптар ишетербеҙ. Әңгәмәбеҙҙә шулай уҡ Өфөләге "U-FIGHT" промоутер компанияһы етәксеһе Рәмил СӘҒИТОВ та ҡатнаша. Рәмил Миңнулла улы үҙ сиратында башҡорт ММА-сыларына ҡағылышлы бик ҡыҙыҡлы фекерҙәре менән уртаҡлашыр.**

**Тәүге һорау яп-ябай: һеҙ ҡайһы яҡта тыуғанһығыҙ, ҡайҙа уҡығанһығыҙ? Минең уйымса, танышыуҙы ошонан башлаһаҡ, дөрөҫөрәк булыр...**

**Р. Яманбаев:** Мин Дәүләкән ҡалаһында тыуғанмын. 9-сы синыфты тамамлаған йылда 13 кенә йорттан торған, тәбиғи газы ла, һыуы ла булмаған, карталарҙа ла күрһәтелмәгән Шишмә районы Яңы Опто ауылына күстек. 11-се синыфты Яңы Оптонан 7 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан күрше ауыл мәктәбендә тамамланым. Унан М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының физкультура факультетында юғары белем алдым.

**Р. Сәғитов:** Тыумышым менән Көйөргәҙе районы Ермолаево ҡасабаһынанмын. Бала саҡтан дзюдо менән шөғөлләндем. 16 йәшемдә дзюдо буйынса спорт мастеры нормативын үтәнем. Күмертау педагогия училищеһын тамамланым. 5 йыл Хәрби диңгеҙ флотында, һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт иттем дә, Ырымбурҙағы физкультура институтына уҡырға индем. Уны тамамлағас, Санкт-Петербург физкультура академияһында тренерҙарҙың юғары мәктәбе факультетында белемемде камиллаштырҙым. Академияла Аршавин, Кержаков, Малафеев ише Рәсәйҙең ярты йыйылма командаһын тәшкил иткән билдәле спортсылар менән бергә уҡыным.

**Руслан, ә һеҙ спорт менән ҡасан шөғөлләнә башланығыҙ?**

**Р. Яманбаев:** Бала сағымдан. Күрше ауыл мәктәбенә йәйәү йөрөп уҡығас, еңел атлетиканы бик тиҙ үҙләштерҙем. 3 километрға йүгереү буйынса республика мәктәптәре уҡыусылары араһында бронза миҙал да яуланым мин. Йүгереү менән бергә, футбол менән дә етди шөғөлләндем. Мәктәпте тамамлағас, ике уртала ҡалдым: йә кикбоксёр, йә футболсы булырға тейеш инем. Мин тәүге юлды һайланым. Кикбоксингты мин ысын ир-егеттәр генә шөғөлләнә торған спорт төрө тип ҡабул итәм.

Университетта уҡыу менән бер рәттән, БДПУ-ның кикбоксинг тренеры Рәшит Рушан улы Кәримовтың күнекмәләрендә шөғөлләнә, кикбоксинг, бокс буйынса республика, Волга буйы федераль округы турнирҙарында сығыш яһай башланым. Уларҙа еңеү яулаған мәлдәрем дә, призлы урындар алған саҡтарым да булды.

Студент йылдарын артта ҡалдырғас, Өфөләге "Ягуар" алыш клубында тай боксы һәм бокс буйынса тренер булып эшкә урынлаштым. Минең бер дәресемде атаҡлы тренер Артур Мөхәмәтдинов күреп ҡалды. Күрҙе лә, миңә үҙенең тәрбиәләнеүселәренә дәрес биреүемде һораны. "Минең самбосылар яҡшы көрәшә, әммә "йоҙроҡтары" көсһеҙерәк. Һин уларҙың йоҙроҡ менән һуғыу техникаһын "шымарт" әле", - тине.

Шулай итеп, мин ике клубта - "Ягуар"ҙа һәм Өфөнөң Киров районы Эске эштәр бүлеге спорт залында (әйткәндәй, Венер Ғәлиев та заманында ошо залда шөғөлләнгән) тренерлыҡ итә башланым. Самбосылар менән аралаша торғас, үҙем дә был спорт менән ҡыҙыҡһынып киттем.

Яңы һөнәр өйрәнгән сағыңда барыһы ла шыма ғына бармай бит ғәҙәттә. Мине лә самбосы егеттәр йә күтәреп һуға, йә ҡулымды шаҡара, йә тынымды быуа торғайны. Әлбиттә, күнекмәләр ваҡытында былай еңелеүҙәрем мине сығырымдан сығарһа ла, ниндәйҙер кимәлдә сәмләндерә лә ине.

2011 йылда Венер Ғәлиев Ҡаҙандың Эске эштәр министрлығы йыйылма командаһында тренерлыҡ иткән осорҙа уның менән Өфөлә күнекмә үтергә, тип, беҙҙең залға ҡатнаш һуғыш алышы йондоҙо Али Баһаутдинов үҙе килеп төштө. Кемдең генә ике батырҙың күнекмәһен күргеһе килмәһен! Миңә был уңайҙан уңыш йылмайҙы - легендар спортсылар әлеге лә баяғы мин күнекмә үткәргән залда шөғөлләнәсәге билдәле булды. Был күнекмәләргә мин дә ҡушылып киттем. Минән башҡа йәшерәк егеттәр ҙә бар ине. Егеттәр менән ҡушарлап алыша, дөйөм физик әҙерлек күнекмәләре эшләй, тоҡтарҙы дөмбәҫләй башланыҡ. Мин быға саҡлы шөғөлләнгән кикбоксингта ла, бокста ла бер раунд 2 минуттан да артмағас, ҡатнаш һуғыш алышсыларының 5-әр минутлыҡ раундтарын "күтәрә" алмай бер булдым. Был хәл мине тағы ла нығыраҡ сәмләндерҙе. Мин тағы, тағы уртаға сыҡтым. Бер мәл тоттом да Венер ағай менән ҡара-ҡаршы тороп көрәшеп ҡарар итеүемде белдерҙем. Миңә үҙемдән көслөрәк кешеләр менән көс һынашыу оҡшай бит. Ә Венер ағай: "Юҡ, был егет миңә бармай", - тигән һымаҡ, миңә ҡул ғына һелтәне. Быны күргән Артур Мөхәмәтдинов: "Бына күрерһең әле, ярты йыл эсендә мин унан ҡәҙимге көрәшсе яһаясаҡмын", - тип әйтеп һалды.

Ошо хәлдән һуң мин кистәрен Артур Рәфис улына күнекмәләргә йөрөй башланым. Шәхси күнекмәләр үткәреүемде лә дауам иттем. Бер аҙҙан алға китеш һиҙелде. Самбосылар менән көрәшә ала башланым. Көндәрҙән бер көндө тренерым миңә ҡатнаш хәрби алыш төрҙәре буйынса Башҡортостан беренселегендә сығыш яһарға тәҡдим итте. Мин риза булдым. Был ярышта мин еңеп сыҡтым. Унан, күп тә үтмәй, Волга буйы федераль округында беренсе урын яулау бәхетенә ирештем. Күптәр минең "ударник" булһам да, 5 алышта ла ауырттырыу һәм тынды быуыу алымы менән еңеүемә аптыраны. Унан һуң Ырымбурҙа үткән Рәсәй чемпионатына киттем, әммә унда мин көткән һөҙөмтә килеп сыҡманы. Ике алыштың береһендә еңеп сыҡтым, береһендә - еңелдем. Өфөгә ҡайтып, бер аҙ хәл алғас, ошонда килгән Венер Ғәлиев менән көрәшеп алдыҡ - күптәнге хыялым тормошҡа ашты! Венер ағай минең менән ҡәнәғәт ҡалды. Ике аҙна самаһы үткәс, тренерым: "Һине Венер Екатеринбургҡа саҡыра, "Fight nights" чемпионаты эсендә уның клубы өсөн сығыш яһауыңды теләй", - тип әйтеп һалды. Венер Зәйнулла улы "Fight nights"-тың эсендә үҙенең командаһын булдырғайны.

**Р. Сәғитов:** Әйткәндәй, Русланды был ваҡиғаларҙан алдараҡ Кавказда, Нальчик ҡалаһында үткән бер турнирҙа күптәр күреп ҡалғайны. Мәрәйҙәр буйынса еңеүҙе судьялар урындағы спортсыға бирһә лә, залда ултырыусы күп кенә кешеләр, беҙҙең кеүек үк, еңеү Русланға бирелер, тип уйлаған икән. Русландың алышынан һуң күп кенә таныштарым: "Ҡара һин уны, бик ҡыҙыҡлы көрәшсе өлгөрөп еткән бит!" - тип, миңә Руслан тураһында үҙ фекерен еткерергә ашыҡҡайны. Руслан, ысынлап та, еңерлек көрәште, тик судьялар ҙа, тамашасылар ҙа урындағы кешеләр булғанға күрә, еңеү, мәрәйҙәр һаны буйынса, тигән һылтау менән, Русланға бирелмәне. Ул икенсе урынға ҡалды.

Әйткәндәй, биш минуттан алыш башлана, тигәндә, ринг-анонсер Александр Загорский беҙҙән: "Егетегеҙҙең ҡушаматы нindәй?" - тип һораны. Шунда уҡ тигәндәй: "Башҡорт мәғдәне" (башкирский самородок) тигән исем уйлап табылды. Ысынлап та, хазина ине ул беҙҙең өсөн. Артур Мөхәмәтдинов хазинаһы!

Ошонан һуң уның Екатеринбург ҡалаһының "Ратиборец" клубы менән контракт төҙөү процесы башланды. Руслндың "Ратиборец"ҡа элөгеүенә Башҡортостанда һөнәрмән алышсылар әҙерләүсе мәшһүр тренер Артур Мөхәмәтдинов ныҡ булышлыҡ итте. Руслан менән Венер бик уңышлы хеҙмәттәшлек итә, алыштар ваҡытында йә береһе, йә икенсеһе секундант булып тора. Әйткәндәй, ошо осорҙа Венер уның Башҡортостан менән Свердловск өлкәһе юлдарын йыш тапауына ишаралап, "Күсмән" ("Кочевник") тигән исем тәҡдим итте. Был исем Русланға ла оҡшаны.

Русланға ситкә күсергә тура килде шул, сөнки бында күнекмә үтеү перспективаһы юҡ. Башҡортостанда ММА, үҙегеҙ беләһегеҙ, ауырыраҡ үҫешә. Екатеринбургта перспектива ла, шарттар ҙа бик шәп.

**Р. Яманбаев:** Мин дә, Венер ағай ҙа республикала ҡала ала инек, Венер Ғәлиев бында үҙҙәренең Башҡортостандан булыуын һәр ерҙә күрһәтеп йөрөгән әллә күпме шәп егеттәр тәрбиәләй алыр ине. Әле беҙ Башҡортостандан булыуыбыҙҙы әйтә йөрөһәк тә, "Ратиборец" исеменән сығыш яһайбыҙ.

**Р. Сәғитов:** Ринг-анонсеры Александр Загорский һәр ваҡыт беҙҙең егеттәрҙе: "Башҡортостанда тыуып үҫкән, әлеге көндә "Ратиборец" клубы өсөн сығыш яһаусы Венер Ғәлиев (йә, Руслан Яманбаев)", - тип иғлан итә. Шул саҡ милли кейемдә беҙҙең егеттәр килеп сыға. Был эште егеттәр үҙҙәренең башҡорт булыуҙарын онотмаһын өсөн эшләйбеҙ. Беҙ ситкә сыҡһаҡ, ҙур булмаған төркөм булып көйәрмәндәребеҙ оҙатып йөрөй. Кавказда булһынмы, башҡа ерҙәме - трибуналарҙа башҡорттоң ҡамсат бүреген кейгән егеттәр ултыра. Был атмосфераны беҙ үҙебеҙ булдырабыҙ. Был йәһәттән дуҫыбыҙға, Башҡортостан республикаһының атҡаҙанған артисы Азат Йыһаншинға рәхмәтлебеҙ. Венер менән Руслан кейгән милли кейемде ул бирҙе. Мин гел әйтәм: ҙур спорттан китҡән хәлдә, егеттәр ул кейемдәрҙе музейға тапшырырға бурыслы!

**Рәмил Миңнулла улы, үҙегеҙҙең промоутерлыҡ эшмәкәрлегегеҙ тураһында ла һөйләп үтһәгеҙ ине.**

**Р. Сәғитов:** 2000 йылдар баштарында ММА үҫешә башлаған ғына ваҡытта беҙ Өфөлә тәүге алыштар ойоштороҙоҡ. ММА-сыларҙы, кикбоксерҙарҙы, тай боксы оҫталарын бер майҙанға йыйып, уларҙы ярыштыра торғайныҡ. Тәүҙәрәк 300-400 тамашасыға иҫәпләнгән майҙандарҙа алыштар уҙғарһаҡ, яйлап киңерәктәренә күсерлек ҡеүәткә эйә булдыҡ. Шуға иғтибарҙы йүнәлтке килә: бөгөнгө көндә Рәсәй, донъя кимәлендә киң билдәлелек яулаған күп кенә алышсыларҙың беренсе алыштары тап Өфөлә, беҙ ойошторған ярыштарҙа башланды. Был исемлеккә Александр Шеременконы, Забит Самедовты ("Маугли"), Рәшит Магомедовты (UFC промоутер компанияһында шөғөлләнә), Агоп Тапчанды, Вячеслав Дацикты һ.б. индерергә була. Венер Ғәлиев беренсе алыштарын Ҡаҙағстанда үткән булһа ла, беҙ ҙә оло ғорурлыҡ менән: "12 йыл элек Венер Ғәлиев тәүге алыштарының береһен беҙҙә үткәрҙе", - тибеҙ. Венер Ғәлиевтың Башҡортостандағы тәүге алышы Өфөнөң Спорт һарайында үтте. Был сараны үткәргәндә бер ҡыҙыҡ хәл дә булғайны. Бюджет бәләкәй ине, рекламаға аҡса ла юҡ. Мин тоттом да Спорт һарайына 20х30 метрлыҡ баннер элеп ҡуйҙым. Һөҙөмтәлә, беҙ 5 мең урынлыҡ залға 4 меңгә яҡын кеше йыйҙыҡ. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ. Ул мәлдә әле хоккей өсөн тәғәйенләнгән Спорт һарайында хоккейҙан башҡа саралар уҙһа, боҙло залға йылы һауа өрҙөртмәйҙәр ине. Тамашасылар тундар, курткалар, кәпәстәр кейеп ултырһа ла, ҡәнәғәт ҡалды. Венер Ғәлиев билдәле әрмән көрәшсеһе Агоп Тапчанға (әлеге көндә Агоп Сочи ҡалаһының ММА берлегген етәкләй) ҡаршы сығып, уны тәүге минуттарҙа уҡ нокаутҡа оҙатты. Был алыштан һуң Агоп ярты йыл самаһы дауаланды. Ҡыҙыҡлы осрашыу булды был. Әле лә хәтерҙә, зал үрә баҫып алҡышланы. 2016 йылда Венерҙың Степанянды еңгән осрашыуынан кәм булманы был осрашыу ҙа, тип әйтә алам.

Артабан PROFC ойошмаһының ике турнирын үткәрҙек. Был турнирға Александр Емельяненко, Эльбрус Ниғмәтуллин, Сергей Харитонов килде. Венер ҙа бында бер нисә тапҡыр алышҡа сығып, дәғүәселәрен еңеп, Өфө тамашасыларына бүләк эшләне. "Үҙебеҙҙең башҡорт егеттәренә ярҙам итәйек, уларға матур, сағыу тамашалар үткәрәйек", - тип, концерттар өлкәһендә

***✓ Мин уның аҫҡа эйелә биреп, мине сеткаға ҡыҫырыҡларға тырышыуын аңланым. Улай итһә, Ислам Бегидов мине партерға күсерә лә, үҙенә мәрәйҙәр эшләй ала ине. Әммә был план тормошҡа ашып өлгөрмәне.***



# ЯМАНБАЕВ - береһе ул



### *РУСЛАН ЯМАНБАЕВ:*

*Мин үҙемде һәр ваҡыт башҡорт итеп тоям. Беҙҙең командала күпселекте урыҫтар тәшкил итә. Улар - аҡ, Венер Ғәлиев менән мин генә - ике ҡара башҡорт. Беҙ уларҙан холҡобоҙ менән дә, көсөбөҙ, етеҙлегебеҙ, тиҙ фекерләүебеҙ менән дә нисектер айырылып торабыҙ. Берәй алыш алдынан бөрегемде кейеүем була, миндә аңлатып булмаған тойғолар уяна. Рух тип әйтәйемме, әллә башҡа нәмәме...*

эшләүсе продюсер Заһир Ҡотлосурин менән берлектә "U-FIGHT" компанияһын барлыҡҡа килтерҙек. Был компания өсөнсө йыл эшләй. Бөйөк еңеүҙең 70 йыллығына ҡарата шәп турнир үткәрҙек. Шоу програмаһы бик көслө булды. Бында ла Сергей Харитонов, Эльбрус Ниғмәтуллиндар килде. Был көндө Венер Сергей Гвоздицкий исемле украин егете менән, ә Руслан - Алан Хугаев исемле осетин егете менән алышты. Венер Харьков егетен нокаутҡа оҙатты, Руслан мәрәйҙәр һаны менән еңде. Венер - Артур Туҡтағолов йырына, ә Руслан МС Баш йырына уртаға килеп сыҡты. Ошо турнирҙан һуң Артур менән Венерҙың: "Әгәр Өфөлә яҡшы сара ойошторорға теләһәгеҙ, Рәмил Сәғитов менән бәйләнешкә сығығыҙ", - тигән һүҙенә нигеҙләнеп, "Fight nights" компанияһы беҙҙең менән берлектә бик ҙур турнир үткәрҙе. Һөҙөмтәне үҙегеҙ күрҙегеҙ: Роберт Юлдашев, артистар, шоу... Беҙҙең арҡала, Заһир Ҡотлосурин арҡаһында... Ул да миңә ярҙам итте.

Ул көндө Руслан дәғүәсеһенән бер башҡа юғарыраҡ ине, ниңәлер, еңелеп ҡуйҙы. Һорауҙар күп, әйҙә, улар үткәндә ҡалһын. Венерҙын Акоп Степанянды нисек еңеүен, унан һуң ниндәй ажиотаж, фурор тыуғанын үҙегеҙ күрҙегеҙ. Венер икенсе раундта еңелеп бара ине, өсөнсө раундҡа сыҡты ла Степанянды "ер менән тигеҙләне". Бер кем бер нәмә аңламай ҙа ҡалды. Зал "шартланы". Ошо хәлдән һуң беҙҙең эштәр тағы ла алғараҡ китте.

**▸ Һеҙҙең офисығыҙ барҙыр?**

**Р. Сәғитов:** Офисыбыҙ бар, алыш төркөмөбөҙ ҙә бар. Ул әле формалашыу осоро кисерә. Артур Мөхәмәтдинов етәкләй уны. Унын көслө генә спортсыларҙан тупланған командаһы ла бар. Әйткәндәй, тиҙҙән, 8 декабрҙә беҙ панкратион буйынса турнир үткәрергә уйлайбыҙ. Рәсәйҙең панкратион федерацияһы Хабаровск ҡалаһында урынлашҡан. Бынан элгәре Хабаровскиҙан Дмитрий Коньковтан: "Мин Рәсәйҙең урта өлөшөндә турнир үткәрергә теләр инем", - тигән тәҡдим килде. Ҡатнашыусылар исемлегенә күҙ һалһаҡ, беҙҙән, Башҡортостандан был турнирҙа 6 кеше ҡатнашасаҡ. Беҙ Артур менән хәүефле аҙымға барырға булдыҡ. Ике ҡатын-ҡыҙ алышы көтөлә. Хабаровскиҙан урындағы йондоҙ, бер тапҡыр ҙа еңелмәгән Айгөл Хәбирова Һамарҙан (уны үҙебеҙҙең "егет", тип әйткәндә лә була) Юлия Куценко менән көс һынашасаҡ. Ҡыҙҙарҙың икеһе лә бик "ҡатмарлы" спортсы. Уларҙың алышы ҡыҙыҡлы булмаҡсы. Тағы бер парҙың береһе - Сибай ҡыҙы, Хәлит Һибәтуллиндың уҡыусыһы Зарина Ғүмәрованың дебюты көтөлә. Уның дәғүәсеһе - Силәбе ҡалаһынан Галина Яҡупова исемле ҡыҙ.

Шуныһы айырым иғтибарға лайыҡ - Башҡортостан данын башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа, урыҫтар ҙа, дағстанлылар ҙа һәм башҡалар ҙа яҡлаясаҡ. Ә был кисәнең төп алышында Руслан Яманбаев менән Корея республикаһынан килгән Ким Кйонг Пхи билбау өсөн көрәшәсәк. Билбауныҡ затлы буласаҡ.

Шулай итеп, 8 декабрҙә "Өфө уттары" тарихында тәүге тапҡыр һигеҙ мөйөшлө ситлек, октагон торасаҡ. Октагонды Динар Хәйруллин исемле дуҫымдың фирмаһы биреп торҙо. Әле был ситлек Кавказ республикаларында үткәрелгән турнирҙарҙа ҡулланыла. Ноябрҙә уны Өфөгә килтерәсәкбеҙ, турнирҙан һуң ул беҙҙә ҡаласаҡ. Шуға, башҡорт егеттәренә һәм ҡыҙҙарына, үҙебеҙҙең егеттәр һәм ҡыҙҙар өсөн янып көйәйек, тигән саҡырыу ташлағы килә. Билеттар "ат хаҡы" түгел - осһоҙ ғына. Уларҙы Өфө кассаларында алырға була.

**▸ Руслан, беҙ һеҙҙең Ислам Бегидов менән алышығыҙҙы бик ҡыҙыҡһынып күҙәттек. Һеҙ уны ырғып, тубыҡ менән битенә тибеп, бик оҫта еңдегеҙ. Был алдан әҙерләнгән алым булдымы, әллә алыш ваҡытында планлаштырылдымы?**

**Р. Яманбаев:** План буйынса бөтә 3 раундты ла файҙаланырға иҫәп тота инем. Был юлы тренерҙарым мине психологик яҡтан яҡшы әҙерләне - миңә үҙемде иркен тоторға, күнекмәләге һымаҡ һуғышырға өйрәтте. Мин шулай иттем дә, үҙемдең секунданттарымды ла, дәғүәсемдәрҙе лә ишеттем, матур алыш күрһәттем. Мин алға бара, уға һуға башлаһам, Ислам һәр саҡ аҫҡа эйелә ине. Ошонан сығып, миңә уға бер нисә комбинация удар эшләргә лә, уның башына "осоп ҡунырға" ғына ҡалды. Уның нимә эшләргә теләүен аңлау өсөн миңә раунд ярым ваҡыт кәрәк булды. "Стойка" ла ул ҡалыша ине, мин уға йышыраҡ "сәпәй" инем. Раундты "алыр" өсөн уға минең аяҡтарға үтеп инергә кәрәк ине. Мин быны аңлап ҡалдым. Уның секунданттары ла: "Эшләргә кәрәк!" - тигән һүҙҙе ҡабатланы ла ҡабатланы. Мин уның аҫҡа эйелә биреп, мине сеткаға ҡыҫырыҡларға тырышыуын аңланым. Улай итһә, Ислам Бегидов мине партерға күсерә лә, үҙенә мәрәйҙәр эшләй ала ине. Әммә был план тормошҡа ашып өлгөрмәне. Уның минең аяҡтарға йәбешергә ынтылған ғына сағында, ырғыған килеш, тубығым менән уның битенә тибеп өлгөрҙөм. Бынан тыш, беренсе раунд башланған ғына мәлдә Исламға ябай ғына "тройка" алымы менән һуҡҡайным. Әллә бер йоҙроғом шыялап үттеме - уның уң ҡашы тирәһе ҡанай башланы. Бер аҙҙан ҡан уның күҙенә ағып төштө. Был да дәғүәсемә психологик баҫым яһаны шикелле. Ә алыш барышында минең берәй ерем ҡанаһа, мин, киреһенсә, ҡыҙам ғына.

Әйткәндәй, ошо урында Рәмил Миңнулла улының психологик ярҙамын да билдәләп үтке килә: беҙҙең алыштар алдынан ул был турала үҙенең дуҫтарына һөйләй, уларҙы турнирҙы ҡарарға саҡыра. Турнир көнөндә Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан әллә күпме кешеләрҙең һиңә уңыштар теләп яҙыуы ныҡ дәртләндерә. Беҙгә милли кейемдәр, дәртле композициялар табып биреүсе кеше лә ул - Рәмил Сәғитов. Рәмил Миңнулла улының минең алыш алдынан була торған сәләмләү сығышыма Заһир Зәйнетдиновты йәлеп итеүе үҙе бер ваҡиға булды. Заһир ҡурайҙа ла, ҡумыҙҙа ла уйнап ебәрә, бейей ҙә, хатта өзләй ҙә бит.

**Р. Сәғитов:** Эйе. Заһирға мөрәжәғәт итеүем булды, ул Рөстәм Ғиззәтуллин менән бергәләп "Күләгә менән алыш" тип исемләнгән композиция әҙерләп тә ҡуйҙы. Был сығышты күргән Бату Хасиков (әйткәндәй, ул Руслан өсөн янып-көйгән булған икән) алыштан һуң: "Музыкаль оҙатыу елле булды", - тип, үҙ фекерен белдереп китте.

Егеттәрҙе психологик яҡтан әҙерләүҙә Венер менән Артур бик оҫта эшләй. Улар был эштә бай тәжрибәгә таянып эш итә. Саралар комплексын ҡуллана: йә ҡатыраҡ итеп әйтә, йә йомшағыраҡ итеп, "һалпы яғына һалам ҡыҫтыра", кәрәк икән, хатта спортсыны "һелкетеп" тә ала.

**▸ Ул алыш ваҡытында "Боец-ТВ" телеканалы комментаторҙары Руслandың бик тиҙ хәрәкәтләнеүенә иғтибар итте. Был тиклем етеҙлек ни яғы менән яҡшы?**

**Р. Яманбаев:** Был тактик алым булды. Уны миңә, әле Өфөлә саҡта уҡ, Артур Мөхәмәтдинов өйрәтеп ҡуйғайны. "Аяғыңа үтә алмаһындар өсөн етеҙ хәрәкәт ит, дәғүәсеңде албырғат", - тине ул. Тик торған кешенең аяҡтарын тотоп алыуы еңелерәкме, әллә эргәндә һағыҙаҡ һымаҡ өйөрөлгән кешенеңме - үҙегеҙ беләһегеҙ.

**Р. Сәғитов:** Ислам Бегидов бөтөнләй икенсе төрлө алыш көткән, ахыры. Ул Русланды партерға күсерергә теләгәндер. Көс яғынан ул Руслandан күпкә өҫтөнөрәк. Руслан үҙенең ауырлыҡ категорияһына түгел, ә ҙурыраҡ категорияға сыҡты. Ул бер ваҡытта ла 70 килограмға сыҡҡаны булманы. Уның ғәҙәти ауырлығы - 65 килограмм. Ә Исламдың ауырлығы 80 килограмға яҡын ине. Экранда һеҙгә лә күренгәндер: Руслан төҙ генә, ә Ислам культурист һымаҡ. Тамашасы ла үҙенсәлекле бит. 5 мең кеше ултыра икән, ти, бөтәһе лә тип әйтерлек: "Ислам" да, "Ислам", - тип ҡыҫҡыра. Бәлки, был да үҙ ролен уйнағандыр, йәғни Руслandың ҡанын ҡыҙҙырғандыр.

**▸ Руслан, һеҙ октагонға башҡорт милли кейемендә, башҡорт көй-моңо оҙатыуында килеп сығаһығыҙ. Һеҙҙәге милли кейем шәп продюсер алымымы, әллә етдиерәк мәғәнәгә эйәме?**

**Р. Яманбаев:** Мин үҙемде һәр ваҡыт башҡорт итеп тоям. Беҙҙең командала күпселекте урыҫтар тәшкил итә. Улар - аҡ, Венер Ғәлиев менән мин генә - ике ҡара башҡорт. Беҙ уларҙан холҡобоҙ менән дә, көсөбөҙ, етеҙлегебеҙ, тиҙ фекерләүебеҙ менән дә нисектер айырылып торабыҙ. Венер ағай йыш ҡына: "Башҡортто башҡорт кешеһе генә аңлай инде ул", - тип әйтеп тә ала. Берәй алыш алдынан бөрегемде кейеүем була, миндә аңлатып булмаған тойғолар уяна. Рух тип әйтәйемме, әллә башҡа нәмәме...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында ошо фекер бер нисә тапҡыр яңғыраны, шуға ла мин уны тап ошо урында әйтеп үтергә булдым. Руслан әйтеүенсә, Башҡортостандың, Өфөнөң бынамын тигән ММА тренеры - Артур Мөхәмәтдиновы бар. Ул: "Әгәр кеше алыш барған залға килгән икән - ул былай ҙа батыр", - тип, унан ысын батыр әүәләргә тотона икән. Тимәк, кадрҙар бар, шарттар ғына кәрәк... Тағы Руслandан уның киләсәктә Өфөгә ҡайтыу-ҡайтмауы тураһында ла һорағайным. Ул: "Мотлаҡ ҡайтасаҡмын", - тип яуапланы.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**әңгәмәләште.**

***Ул арала ҡараңғы ҡуйырҙы, ә буран тынманы. Аяҡтан йығырлыҡ ел аҫтында һалам тейәү, тейәгән хәлдә лә арыған атты ҡыуыу була торған хәл түгел. Исәр нимәләр уйлайҙырмы, Зөһрә кәбән төбөнә сүгәләп, аптыранып ҡалды.***



Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА

# Бире

Хикәйә

Ҡаршыларына сана һөйрәп килгән Санъярҙы күргән ҡыҙҙарҙың арыуы һыпырып алындымы ни! Кемуҙарҙан ҡаршы йүгереп, санаһына талаша ла башланылар. Береһе менеп ултырһа, икенсеһе уны төртөп төшөрөп, үҙе үрмәләй, өсөнсөһө быныһын аяғынан һөйрәп ташлап, санаға ятып уҡ ала. Алаптай кәүҙәле исәр егет йә ҡуҙғалып китә алмай, йә был ут һымаҡ бисураларға ҡаршы төшөр һүҙ тапмай, тапанып тик тора.

- Йә! Нимә тораһың ҡатып? Апҡайт! - тип бойороҡ бирә Зөһрә, хатта ки етди төҫ менән.

- Ҡайҙа? - Санъяр күҙҙәрен селт-селт йомғолай.

- Үҙенә инде! Кәләш итеп алаһың бит мине! - Эргәләгеләре һығылышып көлә.

- Ҡа-ай... - егет санаһын ебенән тартып яҡынайта ла, унда һуҙылып ятҡан ҡыҙҙы этеп төшөрөргә ҡыймай, бер ҡат әйләнеп сыға. - Апҡайтмайым.

- Апҡатмай ҡара! Санаңа менеп ултырас - ипсе! Мин һинә бисә булам, - үҙе шул хәбәренән һүн, сыҙамай, тегеләргә ҡушылып хахылдай башлай.

- Я-аҡ!.. - исәр илай яҙып ҡаршылаша, - кәрәкмәй... Минә эт кәрәк. Тө-өш...

- Кәрәген-кәрәкмәгәнен һорап тормайҙар аны! Санаңа ултыртмаҫ инең!

Шул ваҡыт быларҙың арттарынан ҡала бирәп сыҡҡан Рәхимә еңгә ҡыуып етә лә, килә килеп яҡтауынан тотоп сананы ауҙарып та ебәрә:

- Ошолайт һин аларҙы, Санъяр, ҡоторғандарҙы! - Улайтып ҡына ҡалмай, йомшаҡ ҡарҙа аунап ятҡан Зөһрәнең еткәнлеген белдереп ҡалҡып-тупайып сыҡҡан түш-осаларын семеткеләп тә өлгөрә. - Йәки ошолайт!

Ҡыҙҙар сыр-сыу килеп ҡасышып, еңгә уларҙы ҡыуып китте. Санъяр улар артынан ауыҙы йырылып ҡарап тора бирҙе лә, санаһын һөйрәп, артабан ҡуҙғалды.

Арыуыҡ йүгерешкәс, аһылдашып туктаны ҡыҙҙар төркөмө.

- Еңгәнең килгәнен күрмәй ҡалып, был Санъяр алып аттымы әллә, тип, ҡот осто! - Зөһрә ауыҙынан боҫ борхотоп, һаман һаһылдай.

- Мин дә аңғармағанмын, анау алйотҡа ҡарап тороп, - уға Сәйҙә ҡушыла.

- Әллә ней ҡыҙыҡ табып булышаһығыҙ шуның менән? Алйот булһа ла ир бит, кәүҙәһе кәүҙәме. Ҡыҙып китеп бер ҡундырыр - тормаҫтай итер, әйтәгүр, - Рәхимә инде етдиләнеп киҫәтә.

- Ул ҡундырғансы әле, ауыҙын саҡ астырабыҙ, - ҡыҙҙар аңларҙан түгел.

- Ана, мин йәш саҡта беҙҙең ауылда бер алйот шулай бер ҡыҙҙы көсләне, теге бала гәрлегенән аҫылынып ҡуйҙы. Башы эшләмәгәндең башҡа ағзалары ишшы яман эшләй тей ул - аңғарып.

Был хәбәрҙе ҡыҙҙар тағы көлкөгә күтәрҙе:

- Шунан, Зөһрә, барырһың алйот Санъярға бисәлеккә!

- Санаһына ултыртып апҡайтыр анда! Һа-һа-һай!

- Йәйәү йүгереп китерһең әлеү!

Был шаярыуҙарға йылмайып килһә лә, Рәхимә еңгә бошонҡо ғына итеп өҫтәп ҡуйҙы:

- Бахырҙың ҡустыһына ла бахарунҡы килгән икән, бирсәҙәтел әйтмәскә ҡушҡан, әллә ҡайһы берәүҙәр бахарункынан һүҙ да ҡайта ла килә бит, тигән...

Ҡыҙҙар шау-шыуҙарынан үтеп, был хәбәрҙе ишетмәне лә.

* * *

Санъяр менән Сәйфулла ауылға утарҙан күсеп килгән. Утарҙа буй еткереп, атаәсәһе үлгәс, улар ауылға килеп, бер иҫке өйҙә йүнәтеп ингән. Санъярына егерме алты-егерме ете тирәһе барҙыр, ҡустыһы ун туғыҙҙа. Икеһе лә ҙур кәүҙәле булып, "һәлп-һөлп" итеп атлап йөрөр, эште ҡапыл тотоноп ҡыҙыу башҡарыр, арымай-талмай әллә нимәләр ҡыйратып бөтөр холоҡфиғелдәренә ҡарап, ауыл халҡы уларҙы йә енлеләр, йә биреләләр тине, тора-бара исемдәрен дә онотоп "теге биреләр" тине лә ҡуйҙылар. Шул "биреләр"ҙең олоһо аҡылға теүәл түгел. Уҡыйяҙа белмәй, күп нәмәне аңламай, бала аҡылы ла юҡ әллә үҙендә. "Бар, ана шуны эшлә, бар, быны алып кил", тигәнгә эшкинә былай. Ҡустыһы ла шулайтып үҙенә иш итеп алып йөрөйҙөр.

Кеше яман да инде, шул исәрҙең дә ҡыҙығын табып тора. "Йәш бейәне егеп сыҡһам, аныһы алаҡанлап килеп көртҡә төштө лә батты, - тип һөйләй икән бер ағай. - Тулап-тулап та сыға алмай, хәле бөттө. Шунда анау алйот "бире" килеп сыҡты, әй. "Ҡана, ҡустым, атымдың аҫтына инеп күтәр әле", - тигән булһам, был барып аҫтына инде лә китте бит бейәнең, ансама тимәй елкәһендә күтәреп маташа. Бейәнең күҙе аҡайған, минең ҡот китте, саҡ аралап ебәрҙем". Эй, тыңлап көләләр. Икенсеһе һөйләй икән: "Ырҙынға аҡҡан ҡар һыуын аҙыраҡ ташып түҡ әле, тип ҡушҡан да председатель, киткән икән, кискәрәк килһә, был дүрәк һаман һыу ташып түгә икән! Арманһыҙ булған, аяғында саҡ баҫып тора тей, ә һаман ташый, тей. "Һин нимә, бөтөн яҙғы һыуҙы түгеп бөтөргә уйлайһыңмы?" - тип председатель биҙрәләрен тартып алған тегенең. Һа-һа-һа!" Ошондай ҡыҙыҡтары күп ул алйот "бире"нең.

Ҡустыһы башта хеҙмәткә, унан һуғышҡа алынғас, Санъяр бер үҙе ҡалды. Күнелһеҙләнеп, етемһерәп киткәндәй булһа ла, колхоз эшендә һыпырылып йөрөй, шуға паегын да бирәләр. Председателдең күҙенә генә ҡарап тора. Улай тиһәң, олораҡ кешеләрҙең барыһын да һис һүҙһеҙ тыңлай ул, хатта йомош ҡушһалар, шатлығынан йүгереп-йүгереп китә. Бигерәк тә күршеһе Мәнәүәрә әбейҙең һүҙен үтәргә ярата. Һыу кәрәк, тиһә - һыуға бара, мәке уй тиһә - уя, ҡул арбаһы менән бесәнен дә ташыша, һыйырын ҡайтманы, тиһә, уныһын эҙләп китә. Ҡарсыҡ айҙы алғым килә, тиһә, айға ла ырғып ҡарар ине ул алйот, тип көләләр башҡа күршеләре. Былай үҙҙәре лә "бире"нең ярҙамынан баш тартмай, эшләтеп, тамағын туйҙырып, булғанда мунсаһын төшөрөп сығаралар. Аҡылы теүәл түгел тип ҡыйырһытҡан, ҡаҡҡан кеше юҡ, әммә зыянһыҙ көләргә, юҡ-бар тип мәрәкәләргә әүәҫтәр инде. Ҡалайтаһың, ауыл халҡы шул бит инде.

Әле сана һөйрәп ырҙындан фермаға ем ташыуы. Аттар етешмәй, шуға председатель "бире"гә ваҡыты булғанда, ауылға ашарға юлланғанында, ем һалып алып барып йөрөргә ҡушҡан. Фермала мал аҫтын таҙалауҙа, ашатып-һуғарыуҙа йөрөгән исәр егет саҡ ҡына ҡулы бушау менән яҡтаулап эшләнгән ағас санаһын һөйрәй ҙә ырҙынға юллана, өс саҡрымды көнөнә әллә нисә урай. Шул йөрөүендә атҡа мохтажлыҡ та ҡалдырмай. Быға ҡыуанған әлеге председатель Бибисара апай: "Ай, шәп тә инде манау Санъяр ҡустым, быһөтте бумаҫ! Кискә майлаптырып ыумас эсерәм икән", - тиһә - бөттө! Әнәр ҡуйырыуға саҡ туктатып алалар үҙен.

* * *

Зөһрә район үҙәгенән ҡайтырға сыҡҡайны, көн боҙолдо. Буран йырып атлауын атлай ҙа ул, бара торғас, йүнәлешен юғалтып, аҙашты ла китте. Эшенән йөҙ һылтау табып көн һорап, военкоматҡа барып килеүе ине. Һуғышҡа киткеһе килә уның да. Былай ҙа ун һигеҙе тулғанын саҡ көтөп алды. Баштан уҡ алынған атаһы тәүге йыл уҡ һәләк булды, унан бер-бер артлы ике ағаһына ҡара ҡағыҙ килде. Шуларҙың үсен алмаҡсы ҡыҙ. Әсәһенән, ауылдаштарынан йәшереп, үткәндә үк ғариза бирәп сыҡҡайны, бөгөн тағы барып яңыртты яҙмаһын. Военком нимә генә тип өгөтләһә лә, һүгенеп әрләп ташлаһа ла, кире ҡайырылып уйыҡ. Барыбер китәсәк!

Күпме атлағандыр... Дөрөҫ барған булһа, ун ике саҡрымды күптән ҡайтып етергә тейеш. Ана шул аҙашҡанға ла йөрөйҙөр инде. Тик бер нисек тә ыңғайҙы самаларлыҡ түгел. Ер ҙә, күк тә, урман-ҡырҙар ҙа бер булып болғанып, геүләп-олоп тик тора. Арманһыҙ булған ҡыҙ, ҡалайтырға белмәй, туктап, аптырап торғанында, ҡаршыһына буран пәрҙәһен йыртып саналы ат килеп сыҡты. Уның да хәле шул сама, бер аҙым атлай ҙа туктай, атлай ҙа туктай. Санаһында әҙәм заты күренмәй. Зөһрәнең йәнәшенә үк килеп еткәс, ҡыҙ уның теҙгененән тотоп алды. Унан тәртәһе буйлап барып, санаһын ҡараһа, хужаһы эт шикелле йомарланған да ятҡан, имеш. Әллә үлгәнме, тип төртһә - юҡ икән, башын ҡалҡытты.

- Ба-а! - "бире" Санъярҙы күреүгә ҡыҙ аптырауҙан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. - Кем һинә ат тотторҙо?

Күҙҙәрен секерәйтә бирәп ҡарап, Зөһрәне лә таныны исәр, бала кеүек ирәбе йылмайған булды.

- Кем ат бирҙе тейем? - исәргә ат тоттормағандарын белгән Зөһрә яуап талап итте.

- Ней... Бисара, - Бибисара апайҙың исемен әйтә алмай шулай тел ҙә ҡуя. Быға ышанғыһы килмәй ҡыҙҙың:

- Алдама!

- Алдамайым мин. Һалам апкил тине... - исәр ҡулындағы дилбегәһен һуалап аҡлана.

Зөһрә уға һынай бирәп ҡарай ҙа, тағы һорау бирә:

- Ҡайҙа киттең инде һаламға?

"Бире" яурындарын ғына һикертә лә, атҡа төртөп күрһәтә:

- Ул белә! Бая белде, апҡайттыҡ.

Муса ҡарттың көн дә һаламға йөрөгән аты белһә беләләр ҙә, тик быны сығарып ебәреүгә ни сәбәпсе булғандыр, тип уйлай уға ҡарап ҡыҙ. Унан санаға менеп, тегенең ҡулынан дилбегәне һыпыра тартып алып, атты ҡыуа. Бик белдекле һәм уҫал ҡылана. Йәнәһе, исәр ҡурҡһын. Сөнки үҙе унан шөрләй. Шуны белдергеһе килмәй.

Һалам кәбәненә саҡ барып етте аттары. Ул арала ҡараңғы ҡуйырҙы, ә буран тынманы. Аяҡтан йығырлыҡ ел аҫтында һалам тейәү, тейәгән хәлдә лә арыған атты ҡыуыу була торған хәл түгел. Исәр нимәләр уйлайҙырмы, Зөһрә кәбән төбөнә сүгәләп, аптыранып ҡалды. Шулай икәүләшеп өшөгәнсе ултырҙылар. Ахырҙа, ҡыҙ бойороҡ бирә:

- Атты туғар, - уны башҡарғас, кәбән төбөнә һалам ҡутартып һалдыра ла, үҙе шуны йырып инеп ултыра. Ҡарап торған тегегә лә шулайтырға ҡуша. Арыған, йонсоған булһа ла йоҡлап китергә йөрәге етмәй. Рәхимә еңгәнең һүҙҙәре иҫенә төшә. Айыуҙай кәүҙәле алпауытҡа ҡалайтһа ла көсө етмәҫен дә аңлай, тик әлеге мәл бер ҡайҙа ла китер ҙә ҡасыр ҙа хәле юҡ. Тик күршеһенең уйын ғына белә алмай. Ултыра торғас, һүҙ ҡуша:

- Берәй насар нәмә уйҙаһаң - ҡара уны!

Тегеһе йомоҡ күҙҙәрен асып ҡарап ҡала. Ҡыҙ башы менән янында һөйәүле торған ҡоралына ижай:

- Эргәмдә - һәнәк!

"Бире" ризалығын белдереп, ихлас ҡына баш һелкә:

- Һәнәк.

- Ҡара уны, эсенә ҡаҙармын!

Исәрҙең күҙҙәре лә, уларға ҡушылып ауыҙы ла ҙур асылып китә:

- Ҡай, ҡаҙама!

- Улайһа, тик кенә ултыр!

- Эһе.

Бер аҙ ваҡыттан аҙыраҡ тынысланып, һалам эсендә ятып уҡ ала ҡыҙ. Тегегә лә шулайтырға ҡуша, юғиһә, аяҡтары ойор. Ята торғас, тағы хәбәр ҡуша:

- Сәйфулланан хат киләме?

- Килә.

- Нимә тип яҙа?

Исәр бер аҙ ғына тынып тора ла, тамаҡлап ебәрә:

- Ҡар һыуҙары ирәп аҡһа, туғайҙарҙы ҡандырып, ғишыҡтарым шуны һәтте, ерҙе-күкте яндырып...

Таҡмаҡ бөтөр-бөтмәҫтән уҡ көлә лә башлай Зөһрә. Эй, алйот, хат ташыусы ҡыҙҙың үҙе сығарған таҡмаҡтары инде былар. Кем ағаһына шундай хәбәр яҙып ятһын. Хатта яҙылғанды барыбер аңламаҫ тип, үҙенсә юҡ-бар һөйләй ҙә китә инде теге шилма ҡыҙ.

Зөһрә көләп туктауға, исәр тыныс ҡына итеп әйтеп ҡуйҙы:

- Үлде ул Сәйфулла, ҡар булмағанда уҡ... Күп итеп ҡаны аҡты. Ҡайта алмаҫ инде, уны бит ергә күмделәр.

Ҡыҙ аҡ пәрҙә аша уның йөҙөн күрергә итеп тексәйҙе:

- Кемдәр күмде?

- Күп кешеләр. Күмделәр ҙә һауаға "тох-тох" иттеләр... Ошо тирәһенә матур йәмәкәй һалдылар, - оҙон ҡулы менән үрелеп ҡыҙҙың түш тирәһенә бармаҡ осон тейҙергәйне, быныһы ырғып китте:

- Ал ҡулыңды! Нишана! Һәнәк кәрәкме?

"Бире" кәбәнгә һырына бирәп шылды:

- Кәрәкмә-әй...

Тағы бер аҙ шым яттылар. Ахырҙа, ҡыҙ кемгә һөйләргә белмәй йөрөгән серен сисмәксе булды. Барыбер был аңламаҫ та, берәүгә лә һөйләмәҫ тә, тип.

- Һуғышҡа киткем килә. Ишетәһеңме, бир... Санъяр? Мине һуғышҡа алырҙар микән, эх?..

Күршеһе бер аҙ ваҡыттан ғына телгә килә:

- Һин ут эсендә йүгереп йөрөйһөң, йүгереп йөрөйһөң... Бөтәһе лә яна.. үлә... ҡысҡыра... һин уларҙы һөрәйһең... һин илайһың... Мин дә илайым...

Аптырауының сигендә көлә генә алды:

- Һин нишләп илайһың?

- Һин илағас... Һинең көсөң етмәгәс...

- ...

Ярты сәғәттәй һүҙһеҙ булғас, Зөһрә тағы өндәшә:

- Сәйфулла ҡустыңдың класташы Ҡасим минә хат яҙа.

Быны нинә әйткәндер, үҙе лә аңламай. Бер исәр менән тиң итеп һөйләшеп ултырыуын ҡыҙҙар белһә, ятып көләрҙәр ине лә, әле мәле ул түгел.

- Ҡасим ҡайтмай... Ул ҙур һыуға төшөп китә.

- Ыстағайым! Нимә һөйләйһең, алйот! - тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡала ҡыҙ. - Һине тыңлап ятҡан мин дә инде.

"Бире", гүйә, уны ишетмәй:

- Бер ҡуллы кеше алып китә һине... алыҫҡа. Бер күҙе лә юҡ...

- Ауыҙыңдан ел алһын! Етәр! Әллә нимәләр юрап ятма минә! Нишана! - Зөһрә ҡалҡынып, йоҙроғон һелкеп ала хатта. - Минә күрәләтә бер ғәрипте теләп ята ишшыу бында! Үҙенде алып китһен әйҙә бер ҡуллы, бер күҙле бисура.

Иҫәрҙең тауышы баҫыла төшә:

- Мин ул кеше килгәнсе булмайым, китәм...

- Китерең буғымды! Йөрөрөң әле ошонда шул сананды һөрәп. Мин бәләкәй саҡта ла йөрөй инең, ҡартайғас та йөрөрөң.

Бынан ары һөйләшмәнеләр. Һепермә буран аҫтында баҫылып, ойоп китҡән еренән, әллә төн уртаһында, әллә инде иртәнсәк, баҫлығып, саҡ уянып китте Зөһрә. Уянһа - лысма һыу. Әйтерһең, өҫтөндәге ҡар иреп аҡҡан. Башын ҡалҡытырға итһә, үнәсе ярылып киткәндәй булды. Муйынына тотондо. А-ай, телен дә ҡыбырлатмаҫлыҡ итеп тамағы шешеп сыҡҡан икән. Маңлайы ла сатнап ҡына килә... Ҡыҙ торорға маташып, улай тулғанды, былай тулғанды, унан бер айы ҡалҡынғайны, аяҡтарына баҫа алмай, кире ҡолап китте. Аҙыраҡ яткас, тағы шулай маташты. Был юлы мәтәләп барып Санъярҙың өҫтөнә төштө. Тегеһе ҡурҡып уянды ла, һикереп тороп баҫты. Ҡыҙ уға тотоноп ҡалҡынырға итте, тик барыбер аяҡтары тыңламаны. Был юлы уны ҡолауҙан егет тотоп ҡалды.

- Темә минә... Ишетәһеңме, бире?.. Бармағыңды тигеҙәһе.. бума... Һәнәк...

Иҫәр, ҡулында һәленеп төшкән ҡыҙға ҡарап ҡатты...

* * *

Аҙна тирәһе һаташып-тулап ауырыны ла, килде лә торҙо Зөһрә. Өләсәһенең үләндәре лә килеште-ме? Ә Санъяр лыпын ятҡан. Ат егә белмәгән икән, бахыр, иҫен юйған Зөһрәне санаға һалып, үҙе һөйрәп алып ҡайтҡан. Ҡалтырап, янып, аяҡтарын һөйрәп саҡ килеп еткән, тиҙәр. Һыуыҡ тейгән икән уға ла. Өләсәһе, йәлләп, өйҙәрендә алып ҡалған, тәрбиәләй бына хәҙер. Зөһрә лә эштән бушағанда эргәһенә килеп ултыра, тик һөйләшә алмай нишләптер ауырыу, шуға йыр йырлай йәки әкиәт һөйләй ҙә китә. Аңлаймы-юҡмылыр - ҡарап ҡына ятып ҡала.

Артабанғы ваҡиғалар уйламаҫтан ҡапыл үҙгәреп китте. Зөһрәгә повестка килде! Был яҡтан һуғышҡа алынған тәүге ҡыҙ булғас, уны оло шау менән бөтә ауыл сығып оҙатты. Шул китеүенән өс ай санитарҙар курсын үтте лә, ут эсенә инде. Нимә генә күрмәне, ниҙәр генә кисермәне ошо юлында! Бер ҡаты бәрелеш мәлендә, яу яланынан дәү көүҙәле командирын һөйрәгәндә көсө етмәй ергә ятып үкһегәндә... "бире"нең һүҙҙәрен иҫләне... Унан ауылына хат яҙғайны, Санъяр шул ятыуынан тора алмай, вафат булған, тинеләр.

Һуғыш бөттө. Күптән хаты килмәгән Ҡасимдың да ҡара ҡағыҙын алған булған икән туғандары. Ул Днепрҙы аша сыҡҡанда һыу төбөнә киткән... Сәйфулла ла күптән башын һалған, уға герой исеме биреп, орденын түшенә һалып ерләгәндәр, салют биргәндәр. Быларҙы бергә булған яуҙаштары яҙып ебәрә. Һуғыштың тәүге көҙө үк һәләк була ул. Ауылдаштары иҫәр ағаһын үҙҙәренә килгән хаттарҙы күрһәтеп, әүрәтеп кенә йөрөткән икән. Ҡатындар тырышҡан... ә ул белгән. Ҡыуанып тыңлаған, таҡмаҡтарына ҡул сапҡан булған...

Тағы ла бер нисә йыл госпиталдә эшләгән Зөһрә, бер ҡулы һәм күҙен юғалтҡан фронтовикка эйәреп китеп, Кавказ тауҙары итәгендә ғүмер һөрә. Тыуған яғын һағынған йылы кистәрҙә ауылы, әсәһе, өләсәһе, ахирәт ҡыҙҙары менән бер рәттән "бире"не лә иҫләй. Ул бит уның ҡәҙерле хәтирәләренең бер өлөшө, иҫләмәй һуң...

*АФАРИН!*

# ШИҒРИ ҺҮҘ...

## лайыҡлы баһаланды





**(Башы 1-се биттә).**

Ә инде иң баштан башлағанда, былай булды. Хәтерегеҙҙәлер, режиссер Наилә Сәфәрғолова "Рәсәй - Башҡортостан" телеканалында ойоштороған "Әйтер һүҙем бар" шиғыр, башҡорт һүҙ сәнғәте байрамдары халыҡ араһында киң популярлыҡ яулағайны. Тәүгеһендә ҡатнашҡандарҙың йомғаҡлау кисәһен - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында үткән байрамды ла онотоу мөмкин түгел. Шиғриәттен, башҡорт теленең көсөн, матурлығын, ҡеүәтен халыҡҡа еткереүҙе дауам иткән Наилә Сәфәрғолова артабан "Йөрәк һүҙе" проектын "Курай" каналында эфирға алып сыкты. Ҡайҙа ғына барһаң да, кемдәр менән генә күрешһәң дә, барыһы ла ошо шиғри дуэттар хаҡында һөйләнә. Һәр кемдең телендә булып, телевизор ҡараусылар һөйөүен яуланы телепроект.

Шишәмбе көн баш ҡаланың Заһир Исмәғилев исемендәге Опера һәм балет театры залында "Йөрәк һүҙе"нең финалы үтте. "Үтте" тигәндә илай-илай күҙҙәр шешеп бөттө, тигәндән башларға ла була. Ысынлап та, оло шиғриәт байрамы булды был кис. Бер аҙ шиғыр бәҫе, шағир рухы, һүҙ көҙрәте төҫөн юя биреп киткәндәй булған был көндәрҙә көйлө һүҙ үҙенең барлығын, барлығын ғына ла түгел, үтә лә ҙур көскә эйә икәнен тағы ла бер ҡат иҫбатланы.

... Халыҡ оло залды күтәреп алып барҙы! Ҡул сабыуҙарҙан ус һөйәктәре сәнкене. Сәхнәнән ағылған шиғырҙар шауҡымына бирелгән тамашасы донъяһын онотто. Эргәмдә ултырған оло ғына ағай унайһыҙланыуынан башын да ҡалҡыта алманы... һығылып иланы ла иланы.

Шиғри бәйгелә ҡатнашыусылар араһында бер төркөм ғаилә ағзалары ла булды. Мөнир Ҡунафин улы Йәдкәр менән, Лариса Абдуллина улы Хасбулат менән, Алһыу Бәхтиева улы Азамат Урманшин менән, Лилиә һәм Айназ Низаметдиновтар, апалы-һеңлеле Миләүшә һәм Ләйсән Шәриповалар, ирле-ҡатынлы Гөлназ һәм Руслан Хайсаровтар, Гөлнара Хәлфетдинова ҡыҙы Гөлнәзирә менән, Зөлфиә Ханнанова ҡыҙы Гүзәл Әлибаева менән, Дилара Әйүпова ҡыҙы Зөлхизә менән. Артабан Илдар Ғүмәров һәм Светлана Хәкимова, Винира Хәсәнова һәм Ринат Ибатуллин, Азамат Юлдашев менән Алина Ғәлиева. Финалға сыҡҡан 12 парҙың һәр береһе ошо батырлығы өсөн маҡтауға лайыҡ.



Ә хәҙер бер аҙ шиғырҙар хаҡында. Һәр пар бөгөнгө көн ҡаҙағына тура килгән, актуаль булған темаларҙы һайларға тырышҡан. Һәр шиғырҙа халыҡ яҙмышы, уның үткәне, бөгөнгөһө өсөн һыҡрау ишетелде. Былар күңелгә үтеп инде, әммә зарланыуға, "милләт" идеяларын "ҡорбан" образы менән бутауға ҡоролған әҫәрҙәр ҙә булманы түгел. Әлбиттә, былар бөгөнгө заман проблемаларының өҫтөнә баҫыу маҡсаты менән эшләнгәндер, был тәңгәлдә күптәр бәхәскә лә инер, әммә... шиғриәт ул барыбер ҙә мәңгелек төшөнсәләр яҡлы. Шуға ла Зөлфиә Ханнанова менән Гүзәл Әлибаеваларҙың беренсе сығыштағы уҡ әсә һәм бала араһындағы Аллаһы Тәғәлә тарафынан һалынған иң көслө һәм саф бәйләнеште сағылдырған әҫәре тамашасыны ла, жюри ағзаларын да таң ҡалдырҙы ла ҡуйҙы. Шулай булмай һуң! Зөлфиә Ханнанова бит үҙ ижадын укыны. Ул был шиғырҙарын үҙе кисереп һәм йөрәге аша үткәреп яҙған, эсенә һыя алмағаны йәнә, тәне аша һарҡытып сығарып төшөргән аҡ ҡағыҙға. Һәм шуны беҙҙең күңел яраларына шифалы май итеп кенә һыланы ла ҡуйҙы. Әйткәндәй, бөгөнгө башҡорт шиғриәтенең иң көслө шағирәһе лә ул. Уның шиғырҙары мәктәп әсбаптарына индерелергә, башҡорт-ҡатын-ҡыҙы йәҙән билдәләгән журналдар битен биҙәргә, китаптары тираж-тираж итеп сығарылырға һәм һәр шиғыры әләм итеп күтәрелергә тейеш тә бит... Ижадсы ҡатын-ҡыҙға һаман да бары "ҡатын-ҡыҙ" ғына итеп ҡарау, унан килә ижадҡа бәйле донъяның нигеҙе аҡсаға ҡоролған булыуы ла хәл иткес факторҙар булып торалыр... Ә инде бәйгегә әйләнеп ҡайтҡанда, Зөлфиә Ханнанова ҡыҙы Гүзәл менән бөтөн ошо һәм башҡа кәртәләрҙе ашатлап, ихлас хисле шиғырҙары, тыйнаҡ йылмайыуҙары, тартынып баҡҡан һөйкөмлө ҡараштары менән барыһын да әсир итте. Жюри ағзалары күңелдәрен тыңлаһын, гәҙел хөкөм сығарһын ине, тип теләп ултырғайным - шулай булды ла. Абруйлы ир-уҙамандарыбыҙ БР халыҡ артистары Әхтәм Абушахманов, Олег Ханов, Әхәт Мортазин, билдәле диктор Флүрә Мурзина, йәш шағирә Эвита Ғәйнетдиновалар үҙҙәре лә был сараның күңелдәрҙе дауыллы дингеҙҙә бәргеләнгән кәмә кеүек итеп алып йөрөрөн күҙалламағандыр, күрәһең. Ә ул шулай булды.



Киләсәктә, был проект тағы ла киңәйтелеберәк, шымартылыбыраҡ сығарылыр, моғайын, һәм унда үҙ көсөн һынап ҡарарға теләүселәрҙең һаны ла күберәк булыр. Был осраҡта билдәле шәхестәрҙән тыш, ябай халыҡ та ҡатнаша алыр, тип өмөтләнә күптәр. Унан килә, халыҡ шиғыр уҡып, шиғыр тыңлап өйрәнер. Шиғырҙың лозунг формаһында ғына әйтелә торған һүҙ түгел, ә тыңлаусы күңеленең иң төпкөлдә йәшеренгән нескәнән-нескә ҡылдарын тирбәлтә алыр сихри моң да икәнлеген аңлар. Әйткәндәй, республикабыҙҙа беренсе тапҡыр шиғри һүҙ шулай лайыҡлы баһаланды. Бәйге булғас, уның тейешле бүләге лә иғтибар үҙәгендә тора бит. Сибай ҡалаһының данлыҡлы аҡһаҡалы, йылдар дауамында тыуған төйәк тарихын, шәхестәрен өйрәнеп, китаптар баҫтырып йөшәп, бынан бер нисә йыл элек кенә баҡыйлыҡҡа күскән Азамат ағай Тажетдиновтың улдары - Илшат менән Нур атлы егеттәр бағыусы булып, төп еңеүсегә "Лада-Грант" машинаһы бүләк итте. Лайыҡлы бәйгесегә - лайыҡлы бүләк. Уларға ла, Наилә Сәфәрғолова һәм уның ижади командаһына ла, бәйгеселәргә лә "Афарин!" тип ҡат-ҡат алҡышларға ғына ҡала.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

*✓ Гәрәбә бынан 50 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән! Бына был асыш бөгөн бер ғалим тарафынан да кире ҡағылмай. Ғалимдар гәрәбәнең барлыҡҡа килеүен тәбиғәттең ҡапылдан ғына үтә ныҡ эҫеп китеүе менән бәйләй.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



## ЙОҠО - ДАУА

■ Торонто университеты белгестәре ишетеү һәләтенә насар йоғонто яһаусы факторҙар араһында йәмәғәт транспортындағы шау-шыуҙы ла индерә. Бынан тыш, тауыш тәьҫиренең депрессия менән бәйләнеше барлығын да асыҡлаған ғалимдар. Иң ҡыҙығы, көслө тауыштың оҙайлығы мөһим түгел, бер-ике минутлыҡ тауыштың да ишетеү һәләтенә йоғонтоһо кире булыуы ихтимал. Шулай уҡ ҡолаҡсындарҙа көслө музыка тыңлау ҙа зыянлы. Ә балалар өсөн ҡапыл шартлаған шар тауышы зарар килтерә. Был тауыш атыу яңғырауына тиң, бынан иһә кешенең ишетеү һәләтен юғалтыуы ла бар.

■ Төндә тәҙрәләр асыҡ булһа, яҡшыраҡ йоҡлаясаҡһығыҙ, тип кәңәш итә белгестәр. Быға ҡыйыулығығыҙ етмәһә, һис булмаһа, йоҡо бүлмәһенең ишеген япмағыҙ. Тикшеренеүҙәрҙә 17 студент ҡатнашҡан. 5 көн буйына белгестәр уларҙың йоҡоһон күҙәткән. Ҡайһы бер төндә барыһы ла тәҙрәне һәм бүлмә ишеген ябып йоҡлаған, ҡайһы бер төндә, киреһенсә, тәҙрә лә, ишек тә асыҡ торған. Улар йоҡлаған бүлмә температураһы һәм дымлылыҡ контролдә тотолған. Яҫтыҡҡа һәм ҡатнашыусыларҙың ҡулдарына хәрәкәткә тәьҫир итеүсе ҡоролма беркетелгән. Бынан тыш, белгестәр бүлмәләге углерод диоксиды концентрацияһын да күҙәткән. Тикшеренеү күрһәтеүенсә, ябыҡ тәҙрәләр һәм ишектәр һөҙөмтәһендә бүлмәлә углерод диоксиды кимәле артҡан. Тәҙрәне асыҡ тотоу бүлмә ишеген асып ҡуйыуға ҡарағанда углерод диоксиды кимәлен яртылаш кәметкән. Был осраҡта кешеләр яҡшыраҡ йоҡлай һәм төндә һирәк уяна.

■ Йоҡо - ул дауа, тигәндәрен ишеткәнегеҙ барҙыр. Был йәһәттән тағы бер яңылыҡ. Киҙеүҙән, һалҡын тейҙереп ауырыуҙан ҡурҡһағыҙ, иртәрәк йоҡларға ятығыҙ, ти Британия ғалимдары. Улар 22 меңдән ашыу кешене тикшереп, йоҡо туймай йөрөгән саҡта һалҡын тейҙереү мөмкинлеге лә артыуын асыҡлаған. Тәүлегенә 5 сәғәт кенә йоҡлаусылар юғары хәүеф төркөмөндә. Уларҙың иммунитеты инфекцияларға ҡаршы насар көрәшә. Был төркөмдәгеләрҙә тамаҡ-тын юлдары инфекциялары сирҙәре 50 процентҡа күберәк осрай. Етмәһә, уларға ҡабаттан ауырыу эләктереү хәүефе лә янай. Бындай күңелһеҙлек булмаһын өсөн ете сәғәт йоҡларға кәрәк. Иммунитетты нығытыуҙа йоҡонoң өлөшө ифрат ҙур.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Бынан тыш, йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ экспериментты ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым яһай башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

*ТЕРЕКЛЕК МӘКТӘБЕ*

**Бөгөн беҙ Урал шырлыҡтарын велосипедта үтеп буламы, юҡмы икәнен тикшереп ҡараясаҡбыҙ. Дөрөҫөрәге - быны тикшереп ҡараған Артур исемле егеттең сәйәхәтнамәһен тыңлаясаҡбыҙ. Ошо йылдың сентябрендә һәүәҫкәр велосипедсы, "Киске Өфө" гәзитенең алыштырғыһыҙ хеҙмәткәре Артур БАТЫРШИН үҙенең дуҫы, эшҡыуар, сәйәхәтсе Денис ӨМӨТБАЕВ менән Урал армыттарында 100 саҡрымғаса һуҙылған велосипедлы сәфәрҙә йөрөп ҡайтты. Был походҡа егеттәр нисек әҙерләнгән, тәбиғәт уларҙы ниндәй һынауҙар алдына ҡуйған - барыһы тураһында ла Артурҙың һөйләгәндәренән белербеҙ.**

# УРАЛ ТАУҘАРЫНА ВЕЛОСӘЙӘХӘТ...



### Берәүҙән - икәү яҡшы!

Мин 5-се йыл инде велосипедтан "төшмәйем". Ҡаланың бер осонан икенсе осона тиклем елдәй елдереп барып етергә "ике тәгәрмәсле атым" ныҡ ярҙам итә. Тағы бер ҡыҙыҡһыныуым бар минең. Йәйәүләп урман-тауҙар ҡыҙырырға яратам. Бер мәл, ҡаланан ситкә велосипедта сәфәргә сығып килергә кәрәк ине, тигән уй башыма килде. Тик ундай сәфәр етди әҙерлек талап итеүен аңлағанға күрә, уны кисектерә килдем. Әҙерлек тә кәрәк, ышаныслы юлдаш та. Әлеге ниәтемде сәйәхәтсе Денис Өмөтбаевҡа һөйләгәйнем, ҡыуанып китте: ул да, минең кеүек, велосипедлы сәфәр тураһында хыялланған, бының өсөн ышаныслы юлдаш эҙләгән икән. Берәүҙән - икәү яҡшы, тип, хыялдарҙа ғына йөрөткән сәфәребеҙгә икәүләп әҙерләнә башланыҡ.

### Денис Өмөтбаевтың маршруты

Маршрутты Денис тәҡдим итте. Уның планы былай ине: билдәләнгән көндә таң менән Өфөнән Силәбе өлкәһе Әшә ҡалаһына тиклем велосипедтар, сумкалар менән электричкаға ултырабыҙ ҙа, артабан картала күрһәтелгән юл буйлап, Белорет районы Бриштамаҡ ауылына тиклем барабыҙ. Бриштамаҡта йәнә электр поезына ултырып, Өфөгә ҡайтабыҙ. Юлдың велосипедта үтелә торған өлөшө яҡынса 100 саҡрым булғанға күрә, 60-сы саҡрымдағы Беҙәреш ауылында (Силәбе өлкәһе) ҡунаҡханала бер төн ҡунабыҙ. Артабан сәфәребеҙҙең икенсе көнөнә 40 саҡрым ғына ҡала, уны яңы көс менән еңел генә үтеп, электричкаға ултырабыҙ. Шуға күрә, үҙебеҙ менән палатка ла, йоҡлау тоҡтары ла алып тормайбыҙ. Шулай планлаштырып, сәфәр көнөндә таңғы 5-се яртыла арҡаларға 30-ар килолыҡ рюкзактар артмаҡланыҡ та, Өфөнөң тимер юл вокзалына юлландыҡ. Ярай ҙа электричкала велосипедтар өсөн өҫтәмә хаҡ түләтелмәй икән, хатта уларҙы бер урынға (бының өсөн тәғәйенләнмәгән булһа ла) беркетергә лә була...

### Урман үҙенекен итә

Әшә ҡалаһынан Беҙәреш ауылына ҡарай хәрәкәт иткәндә, асфальт юл да, таш-ҡырсынлы юл да, квадроциклдар юлы ла, кеше һуҡмағы ла, мышы һуҡмағы ла осраны. Һуңғыһы, бәлки,

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*

# ГӘРӘБӘЛӘР,

## йәки бал ҡортона нисә йәш?

**Гәрәбә - үтәнән-үтә күренмәле һарғылт таш. Ул урыҫса янтарь тип атала. Был аҫыл таш менән башҡорт халҡы борон-борондан таныш. Профессор Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы Хисаметдинова гәрәбәне ошолай тасуирләй. Гәрәбә - башҡорт мифологияһында сихри көскә эйә булған бер матдә. Ул аҫыл таштар рәтендә биҙәнеү, һаҡланыу әйбере булараҡ ҡулланыла. Ышаныуҙар буйынса, гәрәбә магик көскә эйә. Мәҫәлән, һары ауырыуы менән интеккән кешегә гәрәбә имергә, уны ҡырып ашарға, муйынға тағырға ҡушалар. Ышаныуҙар буйынса, гәрәбә һары ауырыуын ҡурҡытып ҡыуа икән. Һары ауырыуынан тыш, гәрәбә йөрәккә һары һағыш ултырғанда ҡулланыла. Профилактик сара булараҡ, күҙ теймәһен, һары булмаһын, тип, элек-электән гәрәбә муйынсаҡ таҡҡандар.**

Гәрәбә тураһында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт ошо. Ә шулай ҙа ҡайһы бер уҡыусы иғтибар иткәндер. Бына мин гәрәбәне аҫыл таш тип атаным. Ә Фирҙәүес Ғилметдин ҡыҙы уны, бер матдә, тип атап, аҫыл таштар рәтенә генә ҡуйҙы. Ташмы ул, әллә аҫыл таштар рәтендәге бер матдәме - быны асыҡлап үтәйек. Әммә был атамаларҙа яңылышлыҡ юҡ, минеңсә. Ҡайһы бер ғалимдар, гәрәбәне тулыһынса таш тип атап булмай, тигән фекерҙе ышаныслы раҫлай. Өйрәнеүҙәр барышында улар был ташты юғары температурала тотҡандар. Гәрәбә яйлап йомшарған һәм ... ҡарағай сайырына әйләнгән дә ҡуйған. Бына шулай, аҫыл таштар рәтендә йөрөгән гәрәбә ысынбарлыҡта иһә ни бары беҙ белгән ҡарағайҙың ябай ғына сайыры булып сыҡҡан! Әммә шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ғалимдар был сайыр-гәрәбәне таштар исемлегенә ышаныслы индерә. Төп дәлил булып уның йәше тора. Уйлап ҡараһаң, иҫ китмәле инде. Гәрәбә бынан 50 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән! Бына был асыш бөгөн бер ғалим тарафынан да кире ҡағылмай. Ғалимдар гәрәбәнең барлыҡҡа килеүен, дөрөҫөрәге, ҡарағайҙың күпләп сайыр бүлеп сығарыуын, тәбиғәттең ҡапылдан ғына үтә ныҡ эҫеп китеүе менән бәйләй. Бынан 50 миллион йыл элек Ерҙә көндәр шул хәтлем эҫе торған, хатта үҫеп ултырған ҡарағайҙар сайыр бүлеп сығара башлаған. Бына ошо сайырҙар 50 миллион йыл буйы ерҙә ятҡан һәм тора-бара ташҡа

башҡа хайуандыҡы булғандыр, беҙ уны кешенеке икән, тип уйлап, аҙаша яҙҙыҡ. Телефондарыбыҙҙағы юлдаш карталары ярҙамға килде. Күкрәккә етмәле ҡаҙаяҡ, йылан теле, күрән, башҡа һаҙ үләндәре үҫкән бер урында әлеге һуҡмаҡтарҙан йөрөй-йөрөй, байтаҡ ваҡыт һәм көс сарыф иттек.

Бер заман күктә ямғыр болоттары ҡуйырып китте. Тиҙҙән ямғыр башланасағын иҫкәртә ине улар. Ә беҙ ҡунаҡханаға барып етмәгәнбеҙ - беҙҙән алдараҡ был ерҙән үткән туристар "Вьетнам" тип нарыҡлаған "джунгли"ҙарҙа - Беҙәрештән 20 саҡрым алыҫта икәнебеҙҙе аңлап ҡалдыҡ. Артабан юлды дауам итмәҫкә, ошо урында ҡыуыш ҡороп, төндә урманда уҙғарырға ҡарар иттек. Тиҙ генә эштәрҙе бүлешеп алдыҡ: мин усаҡ яғам, Денис ҡыуыш эшләй. Икебеҙ ҙә арығанбыҙ. Беребеҙ бер нәмә өндәшмәнек, әйтерһең, мейене "һүндереп" торҙоҡ. Шуға, тиҙ һәм һөҙөмтәле эшләнек, ямғыр яуа башлағанда, беҙ уға әҙер инек инде. Ямғырҙан бигерәк, кеше бейеклегендәге үлән йырып йөрөй торғас, лысма һыу булдыҡ. Алмаш кейем юҡ. Ярай, "термобельё" тип аталған йылы эске кейемдәр алғайныҡ - шуларҙы кейеп, йылынғандай булдыҡ. Булған ғына ҡоро кейемдәребеҙҙе кейеп, ямғыр яумаҫ элек йолҡоп, ҡыуыш эсенә түшәгән үләнгә ултырып, сәй эстек, ныҡ итеп ашап алдыҡ. Тамаҡты туйҙырырға тырыштыҡ. Тамаҡ туҡ булһа, өшөмәйһең бит. Ашағас, өҫкә еңел курткалар ябынып, үлән өҫтөндә йоҡларға яттыҡ. Алай ҙа төн ныҡ һыуыҡ булманы. Ул тиклем өшөтмәне. Ямғыр һибәләп торғас, мин таңғы 7-лә үк уяндым. Яҡтырғас, утын эҙләүе лә еңелерәк ине. Утын йыйып алдым да, усаҡ яҡтым. Болоттар таралды, ҡояш ҡалҡты, 9-ға тиклем ҡәҙимге генә кибенеп алдыҡ. Абайлабыраҡ ҡараһаҡ, беҙҙән 10 метр арала ғына ағастар үҫкән иҫке юл ята икән. Кисә ошо юл эргәһендә өйөрөләп йөрөгәнбеҙ ҙә йөрөгәнбеҙ. Йылы эс кейемдәребеҙҙе сисеп торманыҡ, һыу кейемдәребеҙ барыбер һыуланыр, тип, шул килеш кейеп алдыҡ та, артабан киттек. Ҡатмарлы юлдарҙан 40 минут барғайныҡ, ҡәҙимге юлға килеп сыҡтыҡ. Ямғыр ныҡ яуған, үлән - һыу, юл - һыу. Батҡаҡ, бысраҡ. Өҫтөбөҙ лыс һыу булғас, күләүек-маҙарға иғтибар итеп торманыҡ - кисеп үттек тә киттек. Беҙгә тәгәрмәстәрҙән бысраҡ һыу сәсрәй, ә беҙ - алға еләбеҙ. Шунда йылы эс кейеменең файҙаһы тейҙе. Уны кейгәндән һуң һыу сикәнес түгел. Ҡыуыш эргәһенән унынсы ярты тирәһендә сыҡҡайныҡ, Беҙәреш ауылына 12-лә генә барып еттек. Беҙәрештә электричкаға өлгөрмәү ҡурҡынысы барлығын аңлап ҡалдыҡ...

### Беҙәрештә

Әллә Бриштамаҡтағы тимер юл станцияһына машина яллап ҡына барайыҡмы, тигән уй ҙа булманы түгел. Шулай ҙа велопоход исемен боҙмаҫҡа булдыҡ. Арыһаҡ та, өлгөрөргә тырышырға кәрәк, тинек. Беҙәреш ауылында беҙҙең менән ҡыҙыҡ ҡына бер хәл булды. Шундағы ҡоҙоҡтан һыу алып тора инек, эргәбеҙгә бер ағай килде. Һүҙгә-һүҙ ялғанып, уның менән һөйләшеп киттек. Ул беҙҙе үҙ йортона алып китте. Донъяһын күрҙек, хужа ағай беҙгә һөт эсерҙе. Беҙәрештәрҙе яҡшы йәшәйҙәр, тип әйтеп булмай. Ни өсөн тигәндә, ауыл бөтөп бара, ярты ауылда йорттар буш тора. Эш юҡ. Ҡарттан беҙҙең юлда осраясаҡ киләһе тораҡ нөктә - Белорет районы Мулдаҡай ауылы тураһында һорашабыҙ. "Ул ауыл бармы, әллә картала ғына күрһәтелгәнме?" - тибеҙ. Ҡарт: "Әлбиттә, ауыл йәшәй, был бит Башҡортостан!" - ти. Ныҡ һоҡланып, ихтирам менән, Башҡортостанда ауылдар ныҡ һәйбәт йәшәп ята, унда юл да бар, тип һөйләне ул. Ысынлап та, Беҙәрештән сыҡҡас, 7 километр юл үткәйнек, Мулдаҡай ауылына барып еттек. Беҙәрештә ҡый үләне баҫҡан булһа, Мулдаҡай ауылы эргәһе сабылған, йәп-йәшел булып ҡурпы үҫкән. Күбәләр, кәбәндәр ултыра. Ауыл халҡының гөрләтеп донъя көтөүе күренеп тора. Яҡынлай башлағайныҡ, һыйырҙар, йылҡы малы күренде. Бынамын тигән мәктәптәре лә бар икән. Өйҙәр төҙөк, балалар уҡыуҙан ҡайтып бара. Силәбе өлкәһе менән Башҡортостан ауылдары араһында был тиклем үк айырманы көтмәгәйнек. Мулдаҡайҙа ағып ятҡан бер йылғала кейемдәребеҙҙе, велосипедтарыбыҙҙы, ҡапсыҡтарҙы йыуып-һөртөштөрөп алдыҡ. Бүтән сара юҡ ине. Шоссе юлы буйлап киттек. Бер ике биләнде менеү ҡыйыныраҡ булды. Тауҙы үткәс, һарҡыуға төшөү - оҙон һөҙәк юл башланды. Көс түкмәйһең, ял итеп бараһың. Бриш ауылына "һә" тигәнсә килеп еттек. Бриштә ла бер апайҙарға инеп, тағы һөт эстек. Бриштамаҡ станцияһына планлаштырған ваҡыттан алдараҡ килеп еттек, поезд килгәнсе Инйәрҙә һыу инергә лә өлгөрҙөк хатта.

Бына шулай, алдан күҙалланмаған ауырлыҡтар осрағас, башҡа: "Мин нинә бында килдем икән? Нимәгә кәрәк был миңә?" - тигән уй килгәйне. Ә инде һөҙөк юлдарҙа велосипедың өҫтөндә ял итеп, алға елгәндә, матур-матур ауылдар аша үткәндә, бөтмәҫ ләззәт кисерелде. Бына шундай сәфәр булды был.

### Нимәне яңылыш эшләгәнбеҙ?

Сәфәргә әҙерләнгәндә, нимәне дөрөҫ эшләмәгәнбеҙ? Беренсенән, палатканан баш тартҡанбыҙ. Мин хатта ямғырҙа бер тапҡыр кейә торған "дождевик" япмамды ла онотҡанмын. Икенсенән, интернетта һауа торошо ҡояшлы, матур була, тип вәғәҙә ителә ине. Шул мәғлүмәткә ышаныу ҙа ярамаған. Ямғыр яуыр ҙа, беҙ аҙашырбыҙ, тигәндә башыбыҙға ла килтермәгәйнек. Белгән булһаҡ, палатка, йоҡо тоғо, һыу үткәрмәй торған гетралар алыр инек. Уларҙы мин бөтә походтарға ла алып йөрөтә торғайным да бит, әммә был юлы, йөк ауыр булыр, тип, ҡалдырып киткәйнем. Походта үҙеңә ышанырға кәрәк, әлбиттә, шулай ҙа төрлө хәлдәргә әҙер булыу ҙа мөһим.

### Нимәне дөрөҫ эшләгәнбеҙ?

Беҙ нимәне дөрөҫ эшләгәнбеҙ, нимәне - юҡ? GPS-карталы телефондарыбыҙ булыуы юлдан тайпылмаҫҡа ярҙам итте. Береһе бер нөктәнән икенсеһенә тиклем араны күрһәтте, икенсеһе беҙҙең ҡайҙа барыуыбыҙҙы асыҡланы. Беҙ ул карталарҙы быға тиклем походта йөрөгән кешеләрҙең кәңәштәре буйынса алғайныҡ. Картаһыҙ аҙашыр инек.

Был юлдан беҙгә тиклем үк үткән кешеләрҙең юлъяҙмаларын уҡыу алда нимәләр көтөүен күҙалларға ярҙам итте. Тағы, йылы эске кейем алыуыбыҙ яҡшы булды. Тағы, рюкзактарҙы велосипедҡа беркетмәүебеҙ ярҙам итте. Тау-таш араһында рюкзакты арҡаға артмаҡлап йөрөү күпкә уңайлыраҡ икән. Ахырҙа, "тимер аттар" һынатманы, алюминий рамлы велосипедтарыбыҙ үҙҙәрен бары яҡшы яҡтан ғына күрһәтте. Алыҫ юлдарға сыҡҡанда, велосипедың ныҡ ышанысла булырға тейеш...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай тәжрибә алған беҙҙең егеттәр - Артур Батыршин менән Денис Өмөтбаев. Артурҙың кәңәштәре велосипедлы сәфәргә сығырға теләүселәргә ярҙам итер, тигән ышаныста ҡалабыҙ. Шулай ҙа уларҙың методик ҡулланма булыуға дәғүә итмәүен дә хәтерҙән сығармау кәрәктер.**

Иҙел РӘХИМОВ
яҙып алды.



*Гәрәбәлә табылған бөжәктәр һәм ылыҫлы ағас ботағы.*

әйләнгән, тигән фекер менән нисек килешмәйһең инде. Гәрәбә ҡарағай сайырынан барлыҡҡа килгәнгә күрә һарғылт һәм үтә күренмәле лә инде.

Бындай мөһим асыштарҙан һуң ҡайһы бер ғалимдар уйға ҡала. Улар ошолай ҡыйыу фараз ҡора - әҫе көндәрҙә ҡарағай сайыр бүлеп сығара, йомшаҡ сайырға бөжәк-үҫемлектәр йәбешә, улар кире ысҡынып китә алмай һәм ... беҙҙең көндәргә хәтлем боҙолмай һаҡлана! Бындай хәлдең булыуы мөмкинме? Әлбиттә, бик мөмкин. Шуныһы ҡыҙыҡлы - был ҡыйыу фаразды тәҡдим иткән һәм ошо йүнәлештә эшләгән ғалимдар яңылышмай. Ысынлап та, тиҙҙән бөжәк-үҫемлектәрҙе үҙ ҡапҡанына, дөрөҫөрәге, ваҡыт ҡапҡанына эләктергән тәүге гәрәбәләр табыла ла башлай. Иҫ китмәле инде! Бынан 50 миллион йыл элек көн иткән бөжәк-үҫемлектәрҙе бөгөн ҡарап ултыр әле. Һүҙ ҙә юҡ, бындай гәрәбәләр әлегә күп табылмаған. Ә шулай ҙа табылғандарының да баһаһы үтә юғары. Бөгөн улар күп һорауҙарға асыҡлыҡ индерә башланы ла инде. Бына бөгөн, әйтәйек, тулы ышаныс менән, тәүге бал ҡорто бынан 100 миллион йыл элек барлыҡҡа килгән, тип әйтергә була.

Бындай асыш бал ҡортло гәрәбә менән тулыһынса раҫлана. Был гәрәбә 2006 йылда табылған. Әйткәндәй, бына ошо табыш, бал ҡорто ниндәй бөжәктән барлыҡҡа килгән, тигән бәхәскә лә тулы асыҡлыҡ индерҙе. Хәҙер ғалимдар, бал ҡорто һағыҙаҡтан барлыҡҡа килгән, тигән фараз менән тулыһынса килешә. Ысынлап та, гәрәбәлә һаҡланып ҡалған бөжәктең ҡайһы бер көүҙә өлөшө бал ҡортоноҡона, ҡайһы ере һағыҙаҡтыҡына тура килә.

Бына ошо гәрәбәлә һаҡланып ҡалған бал ҡортона ҡарап, шулай уйлап ҡуям - беҙгә, кешеләргә, тәбиғәттә көн иткән бөжәктәргә оло хөрмәт менән ҡарау кәрәктер! Улар бит тәбиғәткә бер нисә йыл ғына эсендә түгел, ә йөҙәр-йөҙәр миллион йылдар буйына яраҡлашҡан. Шуға күрә лә уларҙың иң һәйбәттәре генә беҙҙең көндәргә хәтлем килеп еткән.

Әғләм ШӘРИПОВ,
биология фәндәре докторы.
Бөрйән районы.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Көс сере

"Уҡсы билдәһеҙлеккә атһа, ул үҙенең оҫта булыуын асыҡлай. Әгәр баҡыр сымға атһа, тынысһыҙлана башлай... Приз уның бөтөнләгән емерә. Ул тулҡынлана. Ул атыуға ҡарағанда еңеү тураһында күберәк уйлай - еңеү теләге уны көстән мәхрүм итә", ти Джуан-Цзы. Шуның кеүек, кортта ракетканы бер нисә тапҡыр һелтәп йәки футбол яланында бер нисә пенальти тибеп, ҡапыл спорттың ябай уйын ғына булмауын аңлайһың. Шул ваҡытта ни өсөн етди өлкән кешеләрҙең - бухгалтерҙарҙың, шоферҙарҙың, нейрохирургтарҙың, банк клерктарының ял көндәрендә, эҫегә йәки ҡойма ямғырҙарға ҡарамаҫтан, туп артынан сабыуы асыҡлана. Нимәнелер үҙең эшләп ҡарап ҡына тормош ҡанундарын аңлайһың. Спорт - күңел асыу ғына түгел, спорт - ул үҙеңдең эске көсөңдө таныу.

**Ағымдағы мәл менән йәшәгеҙ.** Күп ваҡытыбыҙҙы уйланып үткәрәбеҙ, күп уйлайбыҙ. Әммә гол индергәндә йәки әһәмиәтле мәрәй алғанда иҫәп тураһында онотаһың. Ни тиклем еңеү тураһында уйламайһың, шул тиклем тирә-яҡтағыларҙың һинең турала нимә уйлағандары хаҡында уйлап борсолмайһың, һәм барыһы ла яҡшы килеп сыға.

**Тупаҫ көс зыянлы.** Ысын көс - тыныслыҡта. Тупҡа бар көсөңдән тибергә кәрәкмәй, ҡапҡаның ҡайҙа икәнен белергә кәрәк. Ысын көс уны күрһәтергә теләмәгәндә барлыҡҡа килә. Был бигерәк тә кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә мөһим.

**Ҡыҙмағыҙ.** Асыу - һәр эштә лә зыянлы. Асыулы гольф уйынсыһын күҙ алдына килтерәһегеҙме? Бындай кеше спорттың был төрөндә бер нәмәгә лә өлгәшмәй. Ә ярһыу автоуҙышсыны? Ул беренсе виражға тиклем генә йәшәйәсәк. Шуның кеүек, асыу ата-әсәләргә лә, мәктәп уҡытыусыларына ла зыянлы.

**Бөтөн донъя һиңә ҡаршы тип уйлаһаң, шулай буласаҡ та.** Үҙеңдең уңышһыҙлыҡтарыңда тирә-яғыңдағыларҙы ғәйепләү файҙаһыҙ. Командалаштарың йәки судьялар тәгәрмәскә таяҡ тыға, уйыңды ел йәки ямғыр боҙа тип уйлаһаң - шулай буласаҡ та. Спортсы ла, эшҡыуар ҙа үҙенең эштәре һәм ғәмәлдәре өсөн үҙенә ҙур яуаплылыҡ алғанда ғына уңышҡа өлгәшә, ә барыһын да әсәһенә йәки ауыр бала сағына япһарғанда түгел.

**Үҙегеҙҙән ни тиклем күпте талап итәһегеҙ, тормошта шул тиклем күберәккә өлгәшәһегеҙ.** Майкл Джорданға йәки Штеффи Графтҡа ҡарап, ябай кеше, ғәҙәттә, уларға талант, башҡаларға ҡарағанда тыумыштан күберәк бирелгән, тип һанай. Әммә донъяла һәләтле балалар бик күп тыуа, ләкин улар бөйөктәрҙән айырмалы, үҙҙәренән әҙерәкте талап итә.

**Тормошта ла, спортта ла ҡурҡҡан нәмәгә түгел, ә теләгән һөҙөмтәгә иғтибар тупларға кәрәк.** Ҡурҡыу - спортта ғына түгел, уңышлы булырға теләгән теләһә ниндәй өлкәлә лә уңышһыҙлыҡ гарантияһы. Ҡурҡыуығыҙға иғтибар туплап, һеҙ уйығыҙҙа һәләкәтле образдар тыуҙыраһығыҙ һәм үҙегеҙҙе автоматик рәүештә уңышһыҙлыҡҡа программалайһығыҙ.

Ҡыҫҡаһы, һәр бала бәләкәйҙән үк ниндәйҙер спорт төрө менән шөғөлләнергә тейеш. Призлар өсөн түгел, ә тормош ҡанундарын, шуларҙың береһе булған: **ниндәй булып стартҡа баҫыуың түгел, ә ниндәй булып финишҡа етеүең мөһим,** тигәнде аңлау өсөн.

Эндрю МЭТЬЮЗ.
(Дауамы бар).



## 4 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт" (16+).
12.50, 17.00, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Второе зрение". 5-я и 6-я серии. Детективный сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Морозова". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Черный список", "Заколдованный круг". Детективный сериал (16+).
00.45 "Провокатор". Детективный сериал (16+).
02.45 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Учим башкирский язык" (12+).**
**17.15 "Бизнес-проба" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - ХК "Динамо" (Москва).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Рэд". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 5 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 02.15, 03.05 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00, 00.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 03.30 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 01.20 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Второе зрение". 7-я и 8-я серии. Детективный сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.05 Ночные новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Масло", "По совести". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Любовь должна быть счастливой", "Тень из прошлого". Сериал (16+).
00.45 "Провокатор". Детективный сериал (12+).
02.45 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент".**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Заклятие долины змей". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 6 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00, 01.20 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 02.20, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Второе зрение". 9-я и 10-я серии. Детективный сериал (16+).
23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 Ночные новости.
00.15 "Все слова о любви". К 90-летию режиссера Владимира Наумова (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Цифровая эпоха", "Орел и решка". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Личные интересы", "Смерть поэта". Сериал (16+).
00.45 "Провокатор". Детективный сериал (12+).
02.4 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.00 "Марс. Покорение" (12+).**
**17.45 "Орнамент (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Точка зрения ЛДПР" (16+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Особо опасна". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 7 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.20 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.20 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00, 01.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00, 02.15, 03.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Второе зрение". 11-я и 12-я, заключительная, серии. Детективный сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
12.55, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести"
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести-Башкортостан".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Последний вызов", "Ближний круг". Сериал (16+).
00.45 "Провокатор". Сериал (12+).
02.45 "Фамильные ценности". Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Дама под вуалью". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Бай" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.00 "Марс. Покорение" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Автограф" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Коломбиана". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 8 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Бабий бунт".
12.50, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
23.30 "Голос". Новый сезон (12+).
01.30 "Вечерний Ургант" (16+).
02.25 "Убей меня трижды". Триллер (18+).
04.05 "Лицо любви". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым" (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
15.00 "Морозова". "Нежная смерть", "Блондинка". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Тайны следствия". "Решала", "Отец". Сериал (16+).
00.45 "Провокатор". Сериал (12+).
02.45 "Фамильные ценности". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Рудольф Нуреев" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н.Гаитбаев. "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**16.00 "Гора новостей" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**24.00 "Красная жара". Худ. фильм (18+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз).**
**02.15 Д.Юлтый. "Карагул" (12+).**

## 9 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.55, 06.10 "Под каблуком". Сериал (12+).
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Летучий отряд".
10.55 "Михаил Евдокимов. Все, что успел" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.25 "На 10 лет моложе" (16+).
14.20 "Ирина Муравьева. "Не учите меня жить!"
15.15 "Время кино".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 Фигурное катание. Финал Гран-при. Женщины. Произвольная программа. Передача из Японии.
19.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
21.00 "Время".
21.20 "Голос". Новый сезон (12+).
23.15 "Прожекторперисхилтон" (16+).
23.50 "Короли фанеры". Музыкальное шоу (16+).
00.40 "Заложница". Боевик (16+).
02.25 "Развод". Комедия (12+).
04.40 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.40 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.35 Мультутро "Маша и медведь".
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Измайорвский парк". Большой юмористический концерт (16+).
14.40 "Валькины несчастья". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.40 "Стена". Игровое шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Мне с вами по пути". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.55 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Детективный сериал.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 20.00 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Монстр в Париже" (6+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "Свой вес" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**11.45 "Замандаш".**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Орнамент".**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 "Колесо времени" (12+).**
**17.55 Волейбол. Чемпионат России. Суперлига. ВК "Урал" (Уфа) - ВК "Кузбасс" (Кемерово).**
**20.30 "Сәңгелдәк".**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**24.00 "Кровью и потом: анаболики". Худ. фильм (16+).**
**02.15 Новости недели (на башк. яз.).**

## 10 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Под каблуком". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.00 Новости.
10.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
11.10 "Смак". Кулинарное шоу (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дорогая переДача".
12.45 "Теория заговора" (16+).
13.45 К 25-летию Казначейства России. Большой праздничный концет в Государственном Кремлевском Дворце.
15.45 Фигурное катание. Финал Гран-при. Показательные выступления. Трансляция из Японии.
17.30 "Русский ниндзя".
19.30 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия.
23.40 "Невероятная жизнь Уолтера Митти". Приключения (12+).
01.45 "Шакал". Худ. фильм (16+).
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1

04.55 "Срочно в номер!-2" Сериал (12+).
06.45, 02.40 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.30 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 Кастинг Всероссийского открытого телевизионного конкурса юных талантов "Синяя птица".
11.50 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
17.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица".
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
24.00 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий".
01.00 "Следствие ведут ЗнаТоКи". Сериал.

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Дети-герои".**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма".**
**12.30 "Итоги недели" (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.45 "Дорога к храму".**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Локомотив" (Ярославль).**
**19.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.15 "Полезные новости" (12+).**
**19.30 "Дознание" (16+).**
**20.00 "Итоги недели".**
**20.45 Футбол. РФПЛ. ФК "Ростов" (Ростов-на-Дону) - ФК "Уфа".**
**23.00 "Красная кнопка" (16+).**
**23.45 "Вечер.com" (12+).**
**00.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.30 "Страховщик". Худ. фильм (16+).**


*ИҒЛАН*

Квитанции 97693004, 97695598, выданные СК СПАО "Ресо-Гарантия", считать недействительными.

**✓ Бөгөн иһә дебет шәлдән килгән килем тулыһынса оҫтабикәнең ғаилә бюджетын тулыландыра. Әлеге фестиваль шәл бәйләүселәргә туранан-тура һатып алыусы менән бәйләнеш урынлаштырырға мөмкинлек бирә.**



КӨН ҠУРҒӘН ШӨҒӨЛ

**Өфөлә "Башҡорт шәле - 2017" исемле матур фестиваль-конкурс үтте. Әсә көнөнә арналған быйылғы байрамда республиканың төрлө район һәм ҡалаларынан 150-нән ашыу оҫта ҡатнашты. Йәмғиәттә башҡорт дебет шәленә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыуҙы, "Башҡорт дебет шәле" брендын булдырыуҙы, халыҡ оҫталарының профессиональ кимәлен үҫтереүҙе, тәжрибә уртаҡлашыуҙы һәм ижади бәйләнештәрҙе күҙҙә тотҡан фестиваль-конкурс быйыл 10-сы тапҡыр уҙғарылды.**

# ДЕБЕТ ШӘЛЕҢӘ УРАН...



БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, "Агиҙел" Башҡорт художестволы кәсепселек предприятиеһы, Өфө ҡала округы, республика район һәм ҡала хакимиәттәре тарафынан ойошторған сара Стәрлебаш, Федоровка, Күгәрсен, Ҡыйғы, Йылайыр, Ейәнсура, Салауат, Миәкә, Хәйбулла, Көйөргәҙе, Бишбүләк районларынан һәм Өфө, Бөрө, Салауат, Туймазы, Күмертау, Стәрлетамаҡ ҡалаларынан шәл бәйләү оҫталарын йыйҙы. Фестиваль барышында кәзә дебетенән бәйләнгән әйберҙәрҙәрҙән күргәҙмә ойошторолдо, оҫталарҙың иң яҡшы эштәре баһаланды, шәл бәйләүсе командалар араһында ижади конкурс үтте. Шулай уҡ һәр кем оҫталыҡ дәресе алды. Байрамды "Һылыуҡай" матурлыҡ студияһы ҡыҙҙарының "Башҡорт шәле - милли костюмдың бер өлөшө" исемле дефилеһы биҙәне.

Дебет шәл бәйләү башҡорттарҙа электән килгән кәсеп. Дебет кәзәләре һаны элегерәк һәр йортта 10-15 башҡа барып еткән, ә ҡайһы бер ғаиләләр 30-лап ваҡ мал аҫраған. Бөгөнгө көндә лә йөн биреүсе кәзәләр тотоусылар күп. Мәҫәлән, Йылайыр районы Һултантимер ауылында йәшәүсе Зәлиә Сыңғыҙова хужалығында 9 дебет кәзәһе бар. "Кәзәләрҙе көтөүҙә, тарауҙа ирем һәм улдарымдың ярҙамы ҙур. Мамыҡты таҙартыу, тетеү кеүек эштәрҙе ҡыҙым менән башҡарабыҙ йәки күрше-тирәне "Дебет өмәләре"нә йыям", - ти оҫта. Шәл бәйләү серҙәренә балалыҡ класта уҡығанда әсәһенән өйрәнгән Зәлиә Ғәзиз ҡыҙы шәлдең ситтәрен кәкерсәк, һалма, ҡош өйөрө, сәскә, бесәй табаны биҙәге, сылбыр, йөрәк һәм ҡарағай исемле биҙәктәр менән матурлай. Мауыҡтырғыс, насар уйҙарҙан арынырға ярҙам итеүсе был шөғөлдән шәл бәйләүсе арыу ғына килем дә ала. Ул бәйләгән енел, йылы шәлдәр, бәләкәстәр һәм ололар өсөн бейәләй-ойоҡтар, жилеттар һәр ваҡыт үҙенең һатып алыусыһын таба.

Элекке замандарҙа дебеттән бәйләнгән әйберҙәрҙе, шул иҫәптән шәлде лә һатыу тулыһынса тиерлек алыпһатарҙар ҡулында була. Улар ауылдар буйлап йөрөп, дебеттән шәл, шарф, бейәләй-ойоҡ һәм башҡа әйберҙәрҙе осһоҙ ғына хаҡҡа күпләп һатып алған. Әҙер тауарҙы иһә Мәскәү, Петербург, Түбәнге Новгород һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа юғары хаҡҡа һатҡан. XIX быуат аҙаҡтарында башҡорт шәлдәрен хатта Париж, Берлин, Лондон һәм хатта АҠШ-та уҙған күргәҙмәләрҙә осратырға мөмкин булған. Бөгөн иһә дебет шәлдән килгән килем тулыһынса оҫтабикәнең ғаилә бюджетын тулыландыра. Әлеге фестивалдең ошо йәһәттән әһәмиәте ҙур. Ул шәл бәйләүселәргә туранан-тура һатып алыусы менән бәйләнеш урынлаштырырға мөмкинлек бирә. 45 йыл ғүмере эсендә тиҫтәләгән шәл бәйләгән оҫта, Стәрлетамаҡта йәшәүсе Римма Ғәбиҙуллина ла күргәҙмәлә бер нисә шәлен һатып ҡыуанған. "Кейәүгә сыҡҡас та әсәйем шәл бәйләргә өйрәтте. Шәл һатыуҙан килгән аҡса бер ҡасан да артыҡ булмаҫ, ҡыҙым, тигән һүҙҙәре хаҡ булды. Донъя көткәндә, балалар уҡытҡанда ҡулымдың файҙаһын күп күрҙем. Әле лә заказ буйынса бәйләйем. Шәлдәремде республика ғына түгел, Рәсәй һәм хатта сит ил гүзәлкәйҙәреябына", - тип үҙ эштәре менән таныштырҙы ул.

Ололарҙың әнә уйнатып шәл бәйләп ултырыуҙары үҙе бер йәмле күренеш. Алыҫ араларҙы яҡынайтып, Ҡыйғы районынан килгән Сәүиә Йомағолова менән Зәйтүнә Хәйретдиноваларҙа фестивалгә күркәмлек өҫтәне. Йүкәлекүл ауылында йәшәүсе Сәүиә инәй, 80-гә етеп барыуына ҡарамаҫтан, күпереп торған мамыҡ шәлдәрен "бер тынала" бәйләйем, ти. Сара барышында ла ҡулдарына күҙ эйәртмәй шәлен бәйләү менән мәшғүл ине. "Беҙҙең төбәктә шәл бәйләүселәр күп түгел, беҙ генә, оло быуын, башҡорттоң ошо матур ҙа, файҙалы ла традицияһын онотмайынса тотоп киләбеҙ. Йәштәр әллә ни ҡыҙыҡһынмай шул", - тип үкенесен белдерҙе Сәүиә Иҙрис ҡыҙы.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ



# "МИРАҪ"ТАР - ГАСТРОЛДӘ

**"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле Силәбе тамашасылары алдында сығыш яһаны. Концерт Көньяҡ Уралда йәшәгән халыҡтың күңелендә онотолмаҫ тәьҫораттар ҡалдырҙы, тип хәбәр итә "Уралым" телетапшырыуы журналистары.**

Концерт программаһында моңло йырҙар, донъя халыҡтарының дәртле бейеүҙәре һәм театрлаштырылған хореография-йыр композициялары ҡаралғайны. Сәхнә образдарының төрлөлөгө, профессионалдарҙың сығыштары, ҡурай моңдары бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Силәбеләргә коллективтың иң яҡшы солистарынан бейеү сәнғәте серҙәренә өйрәнеү мөмкинлеге бар ине. Оҫталыҡ дәресе барышында талант эйәләре Көньяҡ Уралда милли бейеүҙең үсешен һәм урындағы ижади коллективтарҙың үҙенсәлеген билдәләне. Башҡорт йыр-бейеү ансамбленең концертына төрлө милләтле тамашасылар килгәйне. Улар араһында театр, хореография колледждары һәм университеттары студенттарын, ижади төркөмдәрҙә ҡатнашыусыларҙы, милли мәҙәниәтте һөйөүселәрҙе, юғары сәнғәткә табыныусыларҙы күрергә мөмкин ине. Сара Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиллеге булышлығында ойошторолдо. "Мираҫ" Көньяҡ Урал тамашаһына ансамбль ойошторолғандан алып таныш. 2000 йылдар башында артистарҙың Силәбе өлкәһендә үткәрелгән милли сараларҙа сығыш яһауы изге йолаға әүерелде. Коллектив етәксеһе Байрас Ишбирҙин Көньяҡ Уралда ансамблдең ижади осрашыуҙарын тергеҙеү тәҡдимен индерҙе.

Ансамбль Силәбе ҡалаһындағы концерты менән Башҡортостандың 100 йыллығын байрам итеү һәм 2020 йылда үтәсәк Бөтөн донья фольклориадаһына әҙерлек сиктәрендә ойошторолған гастролдәрен тамамланы. Концерттар 13 ноябрҙә Мәләүез ҡалаһында башланғайны. Унан һуң артистар Шишмә, Ҡырмыҫҡалы, Толбазы ауылдарында, Силәбе өлкәһенең Златоуст ҡалаһында сығыш яһаны. Декабрҙә ансаблдең республика буйлап гастролдәре дауам итәсәк. 6 декабрҙә Бәләбәй, 8 декабрь Иглин, 14 декабрь Приютово халҡы яраткан артистары менән осраша аласаҡ. 13 декабрҙә Өфөлә Ҡала мәҙәниәт һарайында сығыш яһауҙары көтөлә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Декабрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (15) дүшәмбе | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 5 (16) шишәмбе | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 6 (17) шаршамбы | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 7 (18) кесе йома | 7:57 | 9:27 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 8 (19) йома | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:17 | 16:17 | 18:17 |
| 9 (20) шәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:17 | 16:17 | 18:17 |
| 10 (21) йәкшәмбе | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:17 | 18:17 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 декабрь "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

**3 декабрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+

**6 декабрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**8 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**2 декабрь "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**3 декабрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**7 декабрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия 16+

**8 декабрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г. Зәйнәшева), комедия 16+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Ҙур зал**

**2 декабрь "Девочка и пришелец"** (Б. Хан) 0+
**3 декабрь "Носорог и жирафа"** (Х. Гюнтер) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

**Бәләкәй зал**

**2, 3 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 16.00 0+

**7, 8 декабрь "Что такое Новый год?"** (В. Щербакова), Яңы йыл тамашаһы. Башлана 12.00, 16.00 0+

✓ ***Башҡорт һуҡма шәлдәренең даны элек-электән киң таралған. Әле XIX быуат аҙағында уҡ урыҫ этнографы С.И. Руденко Ырымбур губернаһында йәшәүсе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иҫ киткес йылы шәлдәр һуғыуҙары тураһында яҙған.***

*КӨН КҮРГӘН ШӨҒӨЛ*

# ДЕБЕТ ШӘЛЕҢӘ УРАН...



**(Башы 15-се биттә).**

Шуныһы ҡыуаныслы, шәлдәре менән дан тотҡан Ейәнсура районында ололар ғына түгел, йәштәр ҙә был эште илһамланып башҡара. "Шәлде бала саҡтан бәйләйем. Беҙҙә, ғөмүмән, шәл бәйләй белмәгән ҡатын-ҡыҙ юҡ. Һәр әсәй ҡыҙын ошо оҫталыҡҡа өйрәтеүҙе бурысы итеп һанай. Шуға күрә йәштәр араһында ла шәл бәйләүгә маһирҙар бихисап", - ти Байыш ауылында йәшәүсе Айгөл Мөхәмәтйәнова. Уның һүҙҙәрен Ейәнсуранан килтерелгән, киң өҫтәлдәрҙе тултырып мамыҡтай күпереп ятҡан төрлө ҙурлыҡтағы шәлдәрҙең һәм дебеттән бәйләнгән башҡа әйберҙәрҙең күплеге иҫбатлай. Был районда нәҙек, әммә шул уҡ ваҡытта ныҡ, иләү өсөн уңайлы йөн биреүсе "Байыш кәзәләре" тоҡомо айырыуса һанлана икән. Уның йөнөнән бәйләнгән шәлдәр ҡабарынҡылығы, еңеллеге һәм йылылығы менән айырылып тора. Шуға күрә, ситтән килеп, нәҡ ошо тоҡомдоң йөнөн һатып алырға теләүселәр ҙә йылдан-йыл арта барыуына аптырарға түгел, ти Ейәнсура ҡыҙҙары.

Әҙер шәлдең артында күпме көс түгелгәнлеген, ваҡыт сарыф ителгәнлеген уны бар күңел йылыһын һалып, күҙ нурҙарын түгеп бәйләгән кеше генә аңлайҙыр. Шәл бәйләү өсөн тотонолған йомғаҡтың "үткән" юлы ла бик оҙон. Кәзәнең йөнөн тәүҙә тараҙарталар, унан тетәләр, һуңынан аялайҙар. Унан һуң иләп, сираталар ҙа йомғаҡ эшләйҙәр. Шәлде бәйләгәндән һуң уны кирәләр. Федоровка районы Бала-Сытырман ауылы ҡатын-ҡыҙҙары, халҡыбыҙҙың ике матур йолаһын бергә үрелдереп, йыйылышып кис ултырып, бөтә был эштәрҙе бергә башҡара. "Кәзә малмы ни", тиһәләр ҙә, уның йөнөнән әллә күпме файҙа күрәбеҙ", - тиҙәр ошо уҡ райондың Денискино, Юрматы, Балыҡлыбаш ауылы шәл оҫталары.

Бөрө ҡалаһының тарих музейы эргәһендә эшләп килгән "Ебәк юл" туҡыусылыҡ үҙәгендә боронғо станоктарҙа һуҡма шәлдәр эшләйҙәр. Башҡорт һуҡма шәлдәренең даны элек-электән киң таралған. Әле XIX





быуат аҙағында уҡ урыҫ этнографы С.И. Руденко Ырымбур губернаһында йәшәүсе башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының иҫ киткес йылы шәлдәр һуғыуҙары тураһында яҙған.

- Формаһын юғалтмаһын өсөн шлёнка йәки еп ҡушылып бәйләнгән шәлдәрҙән айырмалы рәүештә, һуҡма шәлдәр тик дебеттән генә эшләнә. Шуға күрә уның ҡулланылыу ваҡыты 100 йылға тиклем барып етә. Һуҡма шәлдең осон сәсәктәр менән биҙәйҙәр. Улар шәлгә матурлыҡ ҡына бирмәй, ә йылылыҡ өҫтәй. Беҙ традицияны һаҡлайбыҙ, һуҡма шәлдең "брендын" күтәреү өҫтөндә эшләйбеҙ. Башҡорт дебет шәле халҡыбыҙҙың кәсепселек теҙмәһендә иң лайыҡлы һәм абруйлы урынды алып тора. Ошо һөнәрҙе онотмаҫҡа, уны бөгөнгө көндә лә кәрәкле итергә тырышыуыбыҙ файҙаһыҙ булмаҫ, тип ышанам, - ти үҙәк директоры Роза Вәкил ҡыҙы Ғарифуллина.

Һәр конкурстың иң тулҡынландырғыс мәле - еңеүселәрҙе билдәләү. Фестивалдә ҡатнашыусылар араһынан иң-индәрҙе һайлап алыу жюриға - Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры урынбаҫары Нәфисә Тулыбаеваға, "Ағиҙел" БХК ДУП-ы генераль директоры урынбаҫары Гөлүсә Ризвановаға, "Башҡорт шәле" предприятиеһы директоры Алһыу Әбсәләмоваға, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Сәрүәр Суринаға, "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" Башҡарма комитетының баш белгесе Алһыу Сирғәлинаға, "Урал" халыҡ сәнғәте галереяһы Кәримә Кайдаловаға - биллаһи, еңелдән булмағандыр. Шулай итеп, быйылғы фестиваль-конкурстың еңеүселәре итеп "Дебет шәл" номинацияһында Мәләүез ҡалаһынан Гөлсимә Иҫәнғолова, ә "Селтәрле шәл" номинацияһында Ейәнсура районынан Шәрифә Ҡорманаева табылды. Дебет шәл бәйләү оҫталыҡтары өсөн Күмертауҙан Әлфиә Шәмиғолова, Стәрлетамаҡтан Римма Ғәбиҙуллина, Көйөргәҙе районынан Вәсилә Ғәббәсова фестиваль лауреаттары дипломына лайыҡ булдылар. Селтәрле шәл өсөн шулай уҡ диплом Ейәнсура районынан Мәғәфиә Ильясоваға, Стәрлебаш районынан Нәфизә Йәһүҙинаға,



Йылайыр районынан Мәғүҙә Һөйөндөковаға тапшырылды.

2020 йылда Башҡортостан Бөтә донъя Фольклориадаһын ҡабул итәсәк. Унда беҙ халҡыбыҙҙың һөнәри оҫталығын бар яҡлап та күрһәтергә тейешбеҙ. "Башҡорт шәле - 2017" республика фестиваль-конкурсы Фольклориадаға әҙерлек барышында уҙғарылған сараларҙың береһе булды. Ләкин республика кимәлендә уҙғарылған фестиваль өсөн ҡатнашыусылар һаны бик аҙ, тип билдәләргә кәрәк. Башҡортостандың башҡа райондарында ла шәл бәйләү оҫталары бик күп. Ләкин ни өсөн улар баш ҡалаға килеү форсаты тапмаған, тигән һорау тыуа. Эш бында шәхси теләк юҡлыҡтамы, әллә урындарҙа оҫталарҙы ойоштороп алып килеү кимәле түбәнлегендәме? Шулай уҡ сит төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе лә ошондай сараларға ылыҡтырыу, саҡырыу һәм ҡатнаштырыу бик кәрәкле эш булыр ине.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бөйөк Ватан һуғышына тиклем әле Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында шәл бәйләү буйынса "Азатлыҡ" артеле эшләгән. Артель шәл бәйләү өсөн дебет биргән һәм әҙер әйберҙәрҙе һатып алған. Бөгөн дә ошондай уҡ предприятиелар булдырыуҙы ауылдарҙа ҡатын-ҡыҙҙарҙы эш менән тәьмин итеүҙең бер юлы булараҡ ҡарарға мөмкин. Сифатлы ҡул эше һәр ваҡытта ла юғары баһалана һәм һатып алыусыһын таба бит.**

**Гөлназ МАНАПОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АСЫУ - АЛДАН,

## аҡыл - арттан

Һүҙ - һуған ҡабығы: береһен асһаң, икенсеһе сыға.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡ бәхет була алмай. Ҡартлыҡ - тыныслыҡ һәм бәлә генә була ала. Уны хөрмәт итһәләр, ҡартлыҡ тыныслыҡ кисерә. Онотһалар һәм яңғыҙлыҡта ҡалдырһалар, ул бәләгә әүерелә.

**(В. Сухомлинский).**

Аҡсаның ылыҡтырғыс тәьҫиренә ҡаршы тора алмағандар бер ваҡытта ла бәхетле була алмай.

**(Демокрит).**

Теләктәр аҙғынлығы беҙгә булғандар менән файҙаланырға ла ҡамасаулай.

**(Плутарх).**

Ҡайһы саҡта беҙ ҡурҡҡан нәмәләр беҙ теләгән һәм ынтылған нәмәләрҙән хәүефһеҙерәк булыуы мөмкин.

**(Д. Коллинз).**

Хыял менән уйнау хәүефле: уның юҡҡа сығыуы бәхетһеҙлеккә әүерелеүе мөмкин; хыял артынан ҡыуып, ғүмерендә сарыф итеүең йә аҡылһыҙ хыял итеүҙән ғүмерендә ҡорбан итеүең дә бар.

**(А. Герцен).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Өс дуҫтың береһе ғәҙел, икенсеһе изгелекле, өсөнсөһө хәйләкәр була. Бына бер саҡ улар ил буйлап сәйәхәт итергә сығып китә. Йөрөй торғас, аҙашалар, аҙыҡтары ла бөтә. Бары тик бер киҫәк икмәк менән бик аҙ ғына һыуҙары ҡала. Төн етә. Дуҫтар ҡалған ризыҡты ашап тормаҫҡа, иртәнгелеккә ҡалдырырға ҡарар итә һәм ас көйө йоҡларға ята. Иртән йоҡонан торғас, дуҫтарҙың ғәҙел булғаны былай тип һүҙ башлай: "Бик ҡыҙыҡ төш күрҙем. Ҡалған ризыҡты бүлә башлағанбыҙ икән, тим. Тик нисек ғәҙел итеп бүлергә белмәйбеҙ. Шул саҡта Хоҙай Тәғәләнән тауыш ишетелә: "Тигеҙ итеп бүл!" Шулай итеп, ризыҡты тигеҙ бүлеп, үҙ өлөшөмдө ашап, тамаҡты туйҙырҙым..." "Мин дә төш күрҙем, - ти икән дуҫтарҙың изгелеклеһе. - Ризыҡтың үҙемә тейешлеһен һеҙҙең ҡайһығыҙға бирәйем икән, тип баш ватҡанда Хоҙай Тәғәләнең тауышын ишетәм: "Үҙеңә тейешле икмәк өлөшөн дуҫтарыңа бүл, валсыҡтарын ҡоштарға бир. Һыуҙы ла дуҫтарың менән бүлеш, ҡалған тамсыларын үләнгә һип". Мин шулай иттем һәм үҙем ҡылған изгелектән туйҙым да, сарсауымды ла баҫтым..." "Ә мин шундай төш күрҙем, - ти икән хәйләкәр дуҫ. - Аслыҡтан йоҡлай алмайым икән, ти. Шул саҡта Хоҙай Тәғәлә тауышы ишетелә: "Һинең дуҫтарың тамаҡ туйҙырҙы инде, береһе - ғәҙеллеге, икенсеһе - изгелеге менән. Һин ниңә йоҡлап ятаһың? Тор һәм тоҡта ҡалған икмәкте аша, һауытта ҡалған һыуҙы эс". Мин шулай иттем дә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 1 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 2445/11